*✓ Гәзиткә яҙылырға онотҡандарға еткерегеҙ: 15 августа саҡлы яҙылһалар, гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башлаясаҡтар. Был мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырһалар, йыл аҙағына тиклем "Киске Өфө"һөҙ йәшәйәсәктәр. Тимәк, бик күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр барып етмәйәсәк, бик күп һорауҙары яуапһыҙ ҡаласаҡ. Хаҡтар: 50665 индекслы "Киске Өфө" дүрт айға 212 һум 16 тин, 50673 индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - 236 һум 16 тин.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17 - 23 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №29 (395)



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Енәйәт төнөн ҡотора, йәки Тыйылған татлы булыуы ла ихтимал түгелме?



5

Халҡыңдың үткәнен белеү...



8-9 халҡыңдың киләсәгенә нигеҙ

Йөрәгемде яҡтырт, Хоҙай...

халҡым өсөн



11

Абруйлы ғына түгел...

кәрәкле һөнәр һайла



15

14 ТВ-программа


ДИАЛОГ

# ТОРАТАУҘАР МӘҢГЕ ТОРАСАҠ,

## йәки Ырыуҙар ташына милләт шәжәрәһе яҙыласаҡ

**Toратау - башҡорттар өсөн ҡәҙимге бер географик төшөнсә генә түгел. Боронғо риүәйәттәргә ярашлы, Башҡортостан территорияһында туфан һыуы ҡалҡҡан геологик эпохалар осоронда барлыҡҡа килгән айырым-айырым тороусы тауҙар теҙмәһе, йәғни шихандар, башҡорттар өсөн иң изге урындарҙан һаналған. Шәкетау, Йөрәктау, Ҡуштау, Торатау... Һуңғыһы ҡасандыр әүлиәләр төйәге булһа, шул уҡ тау итәгендә хан урҙаһы шау-гөр килеп торған, күркәм мәжлестәр, ат сабыштары, батырҙар көрәше уҙғарылған, хан сиреүенең таҫыллы һәм ҡуш йөрәкле яугирҙары маһирлығын йыйылған халыҡ тамаша ҡылған. Торатау итәгендә бөтөн башҡорт ырыуҙары вәкилдәре ил хәлдәрен барлаусы, ер-йорт яҙмышын билдәләүсе оло йыйындарын ҡорған. Гәзитебеҙҙең был һанында һеҙҙең иғтибарығыҙға журналист Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВТЫҢ "Ырыуҙар ташы" тарихи-этнографик монументаль комплексын төҙөү буйынса архитектура проекттары конкурсында еңеүсе шәхесебеҙ, Стәрлетамаҡ ҡалаһының баш архитекторы Рөстәм ХАННАНОВ менән ҡорған әңгәмәһен тәҡдим итәбеҙ.**



**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тамамланыу менән, Торатау итәгендә Салауат йыйыны уҙғарылып, "Ырыуҙар ташы" тип аталған тарихи-этнографик монументаль комплекстың нигеҙ ташы һалыныуы үҙе үк күп нәмә хаҡында һөйләй. Дөрөҫөн әйткәндә, быға тиклем башҡорт халҡының эске төҙөлөшөн һүрәтләгән, уның ҡаҡшамаҫ берҙәмлеген сағылдырған монументаль архитектура әҫәрен булдырыу тураһында уйланған, уны ижад һәм рух емеше итеп, донъяға сығарырҙай әүҙем һәм талантлы заттар булманы шикелле. Ер йөҙөндәге барса башҡорттоң дөйөм шәжәрәһен, йәғни тормош ағасын кәүҙәләндереүсе монумент төҙөү идеяһының тап Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек барғанда тыуыуы һәм халҡыбыҙҙың олуғ ҡоро барышында ғәмәлгә ашырыла башлауы ла символик мәғәнәгә эйә: ҡоролтай халҡыбыҙҙы тупланырға, берләшергә, оло бер милли көс булып, ойошоп йәшәргә саҡырҙы. Боронғо тарихыбыҙ ҙа шуға дәлил: Урал итәгенән урғылып сығып, бер-береһенә ҡушыла барған шишмәләрҙән дарьялар хасил булған кеүек, ойоша-ҡушыла барыусы тиҫтәләрсә ырыу-тамырҙары менән мәңгелек төйәге - Уралға ерегеп, һис бер кәмемәҫ рухи ҡеүәт алған башҡорт халҡының тормош ағасы. Урал ташы мәңгелек тәбиғәт эҙҙәрен һаҡлаһа, халҡыбыҙҙың шәжәрә ағасы һәм ырыу атамалары уйылып ҡалдырылған "Ырыуҙар ташы" мәғрур һәйкәл сифатында алыҫ киләсәктә йәшәйәсәк башҡорт тоҡомдарына XXI быуат башҡорттарынан тарихи йәдкәр буласаҡ. Һеҙ, Рөстәм Кәрим улы, авторҙаштарығыҙ менән ошо монументты төҙөү буйынса ижади конкурста ҡатнашып, башҡорт халҡының этнографик мираҫына, символдарына, рухи булмышына тап килгән, эстетик яҡтан заманса архитектура сәнғәте талаптарына яуап биргән үҙенсәлекле проект тәҡдим иткәйнегеҙ. Һеҙ һәм авторҙаштарығыҙ, архитекторҙар Урал Ураҡсин, Вячеслав Седунов, Илшат Әхмәтов, скульптор Өлфәт Ҡобағошев ижад иткән проект конкурста еңеүсе тип табылды. Уйлауымса, был милли архитектура менән бәйле тәүге эшегеҙ түгел.

**Р. ХАННАНОВ:** Былтыр, әле Стәрлетамаҡ ҡалаһының баш архитекторы вазифаһына тәғәйенләнгәнгә тиклем, мин эшләгән проект ойошмаһы Красноусольский санаторийының 3-сө корпусында реконструкциялау эштәре алып бара ине. Санаторий директоры менән танышҡас, ул бында Учалынан килтерелгән 4 метрлы гранит таштан стела эшләү зарурлығы хаҡында белдерҙе. Мин ошо тәҡдим менән ҡыҙыҡһынып киттем. Стеланың ниндәй буласағы тураһында уйланғанда бер идея пәйҙә булды: ни эшләп гранит ташта башҡорт тамғаларын һүрәтләмәҫкә, ти?

**(Дауамы 6-7-се биттәрҙә).**

ИШАРА

**Быйылғы йәй үтә ҡыҙыу килде - эҫелек менән бер рәттән, баштарыбыҙ ҡыҙырлыҡ, йөрәктәребеҙгә ҡуҙ һалырлыҡ ижтимағи-сәйәси ваҡиғалар булып тора. Өсөнсө Бөтөн донъя ҡоролтайы милләттәштәребеҙгә халҡыбыҙҙың бөгөнгөһө һәм киләсәге менән бәйле уй-фекерҙәрен, тәҡдимдәрен, бығаса булмағанса, ҡыйыу һәм ҡәтғи рәүештә иғлан итеү мөмкинлеген бирҙе. Һәм тап шулай булырға тейеш ине лә: беҙ башҡорттар бит! Республикабыҙ башлығы - Президент алышыныған мәлдә арабыҙҙа ошо ҡыйыулығыбыҙға үкенес белдерен, баштарына ҡол һибеп йөрөүселәр ҙә бар. Әммә беҙ бөгөн дә, һис бер икеләнмәйенсә, ҡоролтайҙа яңғыраған бөтөн башҡорт халҡы фекерен ҡабатлап әйтергә тейешбеҙ: Башҡортостан Республикаһы Президенты мотлаҡ башҡорт булырға тейеш! Әгәр беҙ, башҡорттар, ҡоролтайыбыҙ резолюцияһында теркәлгән ошо ҡарарҙы бойомға ашыра алмайбыҙ икән, хоҡуҡһыҙ милләткә, ҡоллоҡ психологияһы өҫтөнлөк иткән халыҡҡа әүереләсәкбеҙ.**



# БЕҘ ҠОЛ ТҮГЕЛ,

## сөнки еребеҙ, телебеҙ, рухыбыҙ бар!

Ҡоллоҡ психологияһы тураһында һүҙ башлағас, Совет Рәсәйе тарихынан уҡый-яҙа белмәүсе кешеләрҙе уҡырға-яҙырға өйрәтеү менән бәйле бер ҡыҙыҡлы һәм фәһемле ваҡиға иҫкә төштө. 1919 йылда ябай халыҡты уҡырға-яҙырға өйрәтеү өсөн "Долой неграмотность. Азбука для взрослых" тигән китап сығарыла. Был китапты хәтергә төшөрөүемдең ғилләһе бына нимәлә: ошо ололар әлифбаһынан "Мы не рабы, рабы - не мы" тигән һөйләмде ижеклəп уҡытып, хәреф танырға өйрәтәләр бала саҡта мәктәптә уҡыуҙан мәхрүм ителгәндәрҙе. Ул замандарҙан бирле бер быуат самаһы ваҡыт уҙһа ла, әлеге революцион лозунг һаман да көнүҙәк булып ҡала. Ни өсөн? Ватандаштарыбыҙ араһында наҙан кешеләр юҡ тиерлек, әммә ҡолдар - күп.

Дөрөҫөн әйткәндә, ысынбарлыҡта совет кешеләренән власть даирәләренә бер һүҙһеҙ буйһонған рухи ҡолдар яһау коммунистик идеология әһелдәренең төп маҡсаты булды. Әйтергә кәрәк, улар ҙур оҫталыҡ күрһәтеп, үҙ маҡсатына бик тиҙ арала өлгәшә алды. Нисек шулай булмаһын, әгәр ул саҡта СССР тип аталған илдә йәшәүсе милләттәрҙең иң аҫыл, иң аҡыллы, иң намыҫлы ул-ҡыҙҙары бығаса күрелмәгән репрессияға дусар ителеп тә, халыҡ өнһеҙ-тынһыҙ ҡалғас? Айырым милләттәрҙән бер генә совет халҡын булдырыуға, халыҡтарҙы милли хазинаһынан - телдәренән яҙҙырыуға ҡаршы һүҙ әйтеүселәр булмағас? Хаҡтыр: ҡолдар - телһеҙ.

Беҙ, башҡорттар, Ер йөҙөндәге боронғо мәҙәниәтле халыҡтарҙың береһе. Был хәҡиҡәт - аксиома, һәм ул ғалимдар тарафынан да таныла бөгөн. Ә милләттәштәребеҙ өсөн бына нәмә мөһим: башҡорт тарихында ҡоллоҡ бер ҡасан да булмаған. Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы, донъя кимәлендә танылыу тапҡан шәреҡ тарихсыһы Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең "Башҡорттарҙың тарихы" тигән китабында IX-XII быуаттарҙа уҡ башҡорттар тураһында мәғлүмәтле булған сит ил сәйәхәтселәренең, миссионерҙарҙың ата-бабаларыбыҙҙың бер кемгә лә буйһонмай, үҙ ирке менән йәшәүе, ҡыйыу һәм ғәйәр ҡәүем булыуы хаҡында яҙып ҡалдырыуын иҫкә ала. Ҡандан-ҡанға, быуындан-быуынға күсә килгән азатлыҡ рухы менәр йылдар буйына халҡыбыҙҙы һаҡлап тороусы төп тарихи шарт була.

Беҙ, XXI быуат башҡорттары, ошо милли рух сафлығын һаҡлай алһаҡ, үҙебеҙҙе үҙаллы, бойондороҡһыҙ, ирекле халыҡ итеп тойһаҡ һәм барса гәмәлдәребеҙҙе ошоға ярашлы башҡара алһаҡ ҡына рухи ҡоллоҡ бығауҙарынан арынырбыҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, халҡыбыҙ йөҙәр йылдар дауамында геноцидҡа, ә һуңынан этноцидҡа нигеҙләнгән сәйәсәт йоғонтоһо һәҙәмтәһендә һан яғынан ғына түгел, милли сифаттары буйынса ла ауыр юғалтыуҙар кисерҙе. Бөгөн арабыҙҙа динһеҙҙәр, эскеселәр, наркомандар, ришүәтселәр, енәйәт ҡылыусылар, аҙып-туҙып йөрөүселәр, башҡа шундай иманһыҙ, рухһыҙ заттар бар икән, беҙ был аяныслы хәлдән нисек тә булһа котолоу юлын эҙләргә бурыслыбыҙ. Былар барыһы ла рухи ҡоллоҡ билдәләре бит! Ә үҙенең ҡол икәнен белеп тә, ошо халәтенә риза булып йәшәргә хоҡуғы юҡ башҡортмон тигән башҡорттоң!

Әй, милләттәштәр, башҡортса йәшәйек, маңҡортса түгел!

Беҙ ҡол түгел, телһеҙҙәр ҡол. Менәр йыллыҡ тарихы булған боронғо башҡорт теле бар, мәшһүр эпостарыбыҙҙы, тарихи риүәйәттәребеҙҙе, фәһемле әйтем-мәҡәлдәребеҙҙе, моңло йырҙарыбыҙҙы, хис тулы шиғриәтебеҙҙе бар иткән гүзәл телебеҙ бар. Балаларыбыҙға, ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә бишектә ятҡан сағынан алып үҫеп балиғ булғансы тел балылығын тапшырайыҡ, тик башҡорт мәктәптәрендә генә уҡытайыҡ. Киләсәк быуындарыбыҙҙы туған телһеҙ ҡалдырып, башҡаларҙың ҡоло итмәйек.

Беҙ ҡол түгел, динһеҙҙәр ҡол. Хаҡ Тәғәләнең һөйкөмлө халҡы беҙ, бар һәм бер Илаһыбыҙға тоғро ҡалайыҡ, барыбыҙ ҙа иман юлына баҫайыҡ. Фани донъябыҙҙа Ҡөрьән-Кәрим өйрәткән әхлаҡ ҡанундарынан тайпылмайыҡ, инсандың ерҙә үткән ғүмеренән аҙаҡ йәненең баҡыйлыҡҡа күсеүен, әхирәттә яуап бирәсәгебеҙҙе онотмайыҡ. Нәфсеһен тыя алмаусылар, аҡсаға, харам байлыҡҡа табыныусылар, ошо арҡала енәйәт ҡылыусылар - йәндәрен иблескә һатыусылар - бына кемдәр ҡол.

Беҙ ҡол түгел, ерһеҙҙәр ҡол. Башҡорт - донъяның аҫаба халҡы. Туйындырған да, кейендергән дә - ер, өйлә-йортло иткән, ырыҫ-ҡот килтергән дә - ер. Еребеҙ булһа, мәңге йәшәрбеҙ. Һаҡлайыҡ, һатмайыҡ еребеҙҙе, унан яҙһаҡ, башҡорт тигән асылыбыҙ юҡҡа сығыр, ҡоллоҡҡа юл асылыр.

Беҙ ҡол түгел, илһеҙҙәр ҡол. Урал тигән мәңгелек төйәгебеҙ бар, Башҡортостан атлы илебеҙ бар. Республика тигән статусыбыҙ, дәүләтселеккә хоҡуғыбыҙ өсөн даръялай ҡан ҡойолған, менәрләгән аҫылдарҙан-аҫыл ир-азаматтарыбыҙ йәндәрен ҡорбан иткән. Бөгөн Башҡорт иле йәшәһен өсөн ҡан ҡойоу ҙа, йән биреү ҙә талап ителмәй, әммә һәммәбеҙҙең рух ныҡлығы, ватансылығы, фиҙаҡәр эшмәкәрлеге кәрәк, милләтебеҙҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын яҡлау өсөн Рәсәй һәм Башҡортостан Конституцияларында билдәләнгән бөтә мөмкинлектәрҙе ваҡытында ҡуллана белеү кәрәк. Халҡыбыҙға республика статусын күҙ ҡараһылай һаҡлау зарур, дәүләтселекте юғалтыу милләтебеҙ өсөн емергес шартлауға тиң.

Беҙ ҡол түгел, халҡын етәкләр ҡөҙрәтле ил баштары, батырҙары һәм уҡымышлы заттары булмаған кәүемдәр ҡол. Батыр заттарға бай булғаныбыҙға шанлы-яулы һәм дә данлы тарихыбыҙ шаһит. Ҡаныбыҙға Алдар Исәкәев, Батырша, Ҡараһаҡал, Салауат Юлаев, Кинйә Арыҫланов, Әхмәтзәки Вәлиди, Муса Мортазиндар рухы һеңһә, аңыбыҙға Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Тажетдин Ялсығолов, Аҡмулла, Зәйнулла Рәсүлев, Ризаитдин Фәхретдинов кеүек аҡыл һәм ғилем эйәләренең өгөт-нәсихәттәре, фәһемле фекерҙәре дөрөҫ йүнәлеш бирә. Илен етәкләр ир-азаматтарыбыҙ булды һәм буласаҡ. Башҡортостан башында бөгөн дә киң белемле, тәүәккәл, намыҫлы һәм ғәҙел инсан, маһир идарасы һәләте булған башҡорт торорға тейеш. Был - халыҡ талабы, һәм ул мотлаҡ үтәлергә тейеш!

Беҙ ҡол түгел, үҙ ҡулғәһенән ҡурҡыусылар, һатлыҡ йәндәр ҡол. Башҡортостаныбыҙҙың менәрләгән ҡурҡыу белмәҫ улдары һуңғы яуға сығып, ҡоллоҡтан үлемде артыҡ күргән, үлгәндә лә азат кеше булып, донъялыҡтан әхирәткә уҙған. Бөгөн ил күге аяҙ, тормошобоҙ тыныс, әммә милли хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡлар өсөн дә йөрәкле булыу, үҙ ихтыярыбыҙҙы бер ниҙән дә шөбһәләнмәйенсә, бер кемдән дә ҡурҡмайынса белдерә алыу фарыз. Аллаға шөкөр, бар ундай ҡуш йөрәкле ил улдары һәм ҡыҙҙары Башҡортостаныбыҙҙа - Өсөнсө Бөтөн донъя ҡоролтайы шуға дәлил.

Беҙ ҡол түгел, рухһыҙҙар ҡол. Башҡорт халҡына мәңгелек рухи ҡөҙрәт Илаһтан бирелгән, әгәр ул илаһи көсҡеүәтебеҙ булмаһа, бөгөн беҙ булмаҫ инек. Башҡорт рухы аҫабалыҡтан, ватансылыҡтан, имандан, намыҫтан, ғәҙеллектән, кешелеклелектән, азатлыҡ, ирекле һәм ирекн йәшәү өсөн көрәштән яралған. Рухыбыҙҙы нығытһаҡ, яман көсләргә бер ҡасан да биреш-мәбеҙ. Иманыбыҙ камил: беҙ, башҡорттар, мең йылдар элек үк бар донъяға билдәле азат халыҡ булдыҡ, бөгөн дә барбыҙ, киләсәктә лә буласаҡбыҙ.

Беҙ ҡол түгел, сөнки телһеҙ түгелбеҙ, бар донъяға әйтер һүҙебеҙ бар.

Беҙ ҡол түгел - динебеҙ, иманыбыҙ, халҡыбыҙҙы ҡурсалар Аллаһы Тәғәләбеҙ бар.

Беҙ ҡол түгел - бар тереклекте тыуҙырған изге еребеҙ, сал тарихыбыҙ, бәйғәмбәрҙәргә тиң Урал батырыбыҙ бар.

Беҙ ҡол түгел - башҡаларға ғына түгел, батшаларға ла баш эйҙертмәҫ милли рухыбыҙ бар.

Беҙ мәңге ҡол булмаясаҡбыҙ - азат рухлы, батыр йөрәкле халҡыбыҙ бар, мәңгелек Башҡортостаныбыҙ бар, иншалла!

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,**
Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Президенты Мортаза Рәхимов Сочила Дмитрий Медведев менән осрашты. Осрашыуҙа Рәсәй Президенты Башҡортостан Президентының отставкаһын ҡабул итте һәм республиканың социаль-иҡтисади һәм федератив мөнәсәбәттәр үҫешенә индергән шәхси өлөшө өсөн рәхмәт белдерҙе. Рәсәй Президентының "БР Президенты вәкәләтлеген ваҡытынан алда туҡтатыу тураһында"ғы ҡарарына ярашлы, БР Президенты вазифаһын ваҡытлыса Рөстәм Зәки улы Хәмитов башҡара.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев Тверҙәге VII "Мәғлүмәти йәмғиәт" социаль-иҡтисади форумда Өфө инженерҙары эшен күрһәтте. Башҡортостан стендын РФ Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары -РФ Хөкүмәте Аппараты етәксеһе Сергей Собянин етәкселегендәге федераль министрлыҡтар һәм ведомстволар етәкселәре ҡараны һәм юғары баһаланы. Рәсәй Президентының ҡатыны Светлана Медведева етәкләгән Социаль-мәҙәни фонд 9-15 июлдә илдең барлыҡ төбәктәрендә һәм ҡалаларында аборттарға ҡаршы "Минә ғүмер бүләк ит!" акцияһы уҙғара. Ғаиләне нығытыуға йүнәлтелгән был акцияның маҡсаты - йәмәғәтселек иғтибарын аборттар мәсьәләһенә йәлеп итеү, аборттар һанын кәметеү. Бөгөн Рәсәйҙә яңы тыуған 100 балаға 66,7 аборт тура килә. Былтыр илдә 1161690 аборт теркәлгән.

✓Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына тиклем ил Хөкүмәте һуғыш ветерандары алдындағы бурыҫын үтәне: 2005 йылдың 1 мартына тиклем торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж булараҡ иҫәптә тороусылар фатир менән тәьмин ителде. Бурыс - 2005 йылдың 1 мартынан һуң иҫәпкә ҡуйылған граждандарҙы фатирлы итеү. РФ Төбәк үҫеше министры Виктор Басаргин тарафынан уҙғарылған видеоконференцияла ошо турала һүҙ барҙы. Беҙҙә 1 июлгә 3028 кеше ошондай иҫәптә торған. 1250 һуғыш инвалиды һәм ветеранының 873-өнә торлаҡ һатып алыуға таныҡлыҡ бирелгән дә инде.

✓Ғафури районындағы "Имәнкәй" лагерында республикабыҙҙың төрлә районҡалаларынан, Ырымбур өлкәһенән, Татарстандан 200-гә яҡын бала ял итә. Был лагерь башҡаларынан айырыла, бында Башҡортостан тарихын, мәҙәниәтен, халҡыбыҙҙың йолаларын, ғөрфғәҙәттәрен өйрәнә балалар. Башҡорт йәйләүе рәүешендә ойошторолған был лагерҙа һәр отряд бер башҡорт ырыуын тәшкил итә.

✓ ***Республикабыҙҙа яңы осор башлана. Үҙгәрергә, уянырға ваҡыт. Хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡларға, кәрәк булһа, теш-тырнаҡ менән йәбешеп йолҡоп алырға өйрәнергә тура килмәгәйе. Бөтә нәмә үҙебеҙҙән тора.***



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ӘПКӘЛӘЙҘӘР ҮҘ ЭШЕН ЭШЛӘНЕ,

## йәки Һүҙ азатлығы һәм ғәҙеллек тураһында бер нисә һүҙ

**Ғәҙеллек. Ниндәй матур һүҙ. Башҡортса ла матур яңғырай. Русса ла. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген ҡарайым. Был һүҙҙең икенсе мәғәнәһе - дөрөҫлөк икән. Әммә "дөрөҫ кеше" тип әйтеү бик дөрөҫ түгел. Ә "ғәҙел кеше" тиһәң, урынлы. "Ғәҙеллек эҙләү" менән "дөрөҫлөк эҙләү" ҙә бер үк нәмә түгел дә баһа. Мәғәнәләре тәү ҡарашҡа бер үк һымаҡ. Асылда иһә, ошо ике төшөнсә араһында упҡын ята. Был донъяла һәр ваҡыт кемдер дөрөҫлөк эҙләй, кемдер ғәҙеллек көҫәй. Дөрөҫлөк бар микән? Уны табып буламы? Ә ғәҙеллеккә өлгәшергә мөмкинме һуң?**

Тағы ла бер матур һүҙ бар. Азатлыҡ. Ул матур ғына түгел, ҡайһы бер ваҡытта һәм ҡайһы берәүҙәр өсөн ҡурҡыныс та. Халыҡтың азатлыҡҡа ынтылыуын бер генә хаким да яратмаған. Азатлыҡ теләүселәрҙе аҫҡандар ҙа киҫкәндәр, һөргөнгә лә оҙатҡандар. Беҙҙең халыҡ быны яҡшы белә. Шуға ла беҙҙең азатлыҡҡа мөнәсәбәтебеҙ айырым. Азатлыҡтың ҡурҡыныс һүҙ булыуы тураһында әйткәйнем инде. Башҡа ҡайһы бер һүҙҙәр менән ҡушылһа, айырыуса. Мәҫәлән, "һүҙ азатлығы" тигән төшөнсә илебеҙҙә тиҫтәләрсә йылдар буйына тыйылып килде. Уны әйтәм тип ауыҙ асыусыларҙың ауыҙҙарын ҡайыра һуғып ҡына торҙолар. Ниһайәт, башҡа төрлө азатлыҡтар менән йәмғиәтебеҙ һүҙ азатлығына ла өлгәште. Өлгәште һымаҡ. Тәү ҡарашҡа. Журналистар хәҙер асыҡтан-асыҡ теләгән темаларына яҙыуы мөмкин. Дөрөҫөрәге, теләһә ниндәй темаларға. Һөҙөмтәлә һүҙ азатлығы менән бәйһеҙлек, әхлаҡһыҙлыҡ араһындағы сиктәр юйылды. "Бөтә нәмә мөмкин" принцибы өҫтөнлөк алды. Ә журналистар кемдән (йәки нимәнән) азат булырға тейеш һуң? Цензура бөгөн юҡ. Һәр бер журналистың йөрәгендә ултырған эске цензорҙы иҫәпкә алмағанда, әлбиттә. Берәү ҙә ауыҙҙы ябып ҡуймай. Шул уҡ ваҡытта, әйтәйек, баш мөхәррирҙең заданиеһынан берәү ҙә баш тарта алмай. "Редакция сәйәсәте" тигән төшөнсә лә журналисты сикләй һымаҡ. Ҡайһы берәүҙәр фекеренсә, журналист дәүләт контроленән азат булырға тейеш. Һәм һүҙ азатлығының төп мәғәнәһе тап шунда. Хатта бер мәл ваҡытлы матбуғат тураһында "дүртенсе власть" тигән төшөнсәне ҡуллана башлағайнылар. Әле онотолдомо ул, әллә онотторҙоламы?

Тик шуны оноторға ярамай: әйтәйек, милли баҫмалар. Улар бит бөгөнгө шарттарҙа дәүләт ярҙамынан тыш эшләй алмай. Ә Мәскәүгә милли баҫмалар кәрәк түгел, тип әйтеүселәр табылыр. Мәскәүгә бит һүҙ азатлығы мөһимерәк. Эйе, тәү ҡарашҡа шулай һымаҡ. Асылда иһә, эш башҡасараҡ тора.

Һүҙ "РЕН" телеканалы хаҡында (Аҫтараҡ, әлбиттә, башҡаларҙы ла телгә алып үтербеҙ. Миҫал өсөн.) Ул "Беренсе" йәки "Рәсәй" каналдарынан айырмалы рәүештә, бөгөнгө властҡа бер ни тиклем оппозицияла торған ваҡытлы матбуғат сараһы иҫәпләнә. Әйтәйек, ундағы яңылыҡтарҙа ваҡыты-ваҡыты менән Рәсәй Президентының йәки Премьер-министрҙың эшмәкәрлеге тәнҡитләнә. Башҡа каналдар һөйләп бармаған ҡайһы бер хәлдәрҙе былар яҡтырта. Мәҫәлән, Дәүләт Думаһы депутаттарының ултырыштарға йөрөмәүе хаҡында башлап тап "РЕН" каналында һөйләнеләр һәм Думаның буп-буш залын телеэкрандарҙан күрһәттеләр.

Ошо каналда "Ғәҙеллек" тип исемләнгән тапшырыу бар. Дөрөҫөрәге, ток-шоу. Ундай тапшырыуҙар менән һеҙ яҡшы таныштыр. Улар хәҙер һәр бер каналда тиерлек бар. Студияла иң мөһим роль тамашасыларға бирелгән. Улар тапшырыуҙың иң әүҙем ҡатнашыусылары булырға тейеш. Уларға ҡул ҡаушырып ултырырға ярамай. Киреһенсә, ҡул сабырға, һыҙғырырға, йылмайырға йәки моңайырға кәрәк. Һәр ваҡыт түгел, ә кәрәк саҡта ғына, әлбиттә. Уларҙың алҡышлап ултырыуы кемгә кәрәк, тип һорайһығыҙмы? Алып барыусыға. Уның әңгәмәсеһенә йәки әңгәмәселәренә. Һәм, иң мөһиме, тапшырыуҙың режиссерына. Ул экранда күренмәй. Ул ошо тапшырыуҙы ойоштора. Һәм уның "зәңгәр экран" алдына ултырыусыларға ҡыҙыҡ булыуын теләй. Шуға ла режиссер ҡушыуы буйынса камера үҙенсәлекле йөҙҙәрҙе эҙләй. Режиссерҙың ярҙамсыһы тамашасыларға ымлап, ҡасан ҡул сабырға, ә ҡасан шым ғына ултырырға кәрәклеген аңлата. Ә кемгәләр хатта һүҙ бирелә. Әлбиттә, тамашасыларҙан тыш унда башҡа кешеләр ҙә ҡатнаша. Ғәҙәттә, улар билдәле, күренекле шәхестәр. Күптәре бөтә Рәсәйгә таныш. Улар үҙ-ара бәхәс ҡора. Ниндәйҙер проблеманы тикшерә. Үҙ фекерҙәрен тәҡдим итә. Кемделер фашлап, ә кемделер яҡлап маташа. Кемделер ғәйепләй, ә кемделер аҡлай. Тамашасылар алҡышлай. Бына шундай нәмә ул - ток-шоу.

"Ғәҙеллек" тип аталғас, ул ток-шоуҙа ғәҙеллек эҙләргә тейештәр бит инде. Тимәк, кемдер ғәҙелһеҙлеккә тап булған, уның башҡа барыр урыны ҡалмаған да, ул бында, "Ғәҙеллек" ток-шоуына килгән, тип фаразларға булалыр. Тапшырыуҙы алып барыусы Андрей Макаров - профессияһы буйынса адвокат. Йәғни, ғәҙелһеҙ ғәйепләнгәндәрҙе яҡлау - уның туранан-тура эше. Ул быға уҡыған, уның махсус белеме лә барҙыр. Әйтергә кәрәк, 14 июндә булған "Ғәҙеллек" тапшырыуында ғәҙеллек хаҡында бер генә лә һүҙ булманы. Был федераль телеканалында һүҙ тағы ла (инде нисәнсе тапҡыр!) Башҡортостан хаҡында барҙы. Дөрөҫ, унда ҡатнашыусылар Башҡортостанда булған (йәки булмаған?) һүҙ азатлығы хаҡында һөйләргә ниәтләгән ине һымаҡ. Асылда иһә, ул Башҡортостанға ҡаршы федераль кимәлдәге төрлө ваҡытлы матбуғат саралары тарафынан ойошторолған "мәғлүмәт һуғышы"ның сираттағы һөжүме генә булып сыҡты.

Дөрөҫөн генә әйтергә кәрәк, был юлы "һуғыш" асыусылар (һәр хәлдә, һөжүм итеүселәр) үҙҙәренең йөҙҙәрен асыҡтан-асыҡ күрһәтте. Эйе, бына улар: Андрей Назаров һәм Иршат Фәхретдинов, Рәмил Бигнов һәм Илдар Иҫәнғолов. Һәм тағы ла Дмитрий Трапезников тигән берәү булды. Тәүге икәүһе - Башҡортостан Республикаһынан Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттары, "Берҙәм Рәсәй" партияһы фракцияһы ағзалары. Ҡалғандарын... кем тип әйтәйем инде, улар үҙҙәрен оппозиция вәкилдәре һәм хоҡуҡ яҡлаусылар тип атай. Асылдары иһә был тапшырыуҙа бик яҡшы күренде. Төп маҡсаттары - республиканы һәм уның етәкселеген яманлау. Бер үк һүҙҙәр. Дәлилдәр урынына уйҙырмалар. Факттарҙы боҙоп күрһәтеү...

Бөгөн, Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов үҙ посынан киткәс, был кешеләрҙе яҡын арала республиканың етәксе органдарында оло-оло вазифаларҙа күрмәҫбеҙ, тип кем ышандыра ала? Шулай була ҡалһа, уларҙың кем икәнлеген алдан белеп тороғоҙ, тим.

Әйтергә кәрәк - улар маҡсатына ирешә. Әлбиттә, яңғыҙҙары бер ни ҙә эшләй алмаҫтар ине. Уларҙың артында торған кеше (йәки кешеләр) тап ана шул ток-шоуҙың режиссеры ролен уйнаны ла инде. Үҙҙәре күренмәй, әммә уларҙың ымы-бойороғона буйһоноп, тамашасылар алҡышлай, көлә, илай. Алып барыусыға "режиссер" махсус ҡолаҡсын (наушник) аша тейешле һорауҙарҙы әйтеп тора. Тап ана шундай "режиссер"ҙың ҡушыуы менән федераль матбуғат сараларында башланған "һөжүм" бөгөнгө хәлгә килтерҙе лә инде. Бының менән беҙгә асыҡтан-асыҡ күрһәттеләр - Рәсәй матбуғатында һүҙ азатлығы ошондай "режиссер"ҙар биргән күләмдә генә. Эйе, үҙәк гәзиттәре, радио һәм телевидение үлтереш-һуйышты, енәйәтселекте, порнография һәм башҡа төрлө боҙоҡлоҡтарҙы күрһәтергә һәм яҡтыртырға ирекле. Ә бүтәнде - бары тик Кремль һәм Аҡ йорт рөхсәт иткән күләмдә генә...

Республикабыҙҙа яңы осор башлана. Ул нисек булыр, әлегә берәү ҙә, хатта яңы ғына тәғәйенләнгән түрә лә белмәй. Шуныһы ғына көн кеүек асыҡ - артабан элеккесә йәшәп булмаясаҡ. Һуңғы арала нык ҡына ирәүәнләнеп киткәйнек. Ниндәй осорҙа, ниндәй заманала йәшәгәнебеҙҙе онота башлаған һымаҡ инек. Үҙгәрергә, уянырға ваҡыт. Хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡларға, кәрәк булһа, теш-тырнаҡ менән йәбешеп йолҡоп алырға өйрәнергә тура килмәгәйе. Һеҙ бит яҡшы беләһегеҙ - бөтә нәмә үҙебеҙҙән тора. Тирә-яғыбыҙҙағы хәлдәргә битараф булмайыҡ, тим. Был бит беҙҙең ил, беҙҙең төйәк, беҙҙең республика.

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ҡаланың архитектура бүлеге заказы буйынса, Өфө ҡала округы хакимиәте баш ҡалала транспорт менән бәйле проблемаларҙы хәл итергә ярҙам итәсәк 15 проект әҙерләгән, уларҙың 10-ы раҫланған. Тағы ла 15 проект инвесторҙар заказы буйынса эшләнгән. Уларҙың 12-һе кеше күпләп йәшәгән микрорайондар, кварталдар һәм үҙәктәрҙе транспорт менән хеҙмәтләндереүгә бәйле. Сипайлово биҫтәһенә ингән юл да иғтибарҙан ситтә ҡалмаясаҡ. Шулай уҡ бөгөн киң популярлыҡ яулай барған транспорт төрөнә - велосипедҡа ла махсус юлдар һалыу ҡаралған.

✓"Мираҫ" фольклор бейеү ансамбле Францияға юлланды. Ансамбль Рәсәй һәм Францияла иғлан ителгән Дуҫлыҡ йылы сиктәрендә үткәрелгән төрлө сараларҙа ҡатнашасаҡ. "Мираҫ"тың етәксеһе белдереүенсә, ансамбль бейеүселәре, йырсылары һәм музыканттары Европаға ярты сәғәтлек программа әҙерләгән. Франциянан коллектив Швейцарияға барасаҡ һәм фольклор фестивалендә ҡатнашасаҡ.

✓Рәсәй Хоккей федерацияһы президенты Владислав Третьяк, 2013 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында шайбалы хоккей буйынса донъя йәштәр чемпионаты үтәсәк, тип хәбәр итте. Өфөнөң ҙур спорт форумдары үткәреү тәжрибәһе бар, 1996 йылда Спорт һарайында 18 йәшкә тиклемге үсмерҙәр араһында Европа чемпионаты, шулай уҡ "Өфө-Арена" һарайын асыу хөрмәтенә Рәсәй һәм Канада йәштәре матчы үткәйне. 14 июлдә БР Президенты Мортаза Рәхимов "Өфө ҡалаһында йәштәр командалары араһында шайбалы хоккей буйынса 2013 йылғы донъя чемпионатына әҙерлек һәм уны үткәреү тураһында" Указға ҡул ҡуйҙы.

✓1 июндә республикала теркәлгән эшһеҙлек кимәле 1,9 процент тәшкил иткән, хеҙмәт баҙарындағы көсөргәнешлек коэффициенты - 1,4 процент. Йәғни быйыл биш айҙа 62 мең кеше эшһеҙ тип табылған, был былтыр ошо осор менән сағыштырғанда 1,2 тапҡырға аҙыраҡ.Вакансиялар банкын тултырыу менән дә эштәр яҡшыра бара. Шуның һөҙөмтәһендә быйыл биш ай эсендә 39,2 мең кеше, йәғни үҙәккә мөрәжәғәт итеүселәрҙең 63 проценты эшкә урынлаштырылған.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# "БУШ ТӘПӘЙҘӘРЕ" КИРЕ ҠАЙТА

**Рәсәй менән АҠШ араһындағы "тауыҡ бәхәсе" тамамланыуға табан бара. Рәсәйҙең баш санитар врачы Геннадий Онищенко илгә Америка тауығын ҡайтарырға рөхсәт бирмәксе. "Был 1,5-2 айҙан хәл ителәсәк", - ти Онищенко.**

"Тауыҡ мәсьәләһе" иң юғары кимәлдә тикшерелде. АҠШ президенты Барак Обама яңыраҡ Дмитрий Медведевҡа ҡош итен импортлау буйынса килешеүгә өлгәшелгән өсөн рәхмәт белдерҙе. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: "Буш тәпәйҙәренә" юл Рәсәйҙә ошо йыл башында ябылғайны. Эш шунда: Америка етештереүселәре итте эшкәртеү өсөн хлорлы препараттар ҡулланған. Ә был Рәсәйҙәге яңы санитар нормалар буйынса тыйыла. Һөҙөмтәлә импорт туҡтатылғайны. Әле бына бер аҙ бәхәстәрҙән һуң, Америка етештереүселәре үҙ технологияларын Рәсәйҙәге яңы нормаларға ярашлы үҙгәртергә ризалашты.

Америка тауығы Рәсәй баҙарының 20 проценты тирәһен тәшкил итә ине, шул уҡ ваҡытта ул илгә индерелмәй башлағас та бер ниндәй ҡытлыҡ һиҙелмәне. Үҙебеҙҙә лә тауыҡ ите етештереү сәнәғәте арыу уҡ йәйгә һалынған бит. "Буш тәпәйҙәрен" яңынан Рәсәйгә ҡайтарыу тауыҡ итенә хаҡтарҙы арзанайтыр, тип тә көтөргә түгел, ти белгестәр. Шулай булғас... Америкаға файҙа эшләйбеҙ инде. Америка етештереүселәре өсөн беҙҙең баҙар ифрат мөһим роль уйнамаһа, ике президент кимәлендә тауыҡ тәпәйҙәре тураһында һөйләшеүҙәр алып барып, ул мәсьәлә сәйәси кимәлгә күтәрелер инеме ни?!

# УНАУҘЫҢ ҺИГЕҘЕ БӘХЕТЛЕ

**Өфө ҡалаһы мәктәптәре уҡыусыларына:"Үҙегеҙҙе бәхетле һанайһығыҙмы?" - тигән һорау бирелгән. Һорау алыу мең бала араһында ойошторолған. Балаларҙың 48,5 проценты үҙҙәрен тулыһынса бәхетле, ә 34,4 проценты - "моғайын, бәхетле" тип яуап биргән. Ҡалған 17,1 процент бала, бәхетһеҙмен, тип яуаплаған.**

- 80 процентҡа яҡын бала үҙен бәхетле иҫәпләй һәм тормошонан ҡәнәғәт. Ә үҙҙәрен бәхетһеҙҙәр рәтенә индергән балаларҙың бөтәһе лә уңмаған ғаиләлә йәшәй икән, тип әйтеп булмай. Бында үҫмерлек осоронда ғына була торған хис-тойғо нескәлектәрен, ҡайһы берәүҙәренең ҡатмарлы холҡон да иҫәпкә алыу кәрәк, - тип аңлатма бирҙеләр Өфө психология үҙәктәренең береһендә.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ИҢ ЯҠШЫ ДАУА...

## ҡояш, һыу һәм һауа

**Йәй - балалар өсөн оҙайлы каникулдар мәле генә түгел, тәнгә, йәнгә сихәт, дауа алыу, яңы танышыуҙар мәле. Шуға ла һәр ата-әсә оҙон уҡыу йылы дауамында ҡаланың таш диуарҙары артында йәшәгән, ҡала һауаһынан башҡаны күрмәгән һәм тәбиғәт менән аралашыуға һыуһаған ҡошсоҡтарын ҡаланан ситкәрәк, саф һауаға, таҙа йылғаға ебәрергә ынтыла. Кемдең ауылда ата-әсәһе, туған-тыумасаһы бар, улар өсөн был мәсьәлә еңел хәл ителә, ә бюджет өлкәһендә аҙ эш хаҡына тир түгеүселәр был хәлдән сығыу юлын эҙләп баш вата.**

Өфө ҡала округы Советының ошо көндәрҙә үткән ултырышында балаларҙың ялын һәм сәләмәтлеген нығытыуға бүленгән путевкаларҙың айырмаһын түләү юлдары ла ҡаралды һәм хәл ителде. Йәғни, бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең финанс мөмкинлектәрен иҫәпкә алып, путевка хаҡын ата-әсәләргә 10 процент менән тәҡдим итеп, айырманы ҡала округы хакимиәте бюджетынан түләү тәҡдимен депутаттар бер тауыштан хупланы.

# ҺАУЛЫҠТАН АЙЫРМА, ХОҘАЙ...

## былай ҙа белгестәр етмәй

**Дауаханаларға Интернет аша ғына инеп, кәрәкле белгескә яҙылыу мөмкинлеге булдырып, шәп эшләнеләр әле. Ваҡыт әрәм итеп, сираттарҙа тораһы, етәксенән нисек һорап китәйем икән, тип баш ватаһы түгел. Яҙылаһың да (телефон аша ла яҙылып була), билдәләнгән ваҡытҡа бараһың да инәһең.**

Әммә һуңғы ярты йылда үҙемә кәрәкле белгескә бер нисек тә яҙыла ла, инә лә алманым. Сәбәбен аңланым: баҡтиһәң, миңә кәрәкле специальность буйынса кадрҙар етешмәй икән. Бөгөн баш ҡалала, дөйөм алғанда, 281 белгес талап ителә. Улар: невролог, оториноларинголог (беҙ лор тип кенә өйрәнгәнбеҙ инде), тиҙ ярҙам табибы, офтальмолог, кардиолог, инфекционист, эндокринолог, педиатр, рентгенолог, терапевт, һ.б. Шулар араһында иң талап ителгәндәре - неврологтар. Бөгөнгә 22 урында уларға мохтажлыҡ бар.

Әлеге ваҡытта баш ҡала халҡына 61 муниципаль һаулыҡ һаҡлау учреждениеһы медицина ярҙамы күрһәтә. Йыл башына ошо системала 18837 кеше эшләүе теркәлгән. Шуларҙың 23 процентын табиптар тәшкил итә, 42 проценты - урта медицина персоналы, 18 проценты - кесе медицина персоналы, 16 проценты - башҡа персонал. Бынан тыш, 24 провизор, 45 фармацевт, медицина белеме булмаған 198 белгес (биологтар, психологтар) эшләй. Ләкин бөгөн муниципаль һаулыҡ һаҡлау учреждениеларындағы етәкселәрҙең 26 проценты - пенсия йәшендә йәки тиҙҙән пенсия йәше етәсәк кешеләр.

Кадрҙар мәсьәләһендәге дисбаланс та тынысланырлыҡ түгел. Беҙҙә, мәҫәлән, бер табипҡа ике шәфҡәт туташы тура килә. Үҫешкән илдәрҙә был күрһәткес 5-кә етә. Стационарҙарҙа табиптар артығы менән иҫәпләнһә, амбулаторияларҙа улар етешмәй. Шулай уҡ тар йүнәлешле белгестәрҙең шәхси учреждениеларға китеүе күҙәтелә. Шуға ла бөгөн һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә кадрҙар сәйәсәте көнүҙәк булып тора.

Баш ҡала округы Советында ошо мәсьәлә буйынса 2010 - 2012 йылдарға кадрҙар формалаштырыу маҡсатлы программаһы раҫланды. Унда билдәләнгән маҡсаттарға өлгәшеү өсөн медицина белгестәрен бюджет һәм контракт нигеҙендә әҙерләү системаһын булдырырға, белгестәрҙе ҡайтанан уҡытыуҙы ойошторорға, уларҙың профессиональ кимәлен күтәрергә, Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең алдынғы медицина учреждениелары менән тәжрибә уртаҡлашыуҙы ойошторорға, мәктәпкәсә һәм дөйөм белем биреү мәктәптәрендә медицина хеҙмәте күрһәтеүҙе яҡшыртырға, медиктарҙы социаль гарантиялар менән тәьмин итергә кәрәк.

Кәрәк, тигәндән, медицина хеҙмәткәрҙәренең белем кимәлен, уларҙың ауырыуҙарҙы сифатлы һәм дөрөҫ итеп хеҙмәтләндерергә тейешлеген дә онотоп ебәрмәйек. Юҡһа, һуңғы арала кеше бер ауырыу менән сирләп, уны икенсе сирҙән дауалауҙары хаҡындағы медиктар хатаһы йыш телгә алына башланы.

Хаҡ әйткән ата-олатайҙар, һаулыҡ - ҙур байлыҡ. Әммә ул булмаһа, тағы ла күберәк байлығың сығып китеүе мөмкин. Шуға иң мөһиме - медицина персоналына мөрәжәғәт итмәҫлек һаулыҡ һорайыҡ Хоҙайҙан.

# ЯҢЫСА ДАУАЛАРҒА...

## программа кәрәк

**Анестезиология - медицинаның төрлө киҫкен ауыртыу синдромдарында, шок хәлендә, травмаларҙа, хирургия ҡатнашлығында анестезияның (тойоу, шул иҫәптән ауыртыуҙы һиҙеү һәләтен юғалтыу) сараларын һәм ысулдарын өйрәнеүсе бүлеге. Неонатология - медицинаның яңы тыуған балаларҙы, сабыйҙарҙы, уларҙың үҫешен, ауырыуҙарын һәм патологик торошон өйрәнеүсе бүлеге.**

Тәү уҡығанда тел әйләнмәҫтәй терминдарҙың мәғәнәһен аңлаһаң, уларҙың кеше ғүмере өсөн ни тиклем мөһим булыуын аңлайһың. Шуға ла ҡала округы Советында сығыш яһап, ҡала мэры урынбаҫары Әлфирә Баҡыева Өфөлә ошо хеҙмәткә инновацион технологияларҙы индереү буйынса маҡсатлы программаны раҫлау зарурлығын билдәләне.

Һуңғы өс йылда баш ҡала стационарҙарында 132 меңдән ашыу анестезиологик пособие уҙғарылған, реанимация-анестезиология ярҙамы 21 бүлексәһе булған 14 муниципаль һаулыҡ һаҡлау учреждениеһында күрһәтелә. Яңы тыуған сабыйҙар ярҙамды 17-се ҡала дауаханаһында ала. Йыл һуҙымында 96 кеше ауырыуҙан һуң өҙләккән, шуларҙың 27-һенә реанимация саралары талап ителгән. Статистика күрһәтеүенсә, һуңғы биш йылда анестезиология-реаниматологияла өҙлөгөүҙәрҙең артыуы күҙәтелә. Бында төп сәбәп булып матди-техник базаның, персоналдың заманса ҡоралдар менән эшләү тәжрибәһе һәм белеме булмауы тора. Ә улар ҡулында - кеше яҙмышы, кеше ғүмере. Бәлки, бер секунд тотҡарланыу ҙа фажиғәгә килтерәлер. Шуға ла был проблеманы хәл итеүҙең бер юлы булып "2011 - 2015 йылдарға Башҡортостан Республикаһының Өфө ҡала округында һаулыҡ һаҡлауҙың анестезиология-реаниматология һәм неонатология хеҙмәтенә инновацион технологиялар индереү" ҡала маҡсатлы программаһы тора һәм ул тап оло-лар, балалар, яңы тыуған сабыйҙар араһында анестезияға, интенсив терапияға, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына ярҙам күрһәтеүгә бәйле өҙлөгөүҙәрҙе кәметеүҙе төп урынға ҡуя. Бының өсөн Совет ойоштороу, анестезиология-реаниматология һәм неонатологияла өҙлөгөүҙәрҙе профилактикалау үҙәге булдырыу, ошо хеҙмәттә эшләүсе персоналдың квалификацияһын камиллаштырыу һәм уларҙы әҙерләү системаһын яҡшыртыу, ғилми-ғәмәли конференциялар ойоштороу, күсмә консультация бригадалары ойоштороу һәм башҡа саралар ҡарала программала. Бөгөн бындай үҙәктәр Рәсәйҙең барлыҡ ҙур ҡалаларында ла тиерлек бар.

Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, хәҙер кешеләрҙең бик аҙы ғына Хоҙай тарафынан бирелгән ғүмерен йәшәп вафат була, күпселек иһә цивилизация сиренә әүерелгән яман шештән, диабеттан, йөрәк сирҙәренән донъя менән хушлаша. Һәләкәттәрҙә алған травмаларҙан үлеүселәр ҙә бихисап. Ошоларҙан сығып, уйланырға һәм һығымта яһарға урын бар.

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Башҡортостанда етемдәр һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм балалар торлаҡ менән тәьмин ителәсәк. "Үҙ йортом" республика программаһы сиктәрендә улар фатир мәсьәләһен хәл итә аласаҡ. Быға республика бюджетынан 30 млн һум аҡса бүлеү ҡаралған. Бөгөн граждандарҙың ошо категорияһындағы 3 меңдән ашыу кеше торлаҡҡа мохтажлыҡ кисерә.

✓ Санкт-Петербург ҡалаһында "Рәсәйҙең иң яҡшы 100 ойошмаһы. Фән. Инновациялар. Фәнни хеҙмәттәр" конкурсына йомғаҡ яһалды. Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты алтын миҙал һәм "Рәсәйҙең иң яҡшы 100 ғилми-тикшеренеү учреждениеһы һәм ойошмаһы" номинацияһында конкурс лауреаты дипломы менән бүләкләнде. Ә институттың директоры, медицина фәндәре докторы, профессор Мөхәррәм Бикбовҡа "Йыл ғалимы" почетлы билдәһе тапшырылды.

✓ Өфөлә йәшәүселәр ҡаланың ижтимағи тормошо һәм муниципаль власть органдары эшмәкәрлеге менән әүҙемерәк ҡыҙыҡһына башлаған. Социологик тикшеренеүҙәргә ярашлы, һорау алынған мең ярым кешенең 35 процентын - ҡала бюджетын формалаштырыу, 33 процентын ҡала тормошон тағы ла яҡшыртыу мәсьәләләре борсоуы асыҡланған. 75 процент халыҡ ҡаланың ижтимағи тормошонда ҡатнашырға теләк белдергән.

✓ Футбол буйынса донъя чемпионатында испандар тәүге тапҡыр ҙур уңышҡа өлгәште һәм донъя чемпионы титулына лайыҡ булды. Был бәйгенең төп дәғүәсеһе булған Бразилия футболсылары иһә сирекфиналда төшөп ҡалды. Нидерландтар - икенсе, Германия уйынсылары өсөнсө булды. Киләһе чемпионат 2014 йылда Бразилияла үтәсәк.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев ҡул ҡуйған документҡа ярашлы, быйыл 4 сентябрҙән 4 октябргә тиклем Башҡортостанда граждандарҙы яҡлау айлығы үткәрелә.

✓ 2011 йылдың 1 ғинуарынан коммуналь хеҙмәттәрҙең 50 проценты күләмендә түләү кеүек социаль ярҙам сараһы һуғыш инвалидтарының ғаилә ағзаларына ла ҡағыласаҡ. Быға саҡлы бындай льгота һуғыш инвалидтарының үҙҙәренә генә күрһәтелә ине.

**✓ *Ата-әсәләр тарафынан бер ниндәй тыйыуҙар ҙа булманы, беҙ ҙә эш боҙоп йөрөмәнек, башыбыҙҙа насар уй булманы. Тимәк, баланың төндә нисек йөрөүе уның ғаиләлә ниндәй тәрбиә алыуына ла бәйле.***



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ЕНӘЙӘТ ТӨНӨН ҠОТОРА,

## йәки Тыйылған татлы булыуы ла ихтимал түгелме?



**Һуңғы яҙғы сессияла республиканың Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтай депутаттары бер тауыштан 17 йәштән бәләкәй балалар өсөн комендант сәғәттәре индерҙе. Рәсми рәүештә был "Баланың төп хоҡуҡтарын гарантиялау" тураһындағы БР Законына үҙгәреш индереү, тип атала.**

Хәҙер 17 йәшкә тиклемге балаларға 22 сәғәттән һуң урамға сығырға һәм йәмәғәт урындарында (клубтар, ресторан, һәм хатта... зыярат) ата-әсәләрһеҙ йөрөргә ярамай. Ә 1 майҙан 30 сентябргә тиклем 24 сәғәттән һуң урамда йөрөү тыйыла. 17 йәштән өлкәндәргә ирек күберәк - уларға тик спиртлы эсемлек һатылған ерҙәрҙә генә йөрөргә ярамай.

- Беҙ ҡоро бушҡа ғына быңдай закон ҡабул итмәнек, тәүҙә башҡа төбәктәрҙәге ситуацияны анализланыҡ, уларҙың тәжрибәһен өйрәндек, - ти Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. - Законды үтәгәндә ауырлыҡтар ҙа булырын яҡшы беләбеҙ - һәр бер подъезға милиция ҡуйып булмай бит. Мәҫәлән, республикала ихтыяри нигеҙҙә ҡалала патруллек итәсәк дружина отрядтары төҙөйәсәктәр. Бынан башҡа, ата-әсәләр иңенә лә ҙур яуаплылыҡ һалына.

Ошо көндәрҙә законға республика Президенты ҡул ҡуясаҡ, уны рәсми рәүештә баҫтырасаҡтар һәм шунан һуң ғына ул үҙ көсөнә инәсәк.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Әмир ҒҮМӘРОВ:** Үсмерҙәр өсөн комендант сәғәттәре индереү, минеңсә, сараһыҙлыҡтың көнөнән эшләнгән мәжбүри сара. Һүҙ юҡ, балаларҙы төндә йөрөүҙән тыйыуҙың ыңғай һөҙөмтәләре лә булыр. Киң таралған шундай әйтем бар: "Тыйылған татлы була". Беҙ кешелектең донъя практикаһынан, ғөмүмән, кешелектең йәшәйешенә, аңына зарар килтергән күп кенә йолаларҙы, насар ғәҙәттәрҙе тыйыуҙың нимәгә алып килеүенә лә шаһит булдыҡ. Тыйыуҙың арьяғында икенсе төрлө мәғәнә ята. Балаларҙың киске йөрөүҙәрен тыйыуҙың да ыңғай яҡтары менән бергә кире яҡтары ла бар. Быға әҙер булырға кәрәк, сөнки йәшерен ғәмәлдәр, енәйәттәр бөтәһе лә кеше күҙенән ситтә, шаһиттар булмаған урында эшләнә. Тыйыуҙар булыуға ҡарамаҫтан, шул ғәмәлдәрҙе эшләүсе, төндә йөрөргә яратыусы балалар барыбер урамға ынтыласаҡ, тәртип һаҡсыларынан ҡасып, төпкөлгә, йәшерен урындарға үтеп инәсәк. Был күҙгә күренмәгән ерҙәрҙә йәмһеҙ күренештәрҙең сәскә атыуына ла юл асасаҡ. Миңә ҡалһа, сараһыҙҙың көнөнән яһалған был аҙым һәр ваҡыт булмаясаҡ, бәлки, был балаларҙың йәйге ял осоронда ғына кәрәктер.

Һәр кешенең, бигерәк тә үсмерҙәрҙең ниндәйҙер серлелеккә ынтылыуы - ул ҡараңғылыҡҡа бәйле. Мәҫәлән, электән бер-береһен яратҡан егет менән ҡыҙҙың көндөҙ осрашмағанын беләбеҙ, улар һәр ваҡыт серлелеккә, ҡараңғылыҡҡа ынтыла. Тимәк, комендант сәғәтен индереү ниндәйҙер кимәлдә кешенең тәбиғәтенә ҡаршы килеү, бала психологияһын һанға һуҡмау ҙа булып тора. Төндә йөрөргә яратҡан үсмерҙәр бөтәһе лә насар уй менән йөрөй, тип әйтә алмайбыҙ. Күбеһен үҙенең йәшенә хас ана шул ҡыҙыҡһыныусанлыҡ алып сыға, был - тәбиғи ынтылыш. Борондан шулай булған, киләсәктә лә шулай буласаҡ. Үсмерҙәр өсөн комендант сәғәттәре индереү психологик яҡтан ҡарағанда дөрөҫ түгел, мәжбүри сара, тип уйлайым һәм уның ваҡытлыса булырына өмөт итәм. Баланы урамға сығыуҙан тыйыуға ҡарағанда, киске ваҡытта уларҙың ялын ойоштороу һәм ошо йүнәлештә ғаиләлә тәрбиә биреү иң дөрөҫөләр, минеңсә.

**Ләйсән АБДУЛЛИНА:** Быңдай закон ҡабул итеү һис шикһеҙ яҡшы үҙгәрештәр индерер, тип өмөтләнәм. Беренсенән, балаларҙың хәүефһеҙлеге тәьмин ителә, икенсенән, закон булғас, ата-әсәләр ҙә балаларының тәртибенә, сәбәпле-сәбәпһеҙгә урамға ынтылыуына иғтибар итә башлар. Һәр хәлдә, был закон ҡабул ителгәс, балалар енәйәтселегә кәмер, сөнки нәҡ үсмер осорҙа бала ҡулдан ысҡына, башҡа балалар ыңғайына киске уйындарға сыҡҡыһы, төндә йөрөгөһө килә. Ә енәйәтселек төндә баш ҡалҡыта икәнен беләбеҙ.

**Илшат НУРҒӘЛИЕВ:** Закон сығарыусыларҙың комендант сәғәте тураһындағы был тәҡдимен, минеңсә, тик яҡшы йәки насар, тип ҡәтғи рәүештә генә баһалап булмайҙыр. Бер яҡтан ҡарағанда, был ысынлап та ыңғай һөҙөмтәләргә килтерер һәм төндә һыра эсеп, тәмәке тартып, башҡа насар эштәр эшләп йөрөгән балаларҙы тыйырға ярҙам итер, шулай уҡ был юл менән балаларҙы наркоманлыҡ кеүек афәттәрҙән дә аралай алырбыҙ, тип уйлайым. Комендант сәғәте индереү ҙур ҡалалар өсөн ысынлап та яҡшы булыр. Шул уҡ ваҡытта бөтә балаларҙы ла бер күҙлектән ҡарарға ярамай бит. Мәҫәлән, үсмер егет яратҡан ҡыҙын тәүге осрашыуға саҡырҙы, ти. Улар осрашыуға ата-әсәһе менән бергә килергә тейешме ни? Был осраҡта уйланырға урын бар, сөнки һәр кеше тәүге яратыу, тәүге осрашыу кеүек илаһи мәлдәр кисерә. Беҙ йәш саҡта кистәрен ауылдың эргәһендәге тау башында усаҡ яғып, төрлө уйындар уйнап, йырлап-бейеп күңел аса торғайныҡ. Ата-әсәләр тарафынан бер ниндәй тыйыуҙар ҙа булманы, шулай уҡ беҙ ҙә бер ниндәй ҙә эш боҙоп йөрөмәнек, башыбыҙҙа насар уй булманы. Тимәк, баланың төндә нисек йөрөүе уның ғаиләлә ниндәй тәрбиә алыуына ла бәйле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балалар өсөн комендант сәғәттәре Рәсәйҙең бер нисә төбәгендә индерелгән. Тулала, мәҫәлән, үсмерҙәр йәйгеһен хатта эргәһендә оло кеше булһа ла төнөн урамға сыға алмай! Ата-әсәләренә 100-ҙән алып 500-гә тиклем штраф сәпәйҙәр. Брянскиҙа ошо законды боҙған өсөн меңләгән үсмерҙе тотҡандар. Кубанда милиционерҙар төндә йөрөгән үсмерҙәрҙе тотоп, уларҙы махсус үҙәккә алып баралар -балалар ата-әсәләре килеп алғансы шунда көтөргә тейеш! Ә шулай ҙа был яңы закон тураһында беҙҙең ата-әсәләр үҙҙәре ни уйлай икән? Яҙып ебәрегеҙ әле.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## МӘЖБҮР ИТЕП БУЛМАЙ

**Ведомство ҡарамағындағы ятаҡта йәшәйбеҙ. Оҙон коридорҙың ярты яҡ өлөшөнә (ә беҙҙең бүлмә ошо яҡта урынлашҡан) кемдер йоҙаҡлы дөйөм ишек ҡуйҙыртырға йыйына. Байтаҡ ҡына аҡса түләргә кәрәк, ҡайһы берәүҙәр быға риза түгел, был эште предприятиеның администрацияһы хәл итергә тейеш, тиҙәр. Был дөрөҫмө?**

Ятаҡта йәшәүселәр йоҙаҡлы дөйөм ишек ҡуйҙырыу мәсьәләһен ведомство ҡарамағындағы ятаҡ администрацияһы менән килешеп хәл итергә тейеш. Рөхсәт алғас, ятаҡта йәшәүселәр үҙ иҫәбенә ишек ҡуйҙырта ала, ләкин быны өсөн аҡса түләргә бер кемде лә мәжбүр итеү мөмкин түгел.

## СӘБӘПТӘРЕНӘ ҠАРАП

**Муниципаль торлаҡтың коммуналь фатирында ирем менән йәшәйбеҙ, икебеҙ ҙә студенттар. Әсәйем үлгәс, был бүлмә минең исемгә яҙылған. Күрше бүлмәләге ҡатын беҙгә, бүлмәгеҙҙән ҡыуҙыртам, тип гел янай. Был мөмкинме?**

Рәсәй Федерацияһының Торлаҡ кодексына ярашлы, торлаҡ бинаһын социаль наймға алыу буйынса килешеү наймға биреүсе талабы буйынса суд тәртибендә түбәндәге осраҡтарҙа юҡҡа сығарыла: торлаҡ бина өсөн йәки коммуналь хеҙмәттәр өсөн алты айҙан да ашыу ваҡыт түләнмәһә; торлаҡ бинаһын наймға алыусы йәки ул яуаплылыҡ алған башҡа кешеләр тарафынан торлаҡты емереү йәки башҡа төрлө зыян килтерелһә; күршеләренең хоҡуҡтарын һәм законлы мәнфәғәттәрен даими рәүештә боҙған өсөн, әгәр шул арҡала уларҙың артабан ошо торлаҡта бергә йәшәүҙәре мөмкин булмаһа; торлаҡ тәғәйенләнеше буйынса файҙаланылмаһа. Әгәр әле телгә алынып киткән үрҙәге пункттарға мөнәсәбәтегеҙ юҡ икән, күршегеҙ һеҙҙе бер нисек тә торлағығыҙҙан ҡыуҙырта алмай.

## ҮҘЕНДӘ БУЛМАҺА ҒӘЙЕП...

**Музыкаль үҙәк һатып алғайным, уның эше менән ҡәнәғәт түгелмен. Һатыусынан тауарға экспертиза үткәреүҙе талап итә аламмы? Был кем иҫәбенә үткәрелә һәм мин унда ҡатнаша аламмы? Һөҙөмтә минең файҙаға килеп сыҡмаһа, ни булыр?**

Тауарҙың етешһеҙлектәре асыҡланыу сәбәпле килеп тыуған бәхәс осраҡтарында һатыусы (етештереүсе), вәкәләтле ойошма йәки вәкәләтле шәхси эшҡыуар экспертизаны үҙ иҫәбенә үткәрергә бурыслы. Ҡулланыусының тейешле талаптарын ҡәнәғәтләндереү өсөн экспертиза Рәсәй Федерацияһының "Ҡулланыусы хоҡуҡтарын яҡлау тураһында" Законының 20, 21, 22-се статьяларына ярашлы сроктарҙа үткәрелергә тейеш. Ҡулланыусының унда ҡатнашырға хоҡуғы бар һәм уның һығымтаһы менән риза булмаған хәлдә суд тәртибендә дәғүә белдерә ала (әлеге Закондың 18-се статьяһы). Әгәр экспертиза һөҙөмтәһендә тауарҙың етешһеҙлеге һатыусы (етештереүсе) яуаплы булмаған сәбәптәргә бәйле икәнлеге асыҡланһа, ҡулланыусы (һатып алыусы) һатыусыға (етештереүсегә), вәкәләтле ойошмаға йәки вәкәләтле шәхси эшҡыуарға экспертиза үткәреү сығымдарын түләргә бурыслы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

**Йәйге көндәрҙә лә тымаулап, йүткереп йә тамаҡ шешеп ауырып китеү ихтималлығы ҙур, сөнки эҫегә сыҙай алмайынса, күптәр һалҡын һыу эсә, туңдырма ашай, йә ишек-тәҙрәләрҙе шар асып ҡуя. Мәғлүм булыуынса, танау, тамаҡ һәм ҡолаҡ ауырыуҙары бер-береһе менән ныҡ бәйле. Уларҙы дауалауҙа халыҡ медицинаһы саралары тураһында хәбәрҙар булыу бер кемгә лә зыян итмәҫ.**

### Ҡыҙҙырыусы коктейль

Әскелтем-сөскөлтөм шундай ҡатнашма эшләп файҙаланырға була: 1/4 стакан аҡ әнисте (тмин) 0,5 стакан эҫе һыуға һалып, ҡайнау хәленә еткерергә. Һөҙөп, унда 1 ҡалаҡ коньяҡ йә спирт һалырға. Ҡатнашманы көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсһәгеҙ, тамаҡ ауыртыуҙарының эҙе лә ҡалмаҫ.

### Лавр төнәтмәһе

Лавр япрағының йылы төнәтмәһен ҡолаҡтан эрен аҡҡанда һәм ишетеү һәләте насарайғанда ҡулланырға мөмкин. Ваҡланған 2 ҡалаҡ лавр япрағын 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, 2 сәғәт төнәтергә.

### Сихәтле тамсылар

Ҡолаҡ һыҙлағанда һарымһаҡ майы файҙалы. Уны былай әҙерләйҙәр: һарымһаҡтың бер нисә төшөн зәйтүн йә көнбағыш майында ҡайнатып алғас, 7 көн буйына төнәтегеҙ. Ошо май менән ҡолаҡ эсен һөртөгөҙ йә булмаһа марля киҫәген тығыҙ итеп төрөп, һарымһаҡ майына манып, ҡолаҡ эсенә тығып ҡуйығыҙ, 3 сәғәт һайын уны алмаштырып тороғоҙ. Һарымһаҡты пюре хәленә килтереп иҙгәс, уны зәйтүн йә көнбағыш майына ҡушып, 3-4 көн төнәтегеҙ. Марля аша майын һығып алып, йылы килеш 3-5 тамсы ҡолаҡҡа тамыҙырға.

### Лимон

Тамаҡ ауыртыуы һиҙелә башлау менән лимон киҫәге (ҡабығы менән) ҡабығыҙ һәм кәнфит урынына яйлап ҡына һурығыҙ, шул саҡта ундағы эфир майҙары һәм лимон кислотаһы тамаҡтың ялҡынһынған урынына тәьҫир итә. Тик лимондан һуң бер сәғәт буйы бер нәмә лә ашамағыҙ. Был процедураны көнөнә 2-3 тапҡыр ҡабатлағыҙ.




# ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Ҡатын әҙәбе

- Һәр кемдән хөрмәт көтөп тормайынса, башҡаларҙың етешһеҙлектәрен кисерә белегеҙ. Һүҙегеҙҙе мөләйем тауыш менән һөйләгеҙ. Мөләйем һөйләргә гәҙәтләнегеҙ. Һөйләшеү - олуғ камиллыҡ булған хәлдә, сабырлыҡ мәртәбәһенә ирешмәгәнен белегеҙ. Һүҙ йөрөтөүсе, ғәйбәт һөйләүселәрҙән һаҡланығыҙ. Ҡулығыҙҙан килгәнсе тиклем хәйерле эш эшләгеҙ. Һис булмаһа, боҙоҡлоҡ ҡылмағыҙ.
- Эргәгеҙҙә булыусыларҙың холоҡтарын өйрәнегеҙ. Олоһона-кесеһенә айырмайынса ҡайғылы һәм шатлыҡлы ваҡыттарында белештәрегеҙҙең ҡайғыһын уртаҡлашығыҙ, йыуатығыҙ. Ауырыу һәм хәсрәт менән яфаланғанда, сабырлы булығыҙ. "Бәлки, шулай булыуы хәйерлелер", - тип күңелегеҙҙе баҫтырығыҙ һәм хәйерле булыуы өсөн Йәнәб-и Аллаһыға доға ҡылығыҙ.
- Өй эштәрен һаранлыҡ менән исраф уртаһында булған гәҙеллек менән ҡылығыҙ. Хеҙмәтселәргә бик ҡаты ла һәм бик йомшаҡ та булмағыҙ. Үҙегеҙ яҡшы һәм тоғро булһағыҙ, хеҙмәтселәрегеҙ ҙә итәғәтле булыр һәм тырышып хеҙмәт итерҙәр.
- Ашхана менән тулыһынса үҙегеҙ идара итегеҙ. Әсбаптарығыҙ таҙа, тәртипле, һәр әйбер үҙ урынына ҡуйылыуына иғтибар итегеҙ. Баҡыр һәм еҙ самауырҙарығыҙҙы һәр ваҡыт таҙартып тороғоҙ. Бындай һауыттарҙа аштарҙы оҙаҡ һаҡламағыҙ.
- Һәр көн иртә менән өйҙәге әйберҙәрҙең туҙанын ҡағығыҙ. Сүптәрҙе һеперегеҙ, лампа һәм шәмдәр кеүек әйберҙәрҙе таҙартығыҙ. Китаптарҙағы туҙандарҙы һөртөгөҙ.
- Юғалтмаҫ өсөн аш-һыу әсбәптәрен, шулай уҡ кейем-һалымдың барыһының иҫәбен белегеҙ. Бындай әйберҙәр күп булһа, һәр береһен дәфтәрҙәргә теркәгеҙ. Һәр әйберҙе билдәле, тейешле ергә урынлаштырығыҙ, кәрәк булғанда, шунан алығыҙ, эше бөткәс, урынына ҡуйығыҙ.
- Кер әсбәптәрен ҡарап сығығыҙ, һәр береһенең иҫәбен зиһенегеҙҙә тотоғоҙ. Һәр төрлө әйберҙәрҙе һөртөр өсөн, мөмкин булһа, үҙенә махсус әйбер тотоғоҙ.
- Кипкән керҙе матур итеп тәңкләгеҙ һәм тейешлесә урынлаштырығыҙ. Йыртыҡтары булһа, ҙурайыуын көтмәйенсә, тиҙ генә ямағыҙ, һүтелгәндәрен тегегеҙ.

## Әсә әҙәбе

- Әгәр Йәнәб-и Аллаһ балалар бирһә, уларҙы иғтибар менән тәрбиә итегеҙ. Яҡшылыҡ һәм әҙәп өйрәтеп, күркәм тәбиғәткә гәҙәтләндерегеҙ, холоҡтарын матурлағыҙ, өҫ-баштарынан артыҡ аҡылдарын тәрбиәләгеҙ.
- Бала күплегенә ауырһынмағыҙ. Илағандарны һәм тауышланғандары өсөн асыуланмағыҙ. Улар Йәнәб-и Аллаһ иҡәнен хәтерләп, тырышлыҡ һәм һөйөнөс менән тәрбиәләгеҙ. Ураҙалар тотоп, хажға барып хасил булмаған сауаптар, бала тәрбиәһенән хасил булыуы ихтимал. Бала мәшәҡәттәрен күтәреү арҡаһында әхирәт ҡурҡынысынан именлек табылыр.
- Мөмкин булһа, балағыҙҙы йылы һыу менән көн һайын ике мәртәбә йыуындырығыҙ. Һыунан яҡшылап һөртөгөҙ. Артыҡ тирләмәһен, баланың үҫеүенә зарар бирмәһен, ҡан хәрәкәтен тотҡарламаһын өсөн ҡат-ҡат әйберҙәргә урамағыҙ, тар һәм ҡыҫтау кейем кейҙермәгеҙ һәм һис биләмәгеҙ.

**(Дауамы бар).**

*ДИАЛОГ*

# ТОРАТАУҘАР МӘҢГЕ ТОРАСАҠ,

## йәки Ырыуҙар ташына милләт шәжәрәһе яҙыласаҡ

**(Башы 1-се биттә).**

**Р. ХАННАНОВ:** Стела оригиналь дә, милли колоритлы ла буласаҡ бит. Был идея күңелемдә биләп алды, уны нисек тә булһа бойомға ашырырға булдым. Әлбиттә, проект өсөн аҡса табыу мөмкинлеге лә юҡ ине, шулай ҙа хужалыҡ иҫәбе буйынса булһа ла эшләргә булдыҡ. Әммә башҡорт ырыуҙары күп булғас, тамғалары ла байтаҡ бит, уларҙың һәр береһен белеү, мәғлүмәтле кешенән өйрәнеү зарурлығы бар ине. Шул саҡта мин скульптор Өлфәт Ҡобағошев менән танышты, ул да ошо проект буйынса эштә ҡатнашты. Уның билдәле бер материалдары, тәҡдимдәре бар ине, кәңәшләшеп, уртаҡ фекергә килдек. Красноусольскийҙа махсус курган эшләтеп, эскәмйәләр яһатып, "Башҡорт тамғалары" стелаһын шунда ҡуйҙыҡ. Хәҙер ул күптәрҙең иң яратҡан урыны булып китте.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Шулай итеп, "Башҡорт тамғалары" стелаһын төҙөү Һеҙгә милли колоритлы архитектура сәнғәте объекттарын ижад итеү өсөн башланғыс ролен үтәгәндер, тип әйтергә була. Өлфәт Ҡобағошев менән ижади хеҙмәттәшлегегеҙ артабан да дауам иттеме?

**Р. ХАННАНОВ:** Өлфәт Ҡобағошев - бик тынғыһыҙ, әүҙем эшләүсе ижадсы. Ул мин тәҡдим иткән идеяларҙы хуплап, минә дәрт-дарман өҫтәп торҙо. Ул минә ижадташ та, тәрән белемле кәңәшсе лә, дуҫ та була алды, тип әйтә алам. Уның дәртләндереүе минең ошо юҫыҡта ижадымды дауам итеүемә булышлыҡ итте. Яңы ниәттәр тыуҙы, ә Өлфәт Ҡобағошев уларҙы хуплап, үҙ фекерен белдереп, кәңәш биреп торҙо. Әлбиттә, архитектор һәм скульпторҙың һәр ҡайһыһының үҙ өлкәһе, үҙ ҡарашы бар. Архитектор өсөн башлыса арауыҡ, антураж, дөйөм күренеш төүге планда булһа, скульптор айырым элементтарға, деталдәргә иғтибар итә.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Архитектор ижадында объекттың бар тулылығы, бөтөнлөгө, уның тирә-яҡ менән килешле булыуы һыҙыҡ өҫтөндә булһа, скульпторға ҡабатланмаҫ, оригиналь образ тыуҙыра алыу ҡиммәтле, тигән фекер бик фәһемле. Архитектор менән скульпторҙың ижади хеҙмәттәшлеге, бер-береһен тулыландырып, яҡшы һөҙөмтә бирә икәненә Һеҙҙең проект дәлил булып тора. "Ырыуҙар ташы" монументаль комплексы проекты идеяһы нисек барлыҡҡа килде?

**Р. ХАННАНОВ:** Тейешле финанслау булмағанлыҡтан, ошондай проекттар өҫтөндә эшләүебеҙ туҡталып ҡалғандай булғайны. Ә был идеябыҙ беҙгә яңы һулыш бирҙе. Өлфәт Ҡобағошев менән ижади хеҙмәттәшлегебеҙ барышында тыуҙы ла инде ул. Беҙ башҡорт халҡының дөйөм шәжәрәһен монументаль сәнғәттә нисек итеп сағылдыра алыу хаҡында фекер алыштыҡ, шунан ул беҙҙең уртаҡ маҡсатыбыҙға әйләнде. Иң әүәл бөтөн башҡорт ырыуҙарын барлап сығыу зарурлығы килеп сыҡты.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Һәр ғаиләнең, ара-аймаҡтың, ырыуҙың үҙ шәжәрәһе була. Ошо нәҫел-нәсәп ағастарынан башҡа, халыҡтың дөйөм шәжәрәһен дә күҙаллап була. Һеҙҙең проектығыҙ асылда ана шул тотош милләттең символик тормош ағасын монументаль сәнғәт саралары аша һүрәтләүгә ҡоролған. Шуға күрә лә "Ырыуҙар ташы" монументаль комплексының үҙәге ролен үтәп, ошо һәйкәлдең философик мәғәнәүи ҡиммәтен билдәләү мөмкинлеген бирә.

**Р. ХАННАНОВ:** Икенсе яҡтан, монументаль комплекстың үҙенсәлекле мәғлүмәт сығанағы булыуын да иҫәпкә алыу фарыҙ. Башҡорттар Рәсәйҙә лә, донъяның башҡа тарафтарында ла йәшәй. Шуның өсөн "Ырыуҙар ташы"ндағы 45 ырыу атамаһы өс телдә - башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә яҙыласаҡ. Беҙ киләсәктә бында сит ил делегацияларының да килеүен күҙаллайбыҙ, һәм улар ырыу атамаларын инглиз телендә уҡый аласаҡ.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Башҡорттарҙа борон-борондан ил-йорт тарихын, риүәйәт-легендаларҙы, өләндәрҙе, арҙаҡлы ата-бабаларҙы белеү, ете быуынға тиклем нәҫел-нәсәбендә хәтерҙә тотоу мотлаҡ, тип һаналған, шәжәрәләр төҙөү изге гәмәлдәр иҫәбенә ингән. Башҡорт хәтерендә тормош ағасы төшөнсәһе менән бер рәттән, һәр ырыуҙың үҙ ағасы булыуы хаҡында мәғлүмәт әлегә тиклем һаҡланып килә. Ә бына шәжәрә һүҙе башҡорт мөхитенә Ислам дине ҡабул ителгәс, һуңғараҡ осорҙа килеп инә. Тимәк, был бик һирәк халыҡтарҙа ғына күҙәтелгән йолаҙы башҡорт менталитетын билдәләүсе милли традиция рәүешендә ҡарау раҫ. Ул үҙ ерлегебеҙҙә тыуғас, "Ырыуҙар ташы"ндағы яҙыуҙың тик башҡорт телендә генә булыуы дөрөҫөрәк булмаҫ инеме? Гөмүмән, 45 төп башҡорт ырыуы атамаһын "Ырыуҙар ташы"на теркәп ҡуйыу әлеге боронғо йолаға тап килмәме һуң?

**Р. ХАННАНОВ:** Мин ошо монументка теркәләсәк мәғлүмәтте тик башҡорт телендә генә биреү менән ризалаша алмайым. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: ошо мөһабәт монументтың дөйөм бейеклеге 25 метр тәшкил итһә, ташының ҙурлығы 9 метрға етәсәк, ауырлығы 300 тонна самаһы буласаҡ. Шулай булғас, бында атамаларҙы өс телдә лә теркәү өсөн урын етерлек. Ҡараңғы ваҡытта монументка вандалдар зыян итмәһен өсөн махсус яҡтыртҡыстар ҡуйыу ҡаралған, ул һәйкәлгә зәбәржәт төҫөн биреп, уны бик алыҫтан күренеп торорлоҡ итәсәк.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Гәҙәттә, шәжәрә төҙөгәндә нәҫел ағасының бонтаҡтарына нәҫелдәштәрҙең исемдәре яҙып ҡуйыла. Тимәк, "Ырыуҙар ташы"нда һүрәтләнгән тормош ағасына башҡорттарҙың ырыу атамаларын теркәп ҡуйыу тарихи традицияға ярашлы башҡарыласаҡ.

**Р. ХАННАНОВ:** Архитектура объектының, бигерәк тә ул сәнғәт әҫәре булһа, тәбиғи мөхит менән билдәле гармонияла булыуы фарыҙ. Әле һүҙ барған монументты ҡуя торған урынды беҙ бик ентекләп һайланыҡ. Торатау һәр тарафтан бик алыҫтан күренеп тора. Монументаль комплекс биләйәсәк майҙанды ла тау итәгендә, юлға табан һөҙәгәйә барып, йыраҡтан уҡ күренеп торорлоҡ ерҙә билдәләнек.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Мин шәхсән монумент конструкцияһының бик мөһабәт һәм бер үк ваҡытта үтә күренмәле булыуында тәрән мәғәнә барлығын тояам. Бер яҡтан, ул Торатауҙы ҡаплап тормай, һәйкәл аша тау һырты линияһы ап-асыҡ булып, әҙәлмәйенсә тигәндәй, күренеп тора. Монумент конструкцияһының тәбиғи антуражға ярашлы булыуы тәбиғәт фонында һәйкәлдең күркәмлеген арттырып, уға тәрән мәғәнә биреп торғандай тойола. Ысынлап та, бына ошо мөһабәтлек һәм үтә күренмәлелек халҡыбыҙҙың асыҡ, саф тәбиғәтенә, уның ниәтлыһтылыштарының, маҡсаттарының яҡтылығына һәм изгелегенә ишара ул.

**Р. ХАННАНОВ:** Һәйкәлдә төрлө ырыуҙарҙан хасил булған халҡыбыҙҙың берҙәмлек символы итеп ҡарап була. Ул төҙәлеп бөткәс, бында төрлө тарафтарҙан килгән башҡорттар тормош ағасында үҙ ырыуы атамаһын күреп уҡып, эске ҡыуаныс һәм ғорурлыҡ тойғоһо кисерер, тип уйлайым. Ниндәй генә ырыу булмаһын, ул барыбер башҡорт халҡының айырылғыһыҙ бер өлөшөн тәшкил итә бит. Унан һуң, һәр һәйкәлдең тәрбиәүи потенциалы булыуы бик мөһим. "Ырыуҙар ташы" бигерәк тә йәштәребеҙҙә ватансылыҡ һәм дә башҡортлоҡ тәрбиәләү йәһәтенән һәйбәт сығанаҡ буласаҡ.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Ырыу атамаларының инглиз телендә лә яҙылыуын хуш күрмәүселәр ҙә барҙыр. Әммә инглиз телендә яҙыуҙың үҙ сәбәптәре бар: башҡорт халҡының иң боронғо донъя халыҡтары иҫәбенә инеүен күптәр хәҙер инҡар итмәй, һәм милләтебеҙ тураһында инглиз телендә мөмкин тиклем күберәк мәғлүмәт булыуы беҙҙең бөтөн донъя кимәлендәге имиджыбыҙҙы тулыландырыу йәһәтенән бик тә әһәмиәтле.

**Р. ХАННАНОВ:** 1989 йылда Ләлә-Тюльпан мәсетенә нигеҙ һалыу сараһында донъяның бик күп илдәренең мосолмандары ҡатнашыуы хәтеремдә уйылып ҡалған. Был ваҡиға минең өсөн үтә тәьҫирле булды: Башҡортостандың, ысынлап та, донъя кимәлендә билдәле һәм йоғонтоло илгә әйләнеүенең асыҡ дәлиле ине ул.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Ырыуҙарға бүленеш - башҡорт халҡының эске төҙөлөшө күрһәткесе. Ул милләтебеҙҙең тарихи традицияларына ярашлы барлыҡҡа килгән. Сәнғәттә ошо традиционлыҡты заманса һүрәтләү ысулдарын ҡулланып, бөгөнгө талаптарға ярашлы сағылдырып буламы? "Ырыуҙар ташы" монументаль комплексында миллилек архитектура сәнғәтенең ниндәй мөмкинлектәре аша сағылдырыласаҡ?

**Р. ХАННАНОВ:** Комплекс планында һүрәтләнгән композиция ҡурай тажы формаһында булып, уның үҙәгендә "Ырыуҙар ташы" монументы ҡалҡып тора. Ул башҡорт тирмәһе элементтарына нигеҙләнгән.

**✓ Комплекс биләгән 4 гектар майҙанда парк буласаҡ, юл буйында 50 урынлыҡ башҡорт аштары кафеһы, Башҡорт ырыуҙары шәжәрәләре музейы, 40 урынлыҡ мәсет төҙөләсәк.**




Тирмәнең стилләштерелгән өс алтын уғы өҫкә, һауаға уҡталған, уларҙың остары түңәрәк алтын төнлөккә беркетелгән. Уҡтар тирмәләге башҡорт балаҫы, кейеҙ, келәмде хәтерләткән милли орнамент менән биҙәлгән түңәрәк формалағы майҙансыҡҡа урынлаштырылған. Майҙансыҡ уртаһында, йәғни түр башында боронғо башҡорт орнаменты рәүешендәге башҡорт ырыуҙары шәжәрәһе ырып яҙылған гранит стела урынлашҡан.

**Композицияның һәр элементы символик мәғәнәгә эйә:**

1. Милли орнаментлы түңәрәк майҙансыҡ башҡорт иле - Башҡортостан символын аңлата.
2. Өс уҡ-терәк башҡорт ырыуҙарының берҙәмлеген, ныҡлығын һәм ҡаҡшамаҫ булыуын сағылдыра.
3. Тирмәнең алтын төнлөгө яҡтылыҡ, ҡояш, яҡты киләсәкте белдерә.
4. Гранит ташҡа боронғо орнамент рәүешендә ырып яҙылған ырыу-ҡәбиләләребеҙҙең символик шәжәрәһе башҡорт халҡының берҙәмлеген кәүҙәләндерә.
5. Алтын уҡа-таҫмалар бәхет, уңыш, үҫеш һәм киләсәк символдары булып тора.
6. Монументҡа илтеүсе һуҡмаҡ милли орнамент менән биҙәлгән, ул башҡорт халҡының ҡунаҡсыллығын, асыҡлығын, изге күңелле булыуын күрһәтеүсе символик билдә.
7. Стеланың өҫкө яғындағы алтын төнлөк шулай уҡ сакраль мәғәнәгә эйә: ул йыһан менән бәйләнеште билдәләп, бер үк ваҡытта башҡорт халҡының тажы сифатында монументҡа тантаналылыҡ, ҡеүәт һәм мөһабәтлелек биреп тора.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Салауат йыйынында "Ырыуҙар ташы" монументына нигеҙ генә һалыныуына ҡарамаҫтан, унда йәштәрҙең йыш килеп йөрөүе хаҡында әйтеүселәр бар. Һеҙ быны нисек аңлатыр инегеҙ?

**Р. ХАННАНОВ:** Йәштәребеҙ өсөн Мәңгелек уттан башҡа тантаналар уҙғара торған күркәм урындарҙың булмауы һиҙелә бында. Киләсәктә шул уҡ туй тантанаһына килеүселәр өсөн "Ырыуҙар ташы" уңайлы һәм иҫтәлекле урын буласаҡ. Иманым камил, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Күмертау, Салауат ҡалалары һәм районлары йәштәренә ошо монументаль комплекс бик матур бүләк буласаҡ. Унан һуң, проектта ошо комплекстың үҙәге булған монументтан башҡа бүтән ҡоролмалар төҙөү ҙә ҡаралған. Комплекс биләгән 4 гектар майҙанда парк буласаҡ, юл буйында 50 урынлыҡ башҡорт аштары кафеһы, Башҡорт ырыуҙары шәжәрәләре музейы, 40 урынлыҡ мәсет төҙөләсәк. Бында килеүсе мосафирҙар ошо мәсеттә доға ҡылып, намаҙ уҡый аласаҡ, шулай уҡ никах уҡытыу, балаға исем ҡуштырыу кеүек йолаларҙы ошонда атҡарып була. Йәнә, Торатауҙың киң билдәле, уникаль географик тәбиғәт объекты булыуы бында туризм, спорт менән бәйле шөғөлдәрҙе йәйелдереп ебәреү, ижтимағи-мәҙәни саралар уҙғарыу йәһәтенән ҙур мөмкинлектәр бирә. Киләсәктә, мәҫәлән, ошо төбәктә ат спорты, ҡышҡы спорт төрҙәрен үҫтереү маҡсатҡа ярашлы буласаҡ, ошонда уҡ прокат пункттары асып ебәреп тә булыр ине.

Торатау - изге төйәк, бында 18 әүлиә ҡәбере бар, уларҙы билдәләп, тәрбиәләп тороу зарур. Халҡыбыҙ элек-электән әүлиәләргә оло хөрмәт менән ҡараған, Торатау әүлиәләрҙе зыярат ҡылыу урыны булараҡ та бик изге урындарыбыҙҙың береһе булып ҡаласаҡ.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Ғөмүмән, һеҙҙең проект ғәмәлгә ашырылған хәлдә Торатау Башҡортостандың тарихи-этнографик, дини-мәҙәни, спорт һәм туризм үҙәктәрең береһенә әүереләсәк. Был Торатауҙы һаҡлау, уның тирә-яғын таҙартыу, үҫемлектәр донъяһын тергеҙеү, киләсәк быуындарыбыҙҙы ошо мөғжизәле тәбиғи-мәҙәни мираҫтан мәхрүм итмәү өсөн дә бик ваҡытлы һәм урынлы ғәмәл буласаҡ. Бөгөн бар нәмәне лә тик йәшел доллар үлсәменә һалып ҡараусылар етерлек, һәм улар күҙенә Торатауыбыҙ алтын тауылай булып күренгәнен иҫтән сығармайыҡ әле.

**Р. ХАННАНОВ:** Ошо проектты бойомға ашырыу хаҡында һүҙ барғанда уны финанслау мәсьәләһен дә тиҙ арала хәл итә алыу фарыз. Бюджеттан ғына бүленәсәк аҡсаға ышанып ятһаҡ, төҙөлөш эштәренең оҙаҡҡа һуҙылыуы ихтимал. Өҫтәмә финанслауҙың төрлө юлдарын табыу тураһында бергәләп уйлашырға кәрәк. Мәҫәлән, комплекста юлаусылар өсөн кафе, автозаправка асырға теләүсе эшҡыуарҙарҙың өлөшләтә проект инвесторҙары булыуын шарт итеп ҡуйыу фарыз. Тау битенең уңайлы урынында кистәрен яҡтыртыла торған тирә-яҡты күҙәтеү майҙансығы булдырып, аҫтараҡ машиналар ҡуйыу урынынан да аҙмы-күпме килем алып буласаҡтыр, тим. Комплекстың мәсетен дә бөтөн башҡорт ырыуҙарынан йыйылған иғәнә иҫәбенә төҙөтә алһаҡ, бик сауаплы булыр инек. Ошо барса милләттәштәребеҙ, ватандаштарыбыҙ өсөн изге урында Башҡортостаныбыҙ тарихына инеп ҡалыр гүзәл ғәмәлдәрҙе мотлаҡ үтәп сығырбыҙ, "Ырыуҙар ташы" монументаль комплексын уның бар матурлығында үҙ күҙҙәребеҙ менән күрербеҙ, тип өмөтләнәйек.

Ҡасандыр, күп быуаттар элек, ата-бабаларыбыҙ тормошо гөрләп торған, олуғ йыйындар уҙғарылған төбәк XXI быуатта яңырыш кисерәсәк, замандаштарыбыҙ ғына түгел, киләсәк быуын башҡорттары ла мәғрур Торатау итәгенә, изге урынларҙан һаналған "Ырыуҙар ташы" янына йыйылышып, мәңгелек тарихыбыҙҙы, арҙаҡлы шәхестәребеҙҙе, изге ғәмәлдәребеҙҙе иҫкә алып, ата-бабалары рухына ихлас күңелдән доға ҡыласаҡ, иншалла.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

## ВӘЛИДИ КӨРӘШТӘШТӘРЕ



# ҒӘЛИӘХМӘТ ХӘСӘНОВ

**Ғәлиәхмәт Вәлимөхәмәт улы Хәсәнов - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тәүге осоронда әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. 1894 йылда Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Бошман-Һыуын-Ҡараҡыпсаҡ улысының (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Күгәрсен районы) Теләүембәт ауылында тыуған.**

Ун бер йәшендә етем ҡалып, атаһының бер туған ҡустыһы ҡулында тәрбиәләнә. Аҙаҡ ауылдағы рус-башҡорт мәктәбе янындағы етемдәр пансионына барып урынлаша. Ауылда өс йыл уҡығандан һуң, Теләүембәттән йыраҡ түгел Сәйетҡол ауылындағы 2 класлы Рус-башҡорт училищеһына уҡырға инә. Бында, өс йыл эсендә столяр һөнәрен үҙләштереп, бер аҙ аҡса эшләп алып, 1911 йылда Пермь губернаһының Красноуфимск ҡалаһына сығып китә. Бында ул Красноуфимск Рус-башҡорт ауыл хужалығы училищеһына уҡырға керә. "Башҡорт стипендияһы"на уҡый. Училищела Ғәлиәхмәт Хәсәнов столяр, тимерсе-слесарь һөнәрҙәрен үҙләштерә, һабын ҡайнатыу һәм май етештереү заводтарында эшләй.

1915 йылда ауыл хужалығы училищеһын тамамлап, практикант сифатында помещик Шоттың имениеһында эшләй. Артабан Ырымбур губернаһы земствоһына эшкә төшөп, 1917 йылдың йәйенә тиклем Ырымбур өйәҙенең Покровский агрономия участкаһында агроном ярҙамсыһы булып йөрөй.

1917 йылдың йәйендә Ғәлиәхмәт Хәсәнов Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. "После Февральской революции 1917 года добровольно покинул земство, как сын веками угнетенного царизмом башкирской бедноты для выявления интересов этой бедноты и оформления ее требований вошел в среду башкирских работников (коих было тогда несколько человек) Башкирское областное Бюро и работал не получая за свои труды никаких вознаграждений", - тип яҙа ул үҙенең автобиографияһында.

1917 йылдың июлендә Ырымбурҙа үткән I Башҡорт ҡоролтайында ҡатнаша. Август айында Өфөлә үткән II Башҡорт ҡоролтайында ул Башҡорт үҙәк шураһы башҡарма комитетына ағза итеп һайлана. Ғәлиәхмәт Хәсәнов Үҙәк шураның Статистика эштәре буйынса бүлеген етәкләй. "Цель Областного Бюро было объединение башкирских масс раскинутых в пяти губерниях Российской империи. Участвуя в этой работе, я собрал всякого рода статистические материалы по Оренбургской, Самарской, Уфимской, Пермской и Вятской губерний, касающихся башкирского населения, землепользования, скотоводства и т.д. и в конечном результате по этим данным был составлен проект карты Башкирии с разделением на 13 кантонов", - тип яҙа Ғ. Хәсәнов.

Ғәлиәхмәт Хәсәнов Башҡорт үҙәк шураһы ағзаһы булараҡ, 1917 йылдың көҙөндә милли-азатлыҡ хәрәкәтенең мөһим документтарын әҙерләүҙә ҡатнаша. 1917 йылдың 15 ноябрендә Үҙәк шура тарафынан ҡабул ителгән тарихи акт - Башҡортостан автономияһын иғлан итеү тураһындағы 2-се Фарманда уның да ҡултамғаһы бар.

1917 йылдың 8-20 декабрендә Ырымбурҙа үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында ҡатнаша. Ҡоролтайҙан һуң, Ғәлиәхмәт Хәсәнов Башҡорт үҙәк шураһының финанс бүлеге мөдире булып эшләй. 1918 йылдың февралендә Ырымбурҙағы Башҡорт хөкүмәте һәм Башҡорт үҙәк шураһы ағзалары большевиктар (дөрөҫөрәге, Башҡорт автономияһын күрә алмаған Ырымбур мосолман хәрби комитеты) тарафынан ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Ғ. Хәсәнов большевиктар ҡулынан ысҡынып өлгөргән булһа кәрәк. Документтарҙан күренеүенсә, төрмәгә ябылған башҡорт эшмәкәрҙәре араһында уның исеме телгә алынмай.

1918 йылдың июнендә Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте яңынан тергеҙелә. Июль айында Сәғит Мерәҫов, Ырымбурға килеп, Башҡорт хөкүмәтенең урындағы хәрби бүлеген ойоштора. Оҙаҡламай Ғәлиәхмәт Хәсәнов та ошо бүлектең эшенә ҡушылып китә. Хәрби бүлек ағзаһы булараҡ, ул С. Мерәҫов, Ә. Бейешев, У. Ҡыуатов, Х. Ғәбитовтар менән берлектә халыҡты Башҡорт армияһына мобилизациялау эшендә ҡатнаша. Артабанғы айҙарҙа Ғәлиәхмәт Хәсәнов Илдархан Мутин урынына Башҡорт хөкүмәтендә финанс бүлеге мөдире вазифаһын башҡара.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Башревкомда эшләй. Ғәлиәхмәт Хәсәнов Башҡортостандың аҙыҡ-түлек халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. Артабан ул, Башревкомдың юлланмаһы буйынса, Мәскәүҙә Я. М. Свердлов исемендәге Коммунистик университетында уҡып ҡайта.

1920 йылдың майынан Ғ. Хәсәнов Башҡортостандың ер эштәре халыҡ комиссариаты (Наркомзем) Коллегияһы ағзаһы булып эшләй. Һуңынан Ер эштәре буйынса халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. 1920 йылдың июлендә Советтарҙың I Бөтә Башҡортостан съезында - республиканың яңы идара органы - Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты (БашЦИК) ағзаһы итеп һайлана. Артабан Ғ. Хәсәнов республиканың ер эштәре халыҡ комиссары урынбаҫары вазифаһын башҡара.

30-сы йылдар аҙағында Ғәлиәхмәт Вәлимөхәмәт улы "Башкоопмолпром" предприятиеһында директор урынбаҫары булып эшләй. 1937 йылдың 15 декабрендә ҡулға алынып, биш йылға иркенән мәхрүм ителә. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. 1957 йылдың 10 июнендә реабилитацияланған.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

***✓ Иң тулы делегация Башҡортостандыҡы булды. Мәҙәни, милли, сәйәси, ғилми яҡтан ҡеүәтле булған бер төркөм төҙөй алыуыбыҙ уңышҡа килтерҙе һәм беҙ "Иң яҡшы делегация" тигән исем яуланыҡ.***

**Быйыл июнь аҙағында Екатеринбург ҡалаһында Беренсе Евразия йәштәре иҡтисад форумы үтте. Был форумда Башҡортостандың бер төркөм йәш ғалимдары һәм йәмәғәт хәрәкәттәре әүҙемселәре ҡатнашып, "Традиция - модернизация нигеҙе" тигән диссертация яҡланы һәм Гран-при яуланы. Был еңеү уларға Астанала донъя иҡтисадын гуманлаштырыу процесында йәштәрҙең урыны һәм роленә арналған III Астана иҡтисад форумында сығыш яһарға мөмкинлек бирҙе. Ошо сәйәхәт тураһындағы тәьҫораттары менән "Традиция - модернизация нигеҙе" диссертацияһының ғилми консультанты, БР Президенты Хакимиәтенең ижтимағи-сәйәси үҫеш бүлеге мөдире урынбаҫары Гөлнур ҠОЛЬҺАРИНА, диссертацияның авторҙары - БР Фәндәр Академияһының Гуманитар тикшеренеүҙәр институты директоры Илгиз СОЛТАНМОРАТОВ менән БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай эргәһендәге Йәштәр йәмәғәт палатаһы ағзаһы Валерия ТЮМЕНЦЕВА уртаҡлаша.**

**▸ Яңыраҡ үткән III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында беренсе тапҡыр йәштәргә оло иғтибар күрһәтелде. Оло йыйында ҡатнашыусы делегаттарҙың 30 проценты йәштәрҙән торҙо, уларға трибунанан тороп үҙ фекерен әйтергә мөмкинлек булды, сара сиктәрендә Беренсе йәштәр ҡорол-**

**В. ТЮМЕНЦЕВА:** Беренсе Евразия иҡтисади йәштәр форумында 40-тан ашыу илдән вәкилдәр булды. Беларусь, Болгария, Венгрия, Вьетнам, Германия, Франция, Италиянан алып Камерун, Гана, Һиндостан республикалары һәм башҡа дәүләттәр ҡатнашты. Рәсәй Федерацияһының күп өлкәләре әүҙемлек күһәтте.

форумда беренсе тапҡыр ҡатнашһаҡ та, республика етәкселеге йәштәрҙән торған командаға ышаныс белдерҙе, һәр яҡлап ярҙам итте. Беҙ уларҙың ышаныһын аҡлай алдыҡ, тип әйтә алам. Иң мөһиме, матур йолаға - халыҡ-ара кимәлдәге сараларҙа ҡатнашҡанда еңеүсе булыу ынтылышына нигеҙ һалдыҡ һәм башҡорт йәштә-

презентация ла оҡшаны. Был форум беренсе йыл ғына уҙғарылыу сәбәпле, уның традициялары әлегә формалашып өлгөрмәгән. Шуға ла, минең уйлауымса, киләһе йыл башҡа илдәр форумға беҙҙең Башҡортостан делегацияһы өлгөһөндә әҙерләнәсәк. Ә беҙгә яуланған кимәлде төшөрмәҫкә һәм тағы ла яҡшыраҡ сығыш яһарға

**И. СОЛТАНМОРАТОВ:** Диссертацияла яңғыраған идея орлоҡтары күптән сәселгәйне, был турала егеттәр менән дә, йәмәғәт ойошмаларында ла, үҙемдең сығыштарымда ла һөйләгәнем булды. Форум сиктәрендә йыл башынан алып төрлө конференциялар, түңәрәк өҫтәлдәр күп ойошторолдо. Миңә шуларҙың береһендә, Екатеринбургта үткән ғилми-ғәмәли конференцияла ҡатнашырға тура килгәйне. Унда ошо үтәсәк форумдың концепциялары ҡаралды. Мин "Цивилизациялар диалогы" секцияһына иғтибар иттем. Әлбиттә, Екатеринбургтағы Урал иҡтисад институты иҡтисад йүнәлешле булараҡ, унда белгестәр ҙә етерлек, иде-

хатта халыҡ-ара кимәлдә - иң уңышлыһы. Был турала күп һөйләнелә, түңәрәк өҫтәлдәр ойошторола, әммә ил кимәлендә беҙҙең республика тәжрибәһенә тейешенсә баһа бирелмәгән әле. Шуға ла форумда республикала булған тәжрибәне күрһәтергә кәрәк, тигән һығымтаға килдек.

Халыҡтар дуҫлығына нигеҙләнгән идеяларҙы ысын кимәлендә, иң тәрән һәм иң дөрөҫ мәғәнәлә аңлаған халыҡ - бары Башҡортостанда ғына. Әйтәйек, Екатеринбург өсөн Евразия бары тик иҡтисади интеграция булһа, Ҡаҙағстан президенты Евразия тураһында һүҙ алып барғанда шул уҡ иҡтисади интеграцияны күҙ уңында тота. Ә беҙ аңлы рәүештә цивилизация һы-

# ХАЛҠЫҢДЫҢ ҮТКӘНЕН

## халҡыңдың киләсәгенә нигеҙ

**тайы ла уҙғарылды. Асталағы форумда ҡатнашыуығыҙҙы ҡоролтай ҡарарҙары менән рухланған бер төркөм йәштәребеҙҙең һүҙ менән генә түгел, ә эш менән дә үҙҙәрен күрһәтә алыуының бер миҫалы итеп ҡабул итергә мөмкиндер?**

**Г. ҠОЛЬҺАРИНА:** Әүҙем, илһөйәр йәштәребеҙ күп һәм уларҙы бөгөн бер маҡсат һәм теләк берләштерә: белем алып, киләсәктә үҙ урыныңды табыу, мөмкинлектәреңде тыуған ил өсөн файҙалы һәм дөрөҫ итеп ҡулланыу, үҙең дә илең менән бергә үҫеү. Фән, ижад менән шөғөлләнгән йәштәребеҙ бихисап, шуға ла ошо сәфәребеҙҙә делегациябыҙ составына фән өлкәһендә ҡаҙаныштарға өлгәшкән йәш ғалимдарыбыҙ, әлеге ваҡытта уҡып йөрөгән студенттарыбыҙ, ижтимағи ойошмаларҙа әүҙемлек күрһәткән лидерҙарыбыҙ, мәҙәниәтебеҙҙе яңы кимәлгә күтәреү өсөн тырышҡан ижади йәштәребеҙ ҡатнашты. "Евразия" форумы сиктәрендә тәҡдим ителгән ике проектты ошо йәштәр ярҙамында уңышлы яҡлап сыҡтыҡ. Проекттарҙың береһе - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты, Свердлов өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы һәм Гуманитар тикшеренеүҙәр институты тарафынан эшләнгән һәм тәҡдим ителгән "Традиция - модернизация нигеҙе" диссертацияһы булһа, "Евразияның моноҡалалары" тигән номинацияла БДУ-ның Нефтекама филиалы студенттары проекты иң уңышлыһы тип табылды.







Был үҙе үк сараның ни тиклем мөһим булыуы тураһында һөйләй. Ғөмүмән, "Цивилизациялар диалогы" - бөтә донъя йәмәғәт форумы. Ул донъялағы һәр илдең, дәүләттең ғалимдарын, интеллектуалдарын, сәйәсмәндәрен, сәнғәт әһелдәрен бер ҡорға туплай торған халыҡ-ара ойошма һәм унда һәр халыҡ вәкиле үҙенең мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен күрһәтә ала. Был форумдың төп маҡсаты - кешелектең рухи һәм мәҙәни ҡиммәттәрен һаҡлап ҡалыу өсөн бөтә донъя йәмәғәт көстәрен берләштереү. Уларҙан саҡырыу алғас та, күп уйлап тормай, ҡатнашырға булдыҡ һәм уртаҡ көс менән был эште башҡарып сығыуға өлгәштек. Әлбиттә, халыҡ-ара кимәлдә Башҡортостанды күрһәтеү өсөн беҙгә үҙебеҙҙең етәкселектән фатиха алыу ҙа кәрәк ине, сөнки юғары кимәлдә үҙеңде лайыҡлы күрһәтеү өсөн билдәле кимәлдә тәжрибә кәрәк, беҙҙең әлегә тәжрибәбеҙ юҡ, әммә өйрәтеүсе, өгөтләүселәребеҙ бар. Бындай

ҙаттарын, менталитетты, милли холоҡтарҙы күҙ уңында тотабыҙ. Сөнки иҡтисад - ул өҫкө ҡатлам ғына, ә нигеҙендә аңлашып йәшәү, бер-береңде дуҫ күреү кеүек төшөнсәләр ята. Республикала дуҫлыҡтан да да юғарыраҡ булған тағы бер нәмә бар - ул күрше була белеү. Хәсән Назар: "Бөтә кешелекте һөйөү рәхәт, һин күршең менән дуҫ булып ҡара", - тип әйткән бит

***Башҡортостанда, ысынлап та, халыҡтар дуҫлығы ҡағыҙҙа ғына түгел, ә ысынбарлыҡта бар, улар араһында ихлас мөнәсәбәттәр быуаттар дауамында нығынған. Әгәр ҙә төрлө милләт вәкилдәре быны мөһимлеген һәм кәрәклеген аңламаһа, беҙ халыҡтар дуҫлығы менән маҡтана ла алмаҫ инек, шулай ҙа бында дәүләт идара органдарының да тос өлөшөн баһаламайынса ярамай. Минеңсә, беҙҙәге милли сәйәсәттең концепцияһы Рәсәйҙә, хатта халыҡ-ара кимәлдә - иң уңышлыһы. Был турала күп һөйләнелә, түңәрәк өҫтәлдәр ойошторола, әммә ил кимәлендә беҙҙең республика тәжрибәһенә тейешенсә баһа бирелмәгән әле. Шуға ла форумда республикала булған тәжрибәне күрһәтергә кәрәк, тигән һығымтаға килдек. Халыҡтар дуҫлығына нигеҙләнгән идеяларҙы ысын кимәлендә, иң тәрән һәм иң дөрөҫ мәғәнәлә аңлаған халыҡ - бары Башҡортостанда ғына.***

ренең халыҡ-ара аренала үҙаллы ағымы, үҙ юлы барлыҡҡа килде.

**И. СОЛТАНМОРАТОВ:** Башҡалар араһында иң тулы делегация Башҡортостандыҡы булды. Һәр яҡлап, әйтәйек, мәҙәни, милли, сәйәси, ғилми яҡтан ҡеүәтле булған бер төркөм төҙөй алыуыбыҙ уңышҡа килтерҙе һәм беҙ "Иң яҡшы делегация" тигән исем яуланыҡ.

**Г. ҠОЛЬҺАРИНА:** Милли кейемдәребеҙ, милли ризыҡтарыбыҙ барыһының да һушын алды, уларға Башҡортостан тураһында халҡыбыҙҙың тарихына ҡағылған, бөйөк шәхестәребеҙ хаҡында һөйләгән, республиканың бөгөнгө иҡтисади-сәйәси хәле, үҫеше, ҡаҙаныштарыбыҙ тураһында хәбәр иткән бик матур электрон

кәрәк буласаҡ. Дөйөм алғанда, беҙҙе бик ихлас ҡабул иттеләр, халҡыбыҙға, республикаға ҡарата оло хөрмәт һәм ихтирам тойҙоҡ, был, тәү сиратта, Башҡортостанда алып барылған сәйәсәткә, Президентыбыҙға, күп ҡаҙаныштары булған республикабыҙға ҡарата ихтирам ине.

**▸ Республикабыҙ Рәсәйҙә күп милләтле дәүләттәрҙең береһе һанала һәм беҙ төрлө милләт вәкилдәренең, төрлө мәҙәниәттәрҙең бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй алыу тәжрибәһен ишетеп түгел, күреп беләбеҙ. Иҡтисади форумда "Цивилизациялар диалогы" тематик йүнәлешен һайлауығыҙҙың төп сәбәбе ошоноң менән бәйле түгелме?**

ялар ҙа бар, әммә мин ошо гуманитар секцияла ниндәйҙер бушлыҡ тойҙом. Унда бер нисә публицист сығыш яһаны, әммә сығыштарҙы тыңлағандан һуң уларҙың авторҙарының был проблеманы өҫтән-мөҫтән генә төҫмөрләүен төшөндөм. Беҙҙең Башҡортостанда, ысынлап та, халыҡтар дуҫлығы ҡағыҙҙа ғына түгел, ә ысынбарлыҡта бар, улар араһында ихлас мөнәсәбәттәр быуаттар дауамында нығынған. Әгәр ҙә төрлө милләт вәкилдәре быны мөһимлеген һәм кәрәклеген аңламаһа, беҙ халыҡтар дуҫлығы менән маҡтана ла алмаҫ инек, шулай ҙа бында дәүләт идара органдарының да тос өлөшөн баһаламайынса ярамай. Минеңсә, беҙҙәге милли сәйәсәттең концепцияһы Рәсәйҙә,

әле. Башҡортостанда ошоно бер ҡасан да иҫтән сығармайҙар.

**▸ Бөгөн ҡалала йәшәүселәр һаны йылдан-йыл арта, халыҡтың белем кимәле күтәрелә, мәғариф, медицина системалары һ.б. үҫешә, йәғни, Рәсәй, һис шикһеҙ, классик мәғәнәлә модернизациялы дәүләт һанала. Быға тиклем традицияларҙы дәүләт үҫешенә аяҡ салыусы уҡ булмаһа ла, уға ҡамасаулаусы бер фактор һымағыраҡ ҡабул итеү бар ине. Ә һеҙ ғилми эшегеҙҙә традицияларҙы ижтимағи бәйләнештәрҙе яйға һалыусы модернизация нигеҙе тип дәлилләйһегеҙ. Һеҙҙең ҡарашығыҙ буйынса, нимә һуң ул традиция һәм ул, ысынлап та, мо-**

**дернизация нигеҙе була ала, тигәндә нигеҙләһәгеҙсе...**

**Г. ҠОЛЬҺАРИНА:** Тәүҙә проекттың ни өсөн диссертация тип аталыуына аңлатма биреп китергә кәрәктер. Был диссертация - фәнни яҡтан ғына эшләнгән ғилми хеҙмәт түгел, ә йәштәрҙең киләсәккә ҡуҙаллауҙарынан сығып, йәш лидер ниндәй булырға, улар үҙҙәрен нисек тәрбиәләргә, йәмғиәт менән берлектә нисек үҫешергә, ил өсөн ниндәй эштәр башҡарырға, тарихыбыҙҙы онотмау өсөн нимәләр эшләргә тейеш, тигән кеүегерәк идеяларҙы ла үҙ эсенә алған проект. Диссертация тип атауҙың тағы ла бер сәбәбе - проект халыҡ-ара кимәлдә билдәлелек яулаған ғалимдар, сәйәсмәндәр, ижтимағи ойошмалар етәкселәренән торған ғилми совет алдында яҡланды.

## БЕЛЕҮ...

**И. СОЛТАНМОРАТОВ:** Әлбиттә, быға тиклем традиция - ул этнографик төшөнсә булараҡ, йола, ғөрөф-ғәҙәт булараҡ ҡына ҡабул ителә ине. Беҙ традиция һүҙен киң һәм фәлсәфәүи мәғәнәлә ҡулланабыҙ. Ошо мәғәнәлә традиция һүҙенең мәғәнәһен дөрөҫ итеп бирә торған башҡортсаға тәржемәһен тапманым да әле мин. Был контекста традиция - ул ғөрөф-ғәҙәт тә, йола ла, заң да түгел. Традиция - ул, иң тәүҙә, мөнәсәбәт. Үҙеңә, халҡыңа, илеңә мөнәсәбәт. Йәғни, һин илеңде нисек бар, шулай - уның бар хаталары, бәләләре, яңылышлыҡтары менән бергә ҡабул итергә бурыслыһың. Бөгөн Рәсәйҙә лә, башҡа төбәктәрҙә лә дәүләт тарихын киренән, үҙеңә нисек файҙалы, шулай итеп ҡарау, бутау, батшаларға, башҡа шәхестәргә төрлө ярлыҡтар тағыу, нимәләлер ғәйепләү башланды. Башҡортостанда ошондай күренештәр булманы, тиерлек. Зәки Вәлиди кеүек исемдәре тыйылған шәхестәребеҙҙе лә халыҡ бер ҡасан да онотманы һәм улар, ваҡыты еткәс, лайыҡлы рәүештә халҡына кире әйләнеп ҡайтты. Йәғни, беҙ бар тарихи шәхестәрҙе лә бер контекста, бер заман балалары, тип ҡарарға тейешбеҙ. Бәлки, улар ҡасандыр бер-береһенә дошман булғандыр, быныһы мөһим түгел, бөгөнгө быуын уларға тарих күҙлегенән ҡарап, ошо шәхестәр тормошонан, уларҙың яҙмышынан үҙебеҙгә ниндәйҙер фәһем алырға тейешбеҙ. Бары тик ошо шарттарҙы үтәп кенә киләсәккә бара һәм артыбыҙҙан йәштәрҙе әйҙәй алаcаҡбыҙ.

Хәҙерге заманда либераль ҡиммәттәр беҙҙең йәмғиәткә көсләп индерелә кеүек, әммә был ҡиммәттәрҙе бөгөн индереп тороу ҙа кәрәкмәй, йәмғиәт үҙе уны йота ғына. Ғаилә ныҡлығы, туғанлыҡ-ара мөнәсәбәттәр, кешенең тормошондағы төп ҡиммәттәр ниндәй булырға тейешлеге тураһында өлгө итеп шул уҡ телевизор, фильмдар аша бөтөнләй яһалма, беҙгә хас булмаған баһалар, йәшәү рәүешен индерергә маташалар. Беҙ үҙебеҙҙең традициялар нигеҙендә тороп ҡына ошоларға ҡаршы ҡуя алабыҙ, ошо арҡала ғына үҙебеҙҙе милләт булараҡ һаҡлап ҡалабыҙ һәм ошо сәбәптән генә бөгөн дәүләтселегебеҙ бар, тип уйлайым. Традиция ҡиммәттәре - модернизация нигеҙе. Традицияһынан баш тартҡан халыҡ тарих ҡуласаһынан төшөп ҡалыуы ихтимал.

Башҡорт халҡында халыҡ араһынан сыҡҡан лидерҙарҙың роле күпкә юғарыраҡ баһалана. Әле генә үтеп киткән III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы күрһәтеүенсә, халыҡтың Президентыбыҙға ни тиклем ихтирамлы ғына түгел, рәхмәтле булыуы күренде. Беҙ ҙә йәштәр исеменән уға рәхмәтебеҙҙе белдерҙек, бер ҙә яһалмалылыҡтан, ике йөҙлөлөктән булманы был, ихлас күңелдән булды. Беҙ айырым-айырым йәшәй алмайбыҙ, сөнки ырыу-зат менән ойошоп йәшәгән халыҡбыҙ. Сауҙагәр ҙә түгелбеҙ, икенсе илгә, икенсе йәмғиәткә барып, тырышып күтәрелә торған халыҡ та түгелбеҙ, сөнки беҙҙең ҡиммәттәребеҙ башҡа. Ошо идеялар башҡорт халҡы өсөн генә түгел, бөтә донъя халыҡтары өсөн дә оло әһәмиәткә эйә. Диссертация тулы вариантта башҡорт халҡының тарихы нигеҙендә яҙылған булһа ла, Асталала сығыш яһағанда уны бөтә донъя халыҡтарына хас булған форматта күрһәттек, сөнки был идеялар бөтә кешелеккә хас.

▸ **Хәҙерге заманда үҙенең артынан башҡаларҙы эйәртә алыусы йәш лидер ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Бөгөнгө заман йәш кешеһендә ундай сифаттар бармы?**

**В. ТЮМЕНЦЕВА:** Бындай лидер үткәнде киләсәк нигеҙе итеп ҡабул итергә, Юғары көскә, ныҡлы ғаилә ҡиммәттәренә ышанырға, һәр нәмәлә сама белергә һәм, әлбиттә, ата-бабаларыбыҙ тир һәм ҡан аша яулаған халыҡтар дуҫлығының баһаһын белергә тейеш.

**И. СОЛТАНМОРАТОВ:** Һис һүҙһеҙ, йәш лидер көслө рухлы, ғәҙел, изге күңелле булырға тейеш. Бөгөнгө көндә йәштән намыҫты һаҡлау проблемаһы ҡалҡып сыҡты. Диссертацияла был турала ла һүҙ булды. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, намыҫ төшөнсәһенә бөгөнгө йәмғиәттә ни өсөндөр урын юҡ. Әгәр ҙә йәш лидерҙарыбыҙҙың һүҙҙәре һәм эштәре бер булмаһа, йәғни трибунаға сығып берҙе һөйләһә, ә икенсе төрлө йәшәһә, ул башҡаларға ниндәй өлгө күрһәтә ала?

Шуны ла әйтеп китергә кәрәк: һуңғы осорҙа лидерлыҡ һәләттәре бөтөнләй булмаған кешеләр, үҙенең шәхси маҡсаттарын ғына алға һөрөүселәр лидермын тип күкрәк ҡаға башланы. Башҡорт халҡында лидерҙы, башлыҡты, етәксене халыҡ үҙе күтәрә. "Халыҡтан айырылма, халыҡ һине күтәрер" - тип бушҡа әйтмәйҙәр бит инде. Ысын лидерҙы халыҡ күтәрергә һәм ул халыҡ араһында танылыу тапҡан, ихтирамлы кеше булырға тейеш.

**Г. ҠОЛЬҺАРИНА:** Лидер бер үҙе булмай, уны күтәргән командаһы, үҙе үҫкән мөхите булырға тейеш. Иң мөһиме - йәштәргә берҙәмлек кәрәк, һәр кем юрғанды үҙенә тартырға тейеш түгел, сөнки беҙ бер илдә йәшәйбеҙ, бер ерлек өсөн эшләйбеҙ, шуға ла маҡсаттарыбыҙ бер.

**В. ТЮМЕНЦЕВА:** Ошондай халыҡ-ара кимәлдәге форумдарҙа ҡатнашыу әүҙем йәштәребеҙҙе тәрбиәләүсе, лидерҙарҙы асыҡлаусы бер сара булып тора ла инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беренсе тапҡыр ойошторолған Евразия йәштәре форумында ҡатнашыу башҡорт йәштәренең цивилизациялар диалогында үҙ һүҙе барлығын күрһәтеп кенә ҡалманы, теләк булғанда, хатта башҡаларҙан өҫтөнөрәк һәм уларға өлгө була алыуыбыҙҙы ла иҫбатланы. Тимәк, бөгөнгө йәмғиәттә күп нәмә беҙҙең әүҙемлегебеҙҙән, мәғлүмәтле булыуыбыҙҙан, ыңғай үҙгәрештәргә ышаныуыбыҙҙан тора. Шуға ла иҡтисади, социаль өлкәне алға ебәреү, йәмғиәттә сәләмәт йәшәү рәүешен булдырыу, халҡыбыҙҙың тарихи, мәҙәни, дини йолаларына ихтирам тәрбиәләү өсөн беҙгә берҙәм булырға ғына кәрәк. Шул саҡта беҙҙе ситтәр ҙә ишетәсәк һәм таныясаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

### АТАЙЫМ ҺАБАҠТАРЫ

# ӘР ҺҮҘЕ ИШЕТМӘНЕМ...

## МИН - АТАЙ ҠЫҘЫ

Мине әсәйем, башҡа туғандарым иҫ белгәнемдән башлап "атаң балаһы" тип үҫтерҙе. Ҡустым менән йәш айырмабыҙ бер йыл ғына булғас, әсәйем бәпес менән булһа, атайым мине ҡараған. Уның мине йыуындырғанын да, сәсемде үргәнен дә, әкиәт һөйләгәнен дә, беҙҙең менән сыр-сыу килеп "Йәшенмәк" уйнағанын да иҫләйем. Күп кенә атайҙарҙың бала тәрбиәләүҙән ситтә ҡалыуын күреп, үҙемдең атайым менән сикһеҙ ғорурланам. Атайым - Хәсәнов Йыһаннур ғүмере буйы тракторсы булып эшләгән алдынғы һәм алыштырғыһыҙ ауыл хужалығы хеҙмәткәре, ауыл Советы депутаты, әсәйем Бибинур Хәкимйән ҡыҙына терәк, хәҙер өс ейәнсәренең бар теләктәрен үтәргә әҙер тороусы ҡартатай. Атайым менән әсәйемә берәү ҙә махсус рәүештә педагогика һәм психология фәнен уҡытмаған, беҙ, мәҫәлән, ул фәндәрҙе үткән кеше булараҡ, үҙ балаларыбыҙҙы аңларға баш етмәй. Бына беҙҙең атай бер ваҡытта ла беҙгә ҡысҡырманы. Миңә төбәп әйткән берҙән-бер әрләү һүҙе "мәрйә" булды.

## ҠУЯН АЛЫП КИЛГӘН ПАСПОРТ

Яңы мәктәпкә төшкән саҡта атайымдың әллә ниндәй документын алдым да, иптәш ҡыҙҙарым менән шуны поезд билеты итеп уйнатып йөрөттөм. Шул документты бер көн атайым менән әсәйем зыҡ ҡубып эҙләргә тотондо. Ә мин уны бергә уйнаған ҡыҙҙың өйөндә ҡалдырып киткәнмен. Минән төпсөнөп һорайҙар, үҙем партизан кеүек ләм-мим. Ахырҙа хәйләгә килдем дә атайыма:

- Һинең менән Йәнйегет ауылы эргәһенән үтеп бара инек, шунда ул ҡағыҙ тракторҙың тишегенән төшөп ҡалды, - тип алдаштым. Аптырашҡан атайым менән әсәйем бер-береһенә ҡарашып, яурын ғына һикертеште. Ә мин иртәгәһенә иртүк тороп, теге ҡыҙҙан документты барып алдым да, гараждың тупраҡ иҙәненә ташлап ҡуйҙым. Кис еткәс, атайым ихлас йылмайып өйгә килеп инде:

- Бына ҡуян юлдан документты табып алған да, гаражға һалып киткән, - тип көлә, үҙе миңә ҡыҙ ҡыҫа.

- Эйеме, атай, ҡуян да уҡый беләме икән? - тип ҡустым аптыраған була.

- Белә инде, бына бит бында "Хәсәнов Йыһаннур" тип яҙылған, - ти атайым ҡустыма документтағы үҙенең исем-фамилияһы яҙылған урынды күрһәтеп.

Һаман да аптырайым: балаларының күңелен уйлаған атайҙар алдашыуға ла бара ала икән.

## БҮЛӘК

Башланғыс синыфта уҡығанда уҡытыусыбыҙ хеҙмәт дәресендә йондоҙ эшләргә өйрәтте. Биш өлөштө айырым-айырым ҡырҡаһың да, йәбештерәһең. Етмәһә, ул ҡабарып торорға тейеш. Йондоҙобоҙҙо эшләп өлгөрмәнек, уҡытыусыбыҙ уны өйҙә эшләп бөтөрөп килергә ҡушты. Мин өйҙә нисек кенә тырышып ҡараһам да, килеп сыҡманы. Елемгә буялып бөттөм, әммә йондоҙом уҡытыусыбыҙ әйткәнсә ҡабарыңҡы килеп сыҡмай ҙа ҡуя. Килештерә алмай илап ултыра инеем, атайым килеп инде. Уға хәлде һөйләп биргәйнем, ул мине йыуата-йыуата йондоҙомдо килештереп йәбештереп бирҙе. Эй, ҡыуандым.

Иртәгәһенә уҡытыусыбыҙ таҡтаға һүҙҙәр яҙҙы ла, йондоҙҙарыбыҙ аҫтына шул һүҙҙәрҙе күсереп яҙырға ҡушты. Ә таҡтала: "Ҡәҙерле атайым! Һине Совет Армияһы көнө менән ҡотлайым!" - тип яҙылғайны. Шулай итеп, атайыма үҙе эшләгән бүләкте бүләк иттем. Бүләкте тапшырған ваҡытта атайымдың ихлас көлөүе һаман да күҙ алдымда тора.

## ҒӘЛИӘ

Минең тыуған көнөм етеп килә. Кемде саҡырырға, тип уйлап йөрөйөм. Класташ ҡыҙҙарымды, әхирәттәремде саҡырырға тип әсәйем менән күптән һөйләшеп ҡуйғанбыҙ. Бына күптән көткән көн дә килеп етте. Әсәйем ҡунаҡтар саҡырып ҡайтырға ҡушты. Мин класташтарымдың барыһына ла ишеттерерлек итеп ҡысҡырып әйттем. Шул ваҡыт Ғәлиә исемле ҡыҙыҡай: "Хәҙер, сумкамды өйгә ҡалдырам да киләм", - тип тора. Минең уны саҡырғым килмәгәйне. Танауын мырш-мырш тартып, ҡулъяулыҡ менән һөртә белмәгәне өсөн беҙ уны өнәп бөтмәй инек. Мин: "Ғәлиә, һин килмә", - тип әйттем дә, йүгереп ҡайтып киттем. Ысынлап та, Ғәлиә килмәне. Һуңынан атайым ҡунаҡҡа кемдәр килеүе хаҡында һораşты. Мин маһайған ҡиәфәттә Ғәлиәне саҡырмауым хаҡында ла әйттем. Атайым тәүҙә аптыраны, һуңынан тыныс ҡына аңлата башланы:

- Ниңә әле һин бәләкәс башың менән кеше айыраһың? Ғәлиәне айырып ҡарап, һин уны илатҡанһың бит. Ул бит етем, ә етемдәрҙе илатырға ярамай...

Атайымдың ошо һүҙҙәре миңә ғүмерлек һабаҡ булды. Оялдым, үкендем, һаман да күңелемдә төйөр тора. Сөнки ихлас ҡараҡай Ғәлиәбеҙ беҙҙең аранан бик йәшләй генә китеп барҙы.

## МАРАТ АҒАЙҘЫҢ ҠЫҘЫ

Минең Гүзәл исемле ике әхирәтем бар ине. Етмәһә, икеһе лә йәй айында бер-береһенән өс көнгә генә һуңлап тыуған. Миңә улар менән уйнауы күңелле. Беҙ ниндәй генә уйындар уйнамайбыҙ: йәшенмәк, ҡасышмаҡ, ун ике таяҡ, Мәскәй әбей, бүре менән ҡыҙҙар, черта, ресторан, ҡурсаҡ, шыуғалаҡ, һ.б. Бер мәл шулай мин "лейтенант Хәсәнова" "генерал әсәйемдән" ҡайтырға фарман алғас, минең менән бергә уйнаусы ике "сержант Гүзәлдәр" ҙә: "Һинһеҙ уйын ҡыҙыҡ түгел", - тип, миңә эйәрҙеләр. Өйгә ҡайтҡас, атайым миңә эйәреп ингән әхирәттәремдең береһенән:

- Һин ҡайһы Гүзәл әле? - тип һораны.

- Марат ағайҙың ҡыҙы, - тип яуапланы ул.

Шул көндән башлап беҙҙең өйҙә Гүзәлдәрҙең береһе - Гүзәл, икенсеһе "Марат ағайҙың ҡыҙы" булып китте.

**Гөлнара ЯҠШЫБАЕВА.**

*✓ Өйҙә тынлыҡ. Ауыр тынлыҡ. Бүлмәнең, улай ғына түгел, тотош өйҙөң йәме юҡ, һыуыҡ, шомло, тын ҡыҫыла. Әйтерһең, кемдер үлгән. Хәйер, Резеда үҙе үлде түгелме ни? Карауатта тәне генә ята, йәне үлде.*





Гөлнара МОСТАФИНА

# ҠАЯҒА ҺЫЙЫНҒАН ҠАЙЫН

(Повесть)

–Хәҙер үк килеп етмәһәң, ҡара уны, үҙем барам!

- Әсәйемде һаҡла инде. Өйҙә килен бар, эшләһен йәш кеше!

- Һин нимә лыҡылдайһың ул?! Ашарға килтер тейем мин һиңә, тауыҡ баш!

- Ярай, ағай, оҙаҡ итеп һөйләшеп тора алмайым. Һеҙҙең барығыҙға ла кейәүегеҙҙән, ҡәйнәмдән күп сәләм! Һау бул!

- Тине лә ҡабаланып трубканы һалды. Уф... Сәйеттең һуңғы: "бирермен мин һиңә кейәү менән ҡәйнәне!" тигән һүҙҙәре генә яңғырап ҡалды. Ҡәйнәһе бер ни өндәшмәне. "Ағаһы" менән һөйләшкәнгә ышандымы? Ай-һай, ниҙер һиҙенде, юҡһа һүҙһеҙ сәйер ҡиәфәт менән сығып китмәҫ, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарының һаулығын белешер, уларға сәләм еткерер ине. Был Сәйет менән нимә эшләргә? Хәҙер өйгә шылтырата башланы. Кил, ти... Тота һалып нисек сығып китмәк кәрәк? Йә берәйһендә йомошфәләне юҡ. Динә! Динәгә барам тип сығып китәсәк! Резеда башына, ниһайәт, йүнле уй килгәнгә һөйөнөп, шарт-шорт баҫып ҡәйнәһе янына сыҡты.

- Ҡәйнәм, Илһам бөгөн һуң ҡайта, мин Динәгә барып киләйем әле? Күптән үҙен күргән дә юҡ.

- Аһ, ҡайһылай ҡапыл ғына уйлап ебәрҙең. Хәҙер һуң түгелме һуң? - Миңзифа сәғәтенә күҙ һалды.

-Динәне күреп, уның менән һөйләшеп ҡайтһам, күңелем урынына ултырыр ине. Рәфҡәт ағайым да шылтыратҡас, әсәйемдәрҙе, тыуған яҡтарымды һағынып киттемсе, - тип хәйләләне Резеда. Уға нисек булһа ла ҡәйнәһен ышандырырға, шик уятмаҫҡа кәрәк. Ысынлап та, уның ошо һүҙҙәренән һуң Миңзифаның зиһене асылып киткәндәй булды: бына эш нимәлә икән! Әлбиттә! Сит-ят яҡҡа сығып китһә, үҙе һағынмаҫ инеме ни? Килененең сәйер ҡыланыштарына аптыраған була тағы!

- Бар әйҙә, килен, бар, әхирәтең менән күңелең булғансы һөйләшеп ҡайт. Борсолма, мин бында мунса яғып ҡуйырмын. Илһам иртәрәк ҡайтһа, барып алыр үҙенә.

- Юҡ-юҡ, ҡәйнәм, үҙем ҡайтам! Эштән арып ҡайта, ыҙалап йөрөмәһен!..

- Ярай, үҙегеҙ ҡарағыҙ.

Резеда кейемдәрен алыштырып, аҡса алды ла, уҡ кеүек урамға атылды. Китешләй магазинға инеп икмәк, колбаса-маҙар, билмән, араҡы, закускаға тоҙло ҡыяр һатып алды. Сәйеттең тамағын туйҙырырға кәрәк. Уның ашамһаҡлығына аптырай Резеда. Һис туя белмәй. Әле уға нимә бирһәң дә һоғоноп ултыра, ә элек һайланып теңкәһенә тейә ине: аш бешерһәң, үтә эҫе лә булмаһын, һыуынып та китмәһен, йылытылған кәрәкмәй уға. Бер төрлө аш ҡабатланмаһын.

Сәйет үрһәләнеп, соланда уҡ ҡаршы алды Резеданы.

- Ниһайәт! Өйөңә барырға тип уйлай башлағайным инде!

- Ҡатынды күреп, ҡыуанып китте.

- Һин ниңә өйгә шылтыратаһың? - Резеда шунда уҡ уға ташланды. Эсенә йыйылған асыуынан тиҙерәк ҡотолғоһо килде уның.

- Һаман килмәгәсең... - Сәйет бер аҙ тынысланғайны, Резеда менән был юлы әҙәмсә һөйләште, аҡырманы-баҡырманы. Кәперәйеп маташһа ла, күңелендә ҡурҡыу остоғо ла бар ине: әгәр милицияға хәбәр итә ҡалһа? Йә иренә һөйләп ҡуйһа? Мөмкин бит. Ярай, элек тулыһынса үҙенә буйһондороп тота ала ине, әле хәлдәр башҡасараҡ тора шул.

Резеда билмән бешерҙе.

- Һағындым һине! - Ҡатындың һәр хәрәкәтен күҙәтеп ултырған Сәйеттең күҙҙәре майланды.

- Сәйет, - тип һүҙ башланы ҡатын бер аҙ өнһөҙ ултырғандан һуң. - Һиңә яңғыҙыңа ғына һәм тиҙерәк китергә кәрәк бынан. Ғүмереңде ҡурҡыны аҫтына ҡуяһың бит... Мин һиңә йөк кенә буласаҡмын, быны үҙең дә аңлап тораһың. Китергә, кеше күҙенә күренмәҫкә хәлемдән килгәнсе ярҙам итәсәкмен...

Бәлки, юхалауға барыр тип һөйләне быларҙың барыһын да Резеда. Уйлап ҡарар ҙа, яңғыҙына ысынлап та уңайлыраҡ икәнен аңлар.

- Һинән ошондай һүҙҙәрҙе ишетеү миңә шул тиклем рәхәт! Һине генә яратыуымды яңы төшөндөм. Икенсе ир ҡуйынында икәнеңде күҙ алдына килтереп, көнләшеп үлә яҙҙым бит! Төндәр буйы үҙем менән көрәшеп сығам. - Ирҙең күңел йоҙағы асылды, эсендәген һөйләп ҡалырға тырышты. Урынынан ҡалҡынып, Резеда эргәһенә иҙәнгә килеп тубыҡланды. - Бергә китәбеҙ, ишетәһеңме? Мин һинһеҙ йәшәй алмайым. Һағындым! Кил әле, элеккеләй бер ҡысып ҡосаҡлайым әле үҙеңде. Һине бит бер кем дә минең кеүек итеп яратмай. Әлеге быҙауың ҡатын-ҡыҙға нимә кәрәк икәнен аңлаймы ни ул?

Сәйет Резеданы ҡосаҡларға, үбергә ынтылды. Тегеһе ытырғанып янтайҙы, шулай ҡыланырын белә ине бит инде. Ул тартҡылашҡан һайын Сәйет ныҡыраҡ шашынды, тиҙҙән үҙен ҡулда тота алмаҫлыҡ хәлгә килде. Былай ғына килеп сыҡмағас: "Минең ҡасандан бирле бисә күргән юҡ", - тип яңағына һуғып ебәрҙе. Ауыртыуҙан Резеданың күҙҙәрендә уттар күренде. Сәйет уның һайын шашынды, уның һайын ҡотһоҙораҡ ҡыланды.

Ҡайтырға сыҡҡанда Резеданың тамсы ла йәшәгеһе килмәй ине. Ниндәй ғәрлек! Хәҙер иренең, ҡәйнәһенең күҙенә нисек кенә күренер? Күҙҙәренә нисек тура ҡарар? Һүҙ ҡушыр? Илһам менән бер түшәккә ятыр? Сәйеттән дә бысраҡ, унан да әшәке әҙәм юҡтыр ул! Ҡайһылайтырға? Әллә үҙенә ҡул ғына һалырға ла ҡотолорғамы? Ҡаяға менер ҙә, һыуға ташланыр... Бөтөнләй башы буталды уның. Яңы тормош башлайым тип иртә ҡыуанған икән. Күрәһеләре алда булған шул әле. Үлгеһе килә уның. Өйөнә бөтөнләй аяғы тартмай. Лайыҡ түгел ул яҡшы күңелле кешеләр янында йөрөргә. Яҡындарын барыбер ғүмер буйы алдап, иртәгәһе көндән ҡурҡып йәшәй алмаясаҡ. Уға хәҙер бер нәмә лә кәрәкмәй кеүек. Бәлки, яҙмышына күнеп, Сәйет менән сығып ҡына китергә кәрәктер? Резеда үҙен донъялағы иң йәлке бер йән эйәһе итеп тойҙо. Уға Сәйет кеүек бандиттар ғына тиң. Ә бәхет... булды ла бөттө. Шул үткән бәхетле минуттарын яҡты бер иҫтәлек итеп ғүмер буйы күңел түрендә һаҡлаясаҡ. Ҡотолоу юҡ Резедаға үткәндәренән, улар һәр ваҡыт эҙәрлекләйәсәк, табасаҡ, ыҙалатасаҡ, ғазаплаясаҡ. Был Сәйет ысынлап тороп үлһә лә тынғылыҡта ҡалдырмаҫ Резеданы. Ана бит, әле лә ҡайҙа икәнлеген белеп, эҙләп килеп еткән. Ундай кешене ер ҙә алмай шул үҙенә. Һәм Резеда кеүектәрҙән дә сирҡана торғандыр ер...

Күҙ йәштәрен йотоп, иҫерек кеше кеүек алпан-толпан атланы ул урам буйлап. Ҡыҫҡа ғына был ара шул тиклем оҙон тойолдо. Аяҡтары талды, ултырғыһы килде. Күҙ алдары ҡараңғыланды. Сәңкеп-сәңкеп башы ауыртты.

Бер кемгә лә, бер нәмәгә лә иғтибар итмәй, йортҡа уҙҙы. Ҡәйнәһенең:

- Һәүкәш! Алаҡай, ал аяғыңды! - тип ҡысҡырыуын ишетмәҫ кенә айнып китте. Бәй, ул бит Ынйыбикә апайҙарының һыйырын һауманы. Ынйыбикә апай... Шылтыратмай ҙа, ҡайтыр хәбәре лә ишетелмәй. Нимә эшләп йөрөй икән? Бандит ирен шулай ныҡ яратамы? Әллә нимә менән шөғөлләнгәнен белмәй ҙәме? Резеданың тамсы ла хәле юҡ, "теләһә ни эшләһендәр!" тине лә, урын һалып-нитеп тормай, карауатына менде лә ятты. Торғоһо килмәй. Бармаясаҡ ул унда яңынан. Белһендәр әйҙә килендәренең кем икәнен! Ә мунса? Мунса төшөргә киләм, тине бит! Ҡәйнәһе яҡтымы-юҡмы? Бесәй кеүек бөгәрләнеп ятҡан бәләкәй, сибек кенә кәүҙә өшөүҙән еңелсә ҡалтыранды. Үҙенән-үҙе күҙҙәре йомолдо. Уйҙары төшө менән буталып, һаташты.

Тышта эштәрен бөтөрөп ингән Илһамды кәләшенең әлеге хәле борсоуға һалды.

- Кәләш! Нимә булды? Ауырып киттеңме әллә? - Йәһәт кенә эргәһенә килеп ултырҙы. Ҡулын маңлайына ҡуйҙы. - Һин бит янаһың! Һыуыҡ тейҙерҙеңме икән? Хәҙер дарыу бирәм.

"Кәрәкмәй... Миңә хәҙер бер генә дарыу ҙа ярҙам итмәйәсәк, - тип бышылданы көскә күҙҙәрен аса алған Резеда. - Минең үлгем генә килә..."

- Әйттем мин уға, бөгөн ял ит тип, юҡ, үҙһүҙләнеп, тыңламаны! - һуҡрана-һуҡрана Илһам артынан бүлмәгә ҡәйнәһе инде. - Тыуған төйәгенән сығып киткәненә нисә йыл, ҡала ҡыҙына, аҡһөйәккә әйләнеп бөткән бит инде! Ауылда донъя көтөү, ай-һай, уйын түгел шул!.. - Унан улының ҡулындағы аптечканан аспирин алды. - Әлегә бына ошоно бирә тор. Температураһы төшмәҫтәй булһа, фельдшер саҡырырбыҙ. Тыңламай, әллә ҡайҙа ятҡан Динәһенә сығып киткән булды. Мин дә шәп инде, күрә-белә ебәреп торам!

- Ҡәйнәһе сығып киткәндә лә һуҡрана ине әле.

Илһам стакан менән һыу алып килде.

- Кәләш, башыңды ҡалҡыт та бынау төймәсекте ҡап әле... - тип балаға әйткән кеүек иркәләп өндәште. Резеданың һис тә ҡыбырлағыһы килмәй. Ниңә ыҙалаталар уны? Нимә кәрәк уларҙың дарыуҙары? Теймәһендәр, тыныслыҡта ҡалдырһындар ине уны! Береһен дә күргеһе лә, ишеткеһе лә килмәй Резеданың. Әммә Илһам уның ай-вайына ҡарамай, бәләкәй генә аҡ төймәсекте ауыҙына ҡаптырҙы, артынан түгә-түгә һыу эсерҙе. Резеданың өҫ кейемдәрен систереп, юрған япты. Илһам үҙе лә, кәләшен ҡосағына ҡымтып, эргәһенә ятты. Резедаға рәхәт тә, ҡыйын да. Ситкә этергә итә, әммә көсө етмәй. Унан башында тағы уйҙар ҡайнай башлай: уға бит бындай бәхетле минуттарҙы кисерергә күп ҡалманы, ятып ҡалһын иркәләнеп, ниңә ситкә этергә? Илһам әлегә уның законлы ире бит әле!

Бер аҙҙан иҙерәп йоҡлап китте Резеда, әммә оҙаҡ та ятманы, тирләп уянды. Бүлмә эсе дөм-ҡараңғы, исмаһам, ай ҙа юҡ. Сәғәт нисә икән? Эргәһендә бер ни белмәй мышнай-мышнай Илһам йоҡлай. Тимәк, ваҡыт һуң! Резеданың йөрәге дөп-дөп типте. Урамда шылт иткән дә тауыш юҡ, әйтерһең, тормош туҡтап ҡалған. Ул бит мунса яғырға тейеш ине! Дөрөҫөрәге, ҡәйнәһе. Яҡмай ҡуйһа? Яҡҡан хәлдә лә ишеген йоҙаҡлаһа? Сәйет төн уртаһында килеп ғауғалап, Резеданы таптырып йөрөһә? Унан булмаҫ, тимә! Резеда торорға теләп, урынынан ҡалҡынды. Әммә кәүҙәһе бүрәнә кеүек, үҙен һис тыңламай. Башы ла, ҡом тултырып ҡуйылғандай, көс етмәҫлек ауыр. Ҡыбырларға ла хәле етмәйенсә, лып итеп урынына кире ауҙы. Күҙенә йәш эркелде. Артабан әллә йоҡланы, әллә юҡ, ошо ике арауыҡта Илһам һәм Сәйет менән һаташты.

* * *

Күҙҙәрен асҡанда, яҡтырғайны инде. Ҡояш уларҙың тәҙрәһенә боролған, тимәк, һыйырҙар көтөүгә күптән киткән. Резеда, ҡорт саҡҡандай, һикереп тороп ултырҙы. Ул бит йоҡлап ҡалған! Әҙәмдән оят! Ынйыбикә апайҙарҙың һыйырҙары һауылдымы? Һауылғандыр, ҡәйнәһе уның уянғанын көтөп ятмағандыр... Килене турһында нимә уйланы икән? Ә Сәйет? Резеда килде тип, үҙенең ундалығын һиҙҙереп ҡуйманымы? Уф... Ниңә атты был көн? Ниңә уянды? Ниңә мәңгелеккә күҙҙәрен йомманы шунда? Күрәһеләре бөтмәгән өсөнмө? Ҡатынҡай, ауыр итеп ыңғырашып, йөҙтүбән әйләнеп ятты. Нимә эшләргә? Ниндәй көс табып торорға? Өйҙә тынлыҡ. Ауыр тынлыҡ. Бүлмәнең, улай ғына түгел, тотош өйҙөң йәме юҡ, һыуыҡ, шомло, тын ҡыҫыла. Әйтерһең, кемдер үлгән. Хәйер, Резеда үҙе үлде түгелме ни? Карауатта тәне генә ята, йәне үлде. Шуға ла ҡыйын кеүек тойолалыр ул. Бүтәндәргә ғәҙәттәгесә таң аталыр, шул уҡ һауаны һулайҙарҙыр.

Урамда мөңгөр-мөңгөр һөйләшәләр. Ниңә Илһам уның янына инеп тә сыҡмай? Хәлен белешмәй? Әй, юҡ та, инмәһен! Кәрәкмәй, бер кемде лә күргеһе килмәй Резеданың. Бына ошо яҫтыҡты ҡосаҡлап, ауырығанға һалышып тик ятасаҡ ул бөгөн карауатта. Сәйет тә теләһә ни эшләһен! Кискә Резеда бөтөнләй икенсе донъяға юлланасаҡ. Арыны ул барыһынан да. Ялҡты. Был мәхшәр бер ҡасан да бөтмәйәсәк, бәхетле булмаясаҡ барыбер Резеда. Иң һәйбәте - бер кемгә лә бәлә һалмай ғына китеү. Үҙ ваҡытында. Үҙе белеп.

**(Дауамы. Башы 20-22-се, 24-28-се һандарҙа).**

✓ *Беҙ, башҡорттар, әгәр ҙә Аллаһы Тәғәләнең барлығын, берҙән-бер булыуын танымаһаҡ, бының өсөн динебеҙгә ҡайтмаһаҡ, ул тыуған еребеҙҙе яндырасаҡ, үҙебеҙҙе был ерҙәрҙе ташлап китергә мәжбүр итәсәк.*



УЯН, УЙЛАН...

**Күптән түгел Хәйбулла районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты Ғатаулла ишан Әбделмәликов, Зәйнулла ишан Рәсүлев, Ғабдулла ишан Сәиди, Мөжәүир хәҙрәт Сиражетдинов һәм башҡа танылған дин әһелдәре, республикабыҙҙың күренекле шәхестәре һәм батырҙары иҫтәлегенә арналған рсепублика йыйыны үткәрҙе. Йыйын быйыл икенсе тапҡыр районды Ғатаулла ишан тыуып үҫкән Вәлит ауылы янында уҙҙы. Дини йыйынды ойоштороуҙа Хәйбулла районы хакимиәте күп көс һалған. Хакимиәт башлығы Ринат Бикбовтың был мәсьәләгә аңлы рәүештә ҙур ихласлыҡ менән тотоноуы күп кенә район етәкселәренә үрнәк булырлыҡ. Беҙҙә бит: "Дин дәүләттән айырылған", - тип, бәғзе бер район етәкселәре дини байрамдарҙан йөҙ сөйә. Шул уҡ ваҡытта күрше Татарстан Республикаһында ҡайһы бер хакимиәт башлыҡтары Хаж сәфәрен етәкләй. Быныһы юлайҡан ғына. Йыйынға килгәндә инде, уның рухы былтырғынан һис тә кәм булманы, киреһенсә, Ҡояш апайҙың иртә яҙҙан дала өҫтөнә тулыһынса хужа булып алып, уны яндырған, көйҙөргән нурҙары майҙанға йыйылыусыларҙың күңел яныуына ла, ғәм һәм сәм балҡышына ла әүерелде, буғай. Еребеҙҙе йылдан-йыл аяуһыҙыраҡ ялмай барған ҡоролоҡтоң барсабыҙҙың йән яныуына әүерелә барыуын да тойорға була ине был йыйында. Йыйында сығыш яһаусы һәр кем был мәсьәләгә үҙ мөнәсәбәтен белдермәй ҡалманы. Мин дә Вәлит ауылы янында үткән ошо дини йыйында тыуған ҡайһы бер фекерҙәрем менән уртаҡлашмаҡсы булдым.**

# ЙӨРӘГЕМДЕ ЯҠТЫРТ, ХОҘАЙ...

## халҡым өсөн



### Үҙебеҙҙе һаҡлау - милләтте һаҡлау

Һуңғы йылдарҙа милләтебеҙҙең динебеҙгә йөҙө менән боролоуына "Собханалла!" тип кенә әйтергә булыр ине. Шулай ҙа милли тормошобоҙға, булмышыбыҙға, көнитмешебеҙгә янаған күп кенә бәләләр оло борсолоуҙар тыуҙырмай ҡалмай. Ниндәй генә юҫыҡта уйлаһаҡ та, күп кенә бәләләребеҙҙең башы үҙебеҙҙә, аныҡлабыраҡ әйткәндә, берҙәм, бер уйлы булмауыбыҙҙа, үҙ яҙмышыбыҙға битарафлығыбыҙҙа бит. Кешелек, милләт берҙәм, бер уйлы, бер ғәмле һәм бер маҡсатлы булһын өсөн дә төшөргән бит Аллаһы Тәғәлә күңелдәргә дин тәғлимәтен. Кешеләр берҙәм, бер уйлы булып афәттәргә ҡаршы тора алһын өсөн дә Аллаһы Тәғәлә уларҙы төрлө ҡәүемдәргә, милләттәргә бүлгән. Әгәр ҙә Аллаһы Тәғәлә беҙҙе донъяға башҡорт итеп яралтҡан икән, бының менән беҙгә ошо ҡәүем исеме аҫтында тупланып, үҙебеҙҙе һаҡлау сәбәбен һәм маҡсатын да бүләк иткән. Беҙ бөгөн үҙ-үҙебеҙҙе, ғаиләбеҙҙе, яҡындарыбыҙҙы һаҡлайбыҙ икән, милләтебеҙҙе лә һаҡлайбыҙ һәм яҡлайбыҙ. Әгәр ҙә милләтебеҙ тиңдәр араһында тиң, яҡлаулы һәм һаҡлаулы була икән - уның һәр ағзаһы ла яҡлаулы һәм һаҡлаулы, тигән һүҙ. "Һинең бәхетең һуң кемгә кәрәк, үҙ ояңды ғына ҡайғыртһаң..." - тигән халыҡ шағиры Рәми Ғарипов.

Динде, Аллаһы Тәғәләне инҡар иткән атеистик ҡоролош емерелгәнгә ике тиҫтәгә яҡын ваҡыт үтте. Ошо йылдар эсендә күп кенә йәштәребеҙ төрлө сит илдәргә барып, дини ғилем эстәп ҡайтты. Хәҙер мәсете булмаған башҡорт ауылы донъяла бик һирәк күренештер. Тик мәсеттәребеҙҙең, бигерәк тә халҡыбыҙҙың иң ҙур өлөшө йәшәгән ауыл мәсеттәренең ғәмәлдә буш тиерлек тороуын нисек аңлатырға була һуң? Рәсми дини етәкселек, урындағы дини ойошмалар был эштәргә издиһат итеп ҡарай, әммә дәррәү ҡуҙғалыш юҡ. Дингә ҡайтыу һәр кемдең шәхсиәтенә бәйле. Шуға күрә бала сағынан дини тәрбиә алмаған кешенең тота килеп, башҡалар ыңғайына, "Эт сапҡанда, бет саба", тип намаҙ уҡый башлауын да модаға эйәреү тип кенә аңлап булыр ине. Улай булғас, күптәребеҙҙәге дингә ҡарата булған битараф ҡарашты нисек аңлатырға була һуң? Был һорауҙарға яуапты тарихтан эҙләргә кәрәктер. Нимә генә булмаһын, беҙҙең халыҡ Урта Азия, Ғәрәбстан, Мысыр халыҡтары кеүек ортодоксаль динле түгел, Хаҡ Тәғәләгә тоғролоғобоҙ беҙҙә күберәк ихласлыҡ, фиҙаҡәрлек рәүешендә йәшәй. Ошонан сығып ҡарағанда, тәриҡәт тарафтарыусы Зәйнулла ишан Рәсүлевты нәҡ ортодоксаль дин тотоусы башҡорт һәм татар муллаларының Ырымбур диниә назаратына һәм урындағы властарға ошаҡ яҙып, төрмәгә оҙатыуы ла һис һүҙһеҙ аңлашыла. Беҙгә Ислам дине күберәген тәриҡәт аша ингән һәм ул юл халҡыбыҙҙың күңел торошона, тәбиғи сифатына бик яҡын. Тимәк, милләтебеҙ берҙәм рәүештә, бер аңлаулы булып дингә ҡайтһын өсөн үҙебеҙҙең ишандар һәм шәйехтәр кәрәк. Әгәр ҙә ундай заттарыбыҙ табылмаһа, дини кәмәбеҙ аҡҡош, ҡыҫала, суртан өс яҡҡа тартҡан йөк хәлендә ҡаласаҡ. Беҙгә дин иң беренсе нәүбәттә халҡыбыҙҙы бергә туплаусы, йөрәген уятыусы, иманға вә әхлаҡҡа саҡырыусы сара булараҡ кәрәк.

### Ниңә ямғыр яумай?

Ошондай шарттарҙа һуңғы йылдарҙа бигерәк тә башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә ҡоролоҡ хөкөм һөрә. Әгәр ҙә беҙ ергә төшкән ямғырҙы, ҡотто, муллыҡты, бәрәкәтте Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәтенән килә, тип аңлайбыҙ икән, башҡорт кешеһе йәшәгән ергә ямғыр яумауын Хаҡ Тәғәләбеҙҙең беҙҙе ошо юл менән һиҫкәнергә мәжбүр итеүе тип тә аңлай алабыҙ. Аллаһы Тәғәлә ошо юл менән беҙҙе нимәнән иҫкәртергә теләй һуң? Беҙ, башҡорттар, әгәр ҙә Аллаһы Тәғәләнең барлығын, берҙән-бер булыуын танымаһаҡ, бының өсөн динебеҙгә ҡайтмаһаҡ, ул тыуған еребеҙҙе яндырасаҡ, үҙебеҙҙе был ерҙәрҙе ташлап китергә мәжбүр итәсәк. Ситкә китһәк, беҙ донъяның башҡа эре ҡәүемдәре тарафынан йотоласаҡбыҙ. Әгәр ҙә ошо фекер хәҡиҡәт булмаһа, һуңғы йылдарҙа ҡоролоҡ милләтебеҙ фажиғәһенә әүерелә бармаҫ ине. Башҡортостандағы, тарихи Башҡортостандағы ҡоролоҡ иң тәүге сиратта башҡорт халҡының дингә мөнәсәбәтенән килә. Айырым ауылдарҙа, төбәктәрҙә йәшәүселәр йылға буйҙарына, тауҙарға сығып аҡ ҡорбандар сала, доға уҡып, зекер әйтеп, Аллаһы Тәғәләнән ямғыр һорай. Әммә был теләктәр, был һорауҙар айырым ауылдыҡы, айырым кешеләрҙеке генә, тотош милләттеке түгел. Кем доға уҡымай, ямғыр һорамай, тимәк, ул ямғыр теләмәй булып сыға. Бер ҡәүемдең айырым вәкилдәре теләмәгән ямғырҙы, муллыҡты Хаҡ Тәғәлә һорағандар өсөн генә яуҙыра алмай, бының менән ул бер үк ҡәүем кешеләрен бер-береһенә ҡаршы ҡуйыр ине. Ә Аллаһы Тәғәлә изгеләрҙән изгеһе, ғәҙелдәрҙән ғәҙеле -ул берәүҙәргә яҡшылыҡ эшләү иҫәбенә икенселәргә насарлыҡ эшләмәй. Был нимә хаҡында һөйләй һуң? Еребеҙгә ҡоролоҡ ебәреп, Хаҡ Тәғәләбеҙ тотош милләтебеҙҙең дингә, үҙ асылына ҡайтыуын талап итәлер, моғайын. Тыуған еребеҙҙә изге һөйәктәре ятыусы Зәйнулла, Ғатаулла, Ғабдулла ишандарыбыҙ, Мөжәүир хәҙрәттәребеҙҙең яҡты рухтары доға һораған кеүек, дымға сарсаған тыуған еребеҙ милләтебеҙҙең хаҡ диненә ҡайтыуын ямғыр теләгәндәй зарығып көтә. Кем белә, кешелектең ошондай Ҡотб-Заман булырлыҡ изге заттары ятҡан ерҙә йәшәүсе милләттәштәре дингә илтифат итмәгән өсөн дә яуҙырмайҙыр Хоҙай был ергә ямғырҙы. Был хәлгә башҡа төрлө аңлатманың булыуы мөмкинме икән?

### Сәбәп ҡылайыҡ...

Изге Ҡөрьәнебеҙҙә "Сәбәп ҡыл" тигән бик киң мәғәнәгә эйә һүҙбәйләнеш бар. Мәңгелек ҡоролоҡҡа дусар ҡәүемдәр, шул иҫәптән ғәрәптәр Хоҙай биргәнде күктән көтөп ултырмай, үҙ ерен үҙе һуғара, сәбәп ҡыла һәм шуның менән тормошон ҡотло-бәрәкәтле итә. Ә беҙ иһә, һаман да күктән көтәбеҙ. Әйтерһең дә, Аллаһы Тәғәлә шунда тик ямғыр яуҙырып ултыра. Мөғжизә бит тыуған еребеҙҙә. Хаҡ Тәғәләбеҙ беҙгә күпме аҫыл шишмәләр, мул һыулы күлдәр, йылғалар бүләк иткән һәм сәбәп ҡылырға бойорған. Алла бирмәй, ул бойора ғына. Бойорғанды үтәмәгәнде юҡҡа сығара, бер ҡәүемде икенсеһе менән алмаштыра, Туфан һыуҙарын ҡалҡытып, тотош кешелекте һәләкәткә дусар итә. Вәлит ауылы янына милләтебеҙҙең меңдән бер өлөшө лә йыйылманы, әммә беҙ күмәкләп доға башҡарғанда, зекер әйткәндә үҙебеҙҙе шул тиклем көслө итеп тойҙоҡ. Әгәр ҙә барса милләтебеҙҙе бер уйға, бер маҡсатҡа туплап, һәр беребеҙ берәр ус ҡына ергә һыу һипһә лә, йылғакүлдәр хасил булырлыҡ. Тимәк, беҙгә бер уйлы, бер маҡсатлы булыу етмәй. Еребеҙгә ҡоролоҡ ебәреп, Хаҡ Тәғәләбеҙ беҙҙе бергә тупланырға, үҙ асылыбыҙға ҡайтырға саҡыра һәм үҙ хозурына әйҙәй. Сәбәп ҡылыуыбыҙ - дини асылыбыҙға ҡайтыуыбыҙ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Юғарыла әйтелгәндәрҙе йомғаҡлап, билдәле шағирә, Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Зөлфиә Ханнанованың Вәлит ауылы янындағы сара өсөн махсус рәүештә яҙылған шиғырын килтерге килә. Тағы ла "Собханалла!" тиәйек, яҙыусыларыбыҙҙың, шағирҙарыбыҙҙың әҫәрҙәренә лә Аллаһы Тәғәләгә инаныуға бәйле һүҙҙәр, шул һүҙҙәргә бәйле аңлауҙар инә башланы.**

Тел ҡөҙрәте бирсе, Хоҙай, халҡым өсөн,
Ғәмһеҙҙәрҙең күңел ҡылын ҡаҡһын өсөн,
Үлән кеүек халҡым ҡабат ҡалҡһын өсөн,
Тел ҡөҙрәтен бирсе, Хоҙай, халҡым өсөн!

Йөрәгемде яҡтырт, Хоҙай, халҡым өсөн,
Ҡараңғыла яҡты юлды тапһын өсөн,
Хаҡлыҡ эҙләп, ул ҡояшҡа баҡһын өсөн,
Йөрәгемде яҡтырт, Хоҙай, халҡым өсөн!

Күҙҙәремде нурла, Хоҙай, халҡым өсөн,
Күңелдәргә иман нуры яҡһын өсөн,
Ил-дәүләтем күкрәп сәскә атһын өсөн,
Күҙҙәремде нурла, Хоҙай, халҡым өсөн!

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

ҮӘТ, ҠЫҘЫ-ЫҠ!

### "Күҙ һытылған, тел һүтелгән..."

Бер туған ҡустым Ринат биш йәштәр самаһында урамда уйнап, арып килеп инде лә, эш ҡыйраҡкан кешемдәй булып, "Уф, арыным", - тигән була. Нимәләр эшләүе менән ҡыҙыҡһынғас: "Тел һүтелгән, күҙ һытылған, йәше ағып тора", - ти.

### "Ҡамасауламайым бит, әйт тә..."

Атайымдың бер туған ҡустыһының ҡыҙы Айгөл бәләкәй сағында инәһенән:"Мешать итмә башҡортса нисек була?" - тип һорай икән. Инәһе уға, "Ҡамасаулама", - тип яуаплаған. Айгөл тағы ныҡыша икән. Инәһе тағы "Ҡамасаулама", - тип ҡабатлаған. Ҡыҙсыҡ шул саҡ: "Ҡамасауламайым да инде, мешать итмә тигән һүҙҙе башҡортса әйт тә, китәм", - тигән.

### "Ниңә мине уятманың..."

Ике туған апаймдың балалары Мәҙинә менән Фәрит, ике туған ҡустым Рөстәм армияға киткәс, уны һағынып бер булалар икән. Бер көн иртән йоҡонан уянғас, Фәрит: "Рөстәм ағайымды төшөмдә күрҙем", - тигәс, Мәҙинә:"Күргәс, ниңә мине уятманың..." - тип илап ебәргән.

### "Кит, тапалаң"

Ҡустымдың улына йәш ярым тирәһе булғандыр, уны ла бесән эшләргә алып барҙыҡ (хәйер, ул 3 айлыҡтан бесән "эшләп" үҫте). Бәләкәй генә булып, аяҡ аҫтында буталанып йөрөгәс, барыһы ла уға "Кит, тапалаң", - ти. Көндәрҙең берәһендә, төшкө ашты ашап алғас, атайым тороп китте лә, беҙ ултырған түбәләстән төшә торған урынға, ике ҡайын араһына барып басты. Рәмил дә тороп, олатаһы артынан эйәрергә булды. Тик олатай туҡтап ҡалғас, аптыраманы: "Лулатай, тит, тапалаң", - тип әйтеп һалды.

### "Минеке - инәй"

Силәбе өлкәһенең Йүрүҙән ҡалаһында йәшәгән ҡустымдың улы Рәмил әсәйебеҙгә, инәй, тигәнебеҙҙе ишетеп, ағайымдан һорау алған: "Кем ул инәй?". "Бына һин рус балалар баҡсаһына йөрөгәс, мама тиәһегеҙ, ә мама башҡортса инәй була". Ошо һөйләшеүҙән һуң Йөрүҙәнгә ҡайтып күп тә тормай, Рәмил дә, һеңлеһе Динара ла ауырып китәләр һәм әсәләре менән дауаханаға баралар. Һеңлеһен процедураға алып ингәс, Рәмил коридорға сығып, улай-былай йүгерә башлаған. Медсестра күреп ҡалып, "Не бегай, где твоя мама?", - тип һорағас, малай туҡтаған да, ныҡлы, ышаныслы тауыш менән: "У меня не мама, у меня инәй!" - тип, ары йүгергән.

### "Ул башҡортса аңламай"

Рәмилгә алты йәш тулмағайны әле. Ауылда сервант кәштәһендә ятҡан ҡумыҙҙы күреп ҡалды ла, нимә ул, алып бир, күрһәт, ти башланы. Алып, уйнап күрһәткәс, мине лә өйрәт, тип эргәнән китмәй. Уға исем дә тапты - диң-дон. Нисә көн өйрәткәнмендер, Өфөгә китеп барҙым. Килеп етеп, ауылға шылтыратһам, өйҙәгеләр геү килә. Баҡтиһәң, Рәмил ҡумыҙ сиртергә өйрәнгән икән. Ике ҡумыҙҙың берәһен бирел ебәргән өләсәһе. Икенсе ҡайтҡанда, ҡумыҙында уйнайһынмы, тигәс, әйе, ти. Балалар баҡсаһына алып барып, тәрбиәсенә уйнап күрһәтмәнеңме, тием. Рәмилдең иҫе лә китмәне: "Юҡ, ул башҡортса аңламай", - тип әйтеп һалды...

Зәйтүнә ӘЙЛЕ теркәп барҙы.

БАЛАЛАР ДОНЪЯҺЫ

# МАЛАЙҘАР НИҢӘ СӘСТӘН ТАРТА?

## Ятраҡкан өсөн инде...

**Бала күңеле - саф күҙ йәше кеүек: унда йылылыҡ та, яҡтылыҡ та бар, тиҙәр. Балалар шулай уҡ ышаныусан да, асыҡ күңелле лә, һәр һорауға әҙер генә торған әйтер һүҙе лә бар уларҙың, шуға ла уңайы сыҡкан һайын, улар менән һөйләшеп алырға атлығып ҡына торабыҙ беҙ ҙә. Бөгөн гәзит уҡыусыларға "Сәңгелдәк" тапшырыуы аша яҡшы таныш бәләкәс дуҫтарыбыҙ - Наҙгөл Шәрәфетдинова, Камилә Дәүләтбирҙина, Гөлнәзирә Буранҡаева һәм Азамат Ҡарабулатов менән етди, ололарса һорауҙарға яуаптар эҙләнек.**



**Һәр кешенең Тыуған иле була. Тыуған ил уға ни өсөн кәрәк икән?**
**Камилә:** Шунда йәшәр өсөн кәрәк.
**Гөлнәзирә:** Кеше үҙенең туған теләндә һөйләшә алһын өсөн уға мотлаҡ Тыуған ил кәрәк.

**Һеҙҙең Тыуған илегеҙ нисек атала?**
**Азамат:** Рәсәй. Әй, юҡ, Башҡортостан. Нисек инде, кешенең ике тыуған иле буламы икән? Быны атайҙан йәки әсәйҙән һорап белергә кәрәк әле.
**Камила:** Минең тыуған илем - Өфө.
**Наҙгөл:** Минеке лә Өфө, сөнки мин бында тыуғанмын.
**Камилә:** Ә минең әсәйем - баймакская.

**Ни өсөн беҙ туған телебеҙҙе белергә тейешбеҙ?**
**Наҙгөл:** Һөйләшер өсөн. Урамда башҡортто таныр өсөн. Мин урыҫ телендә урыҫтар менән һөйләшәм, ә башҡорттар менән башҡортса.
**Азамат:** Мин тиҙҙән Англияға китәм, сөнки инглиз телен беләм.
**Камилә:** Әхирәттәр менән, атай, әсәй менән һөйләшер өсөн туған тел кәрәк.
**Гөлнәзирә:** Кеше үҙенең телендә һөйләшергә тейеш. Бына урыҫ телендә нисек кенә тырышһаң да, рәхәтләнеп һөйләшеп-аңлашып булмай.
**Азамат:** Етмәһә, урыҫтар уҫал була, башҡорттар уҫал түгел. Яңы йортҡа күскөйнек, урамда урыҫ малайҙары миңә бәйләнеп маташты. Уҫал булһаң, Алла бабай язалай икәнен белмәйҙәрҙер, күрәһең.

**Ә Алла тураһында һеҙ нимә беләһегеҙ?**
**Азамат:** Алла бабай - ул Санта Клаус һымаҡтыр, тип уйлайым. Сантаға оҡшағас, Санта һымаҡ кейенәлер. Боландарҙы санаға егеп йөрөймө икән? Ул барыһына ла баш. Берәй кеше насар уй менән йөрөһә, насар эштәр эшләһә, Алла уларҙы язалай. Алла кешеләр менән дә, ҡырмыҫҡалар менән дә идара итә.
**Наҙгөл:** Ул яҡшы бабай, мин уны бик яратам. Ул күренмәй.
**Камилә:** Ябай бабайҙыр инде.
**Гөлнәзирә:** Алла барыһын да һаҡлап йөрөтә.

**Еп-пәрейҙәр, шайтандар тураһында берәй нәмә беләһегеҙме?**
**Камилә:** Шайтандар ҡойроҡло. Улар ер аҫтында йөрөйҙәр.
**Азамат:** Урманда йөрөй улар. Күҙҙәре ҡыҙыл, ҡайһа саҡта йәшел була. Телевизорҙан күрҙем.
**Камилә:** Әсәй кискә магазинға китһә, мин ҡурҡам. Әллә ниндәй тауыштар ишетәлә, шуға юрған аҫтында ултырып торам.
**Наҙгөл:** Минең дә әсәй кискә тиклем эшләй. Ул булмағанда тәҙрәләр ныҡ итеп асылып китә, әллә нимә шырылдай. Шунан мин ҡурҡа башлайым һәм тиҙ генә йәшенәм. Бәлки, шайтандар шулай шаяралыр?

**Уҫал кеше ниндәй була?**
**Камилә:** Ҡурҡыныс кешеләр иң уҫал кешеләр була. Улар сүп-сар араһында йөрөйҙәр. Минең күргәнем юҡ уларҙы, ә әсәйем күргән.
**Наҙгөл:** Уҫал кеше ҙур-ҙур булалыр ул.
**Азамат:** Эт тә ҡурҡыныс та инде.
**Камилә:** Азамат эттән ҡурҡа, ә мин ҡурҡмайым.
**Азамат:** Юҡсы, Ейәнсура районының Урта Муйнаҡ ауылындағы бөтә эттәр ҙә мине таный һәм белә, улар мине тешләмәй.
**Гөлнәзирә:** Ҡурҡҡаныңды белһә, эт һиңә шунда уҡ өрә башлай, шуға унан ҡурҡмаҫҡа кәрәк.
**Камилә:** Минең атайым уҫал. Сөнки бөтә балаларҙың да аталары уҫал булырға тейеш. Ҡыҙҙарҙың сәсен тартып йөрөгән малайҙар ҙа уҫал була.

**Ә ни өсөн малайҙар ҡыҙҙарҙың сәсенән тарта икән?**
**Камилә:** Әгәр малай ҡыҙҙы ятраһа, сәсенән тарта.
**Гөлнәзирә:** Беҙҙең мәктәптә ундай шаян малайҙар бигерәк күп.

**Ҡыҙҙар, ә һеҙҙең сәсегеҙҙән малайҙар тартамы һуң?**
**Камилә:** Юҡ, беҙҙең балалар баҡсаһында бөтәһе лә бик тәртипле. Моғайын да, тәртипһеҙ малайҙар мәктәптә генә булалыр.

**Ә кем ул хәйләкәр кеше?**
**Камилә:** Балалар баҡсаһында минең менән бер төркөмгә йөрөгән бер ҡыҙыҡай бик хәйләкәр. Ышанаһығыҙмы, ул мине көн һайын берәй нәмә тип шаярта. Мәҫәлән, минең бесәйем бар, тип әйтә, әсәһенән һораһам, юҡ, ти.
**Наҙгөл:** Бына уйлайым да, минең әхирәттәрем, дуҫтарым араһында ла хәйләкәрҙәре күп икән...

**Ҡайһы бер кешеләр шаяртырға, ҡайһылары алдашырға ярата. Шаяртыуҙы алдашыуҙан нисек айырырға була?**
**Гөлнәзирә:** Алдашып, кешене үпкәләтергә була, ә шаяртҡанды барыһы ла ярата. Бер тапҡыр ғына алдашһаң да, эстән ҡыйын булып тик тора, шуға алдашырға ярамай.
**Азамат:** Шаяртыуға түҙеп булһа ла, алдашыуға түҙеп тороп булмай шул...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Билдәле француз яҙыусыһы Жан де Лабрюерҙың, балалар үткән менән дә, киләсәк менән дә түгел, ә ололарҙан айырмалы рәүештә, бөгөнгө менән йәшәй белә, тигән һүҙҙәре бар. Балалар тағы ла өлкәндәргә ҡарағанда Тыуған илен ныҡыраҡ ярата, туған телендә һөйләшергә оялмай, ололар араһында йыш осраған алдашыу, уҫаллыҡ кеүек ыңғай булмаған сифаттарҙы өнәп етмәй икән. Билдәүҙәге бала бишкә тәрләнһә лә, булыр бала - бишектән, тиҙәр, Наҙгөл, Камилә, Гөлнәзирә, Азаматтың ҙур үҫкәс тә илһөйәр, телһөйәр булыуын теләп ҡалабыҙ.**

Ләйсән ДАЯНОВА
әңгәмәләште.

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# ҮҘ ЙӨГӨНДӨ ҮҘЕҢ КҮТӘР...

## һалпы булма кешегә

● Үҙең генә уйлар оло уйың булһа, сәфәргә юлдаш алма - уйың уртаҡланыр, кәрәкмәгән фекер тупларһың.

● Татлы теленә алданып, ялған дуҫ һайлауҙан абай бул - тел ул күп осраҡта күңелдәгегә ҡаршы һөйләй.

● Йәннәттә хөлдә (йәннәт туны) кейәм, тип, әләм-борхан йөрөмә - ҡотоң китер, ырыҫың кәмер, аҙәм көлкөһө байғошҡа әйләнерһең.

● Унышыңды күреп күккә сөйһәләр, маһайма - ергә ҡоланым, тип фекер ит; ергә дыңҡылдатып бәрһәләр - күккә осам, тип хис ит: шул саҡта ғына ысын танылыу килер.

● Ҡара ҡайғы ҡара ҡаянан осорам, тәрән упҡынға ырғытам, тәрән даръяға батырам, аҡылыңдан яҙҙырам, тиер - ҡурҡма, сабыр бул, сабыр көсө барыһын еңер.

● Затлы күрпә (тун - ҡәйнәмдең һүҙе) кейһәң дә, иҫке сәкмәнеңде түргә эл - иҫке яңыны һаҡлағанын яҡшы бел.

● Ҡартайған, серегән, тип, баҡсалағы һәр ағасты киҫмә, эргәһенә йәшен ултырт: серек ағас та оҙай йәшәй, йәш ағасҡа һөйәлһә.

● Үҙең күтәрергә тейеш йөктө бүтән берәүгә лә йөкмәтмә: кешегә һалынған - һалпыға әйләнгән.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

**"Киске Өфө" гәзитендә үткәрелгән түңәрәк ҡорҙа милләттең һанын арттырыу буйынса тәҡдим ителгән демографик модуль тураһында уҡыным. Аллаға шөкөр, әле илебеҙ, милләтебеҙ, телебеҙ тип хәстәрләрлек һәм уның яҙмышы, киләсәге тураһында уйларлыҡ аҡыллы йәштәребеҙ бөтмәгән икән, тип бик тә шатландым. Әммә йәштәрҙең лидеры Фәнзил Әхмәтшиндың был тәҡдиме ҡоро һан артынан ғына ҡыуыу булмаһа ярай ҙа, тигән борсолоу ҙа барлыҡҡа килде.**

# МАҢҠОРТТАН...

## маңҡорт тыуа

Милләтебеҙҙең бөгөнгө хәле, йәғни бик күптәрҙең үҙ туған телен, тарихын белмәүе, асылынан ситләшеүе, хатта милләтен танымауы - улар барыһы ла Рәсәйҙең төптән уйланған, бик күп йылдар алда планлаштырылған геноциды һөҙөмтәһе икәнен беләбеҙ. Әммә бөтөн бындай хәлдәргә үҙебеҙ ҙә гәйепле бит, сөнки ҡулдан килгәнде лә эшләмәйбеҙ.

Ғаилә эсендәге хәлдәргә бәрәү ҙә ҡыҫыла алмай. Балаларыбыҙҙы туған телдә һөйләшергә өйрәтеү - ул ғаиләлә атҡарылырға тейешле бурыс. Әммә беҙ балалар менән дә, ейәндәр менән ватаемерә булһа ла урыҫ телендә һөйләшәбеҙ. Балаларыбыҙ аңына туған телен, моңон, бишек йырын сабый саҡтан һеңдереп үҫтермәү - беҙҙең, ата-әсәнең гәйебе ул. Бына шул арҡала барлыҡҡа килә милләтенә ҡарата битарафлыҡ, моңһоҙлоҡ, рухһыҙлыҡ.

Балыҡ, әлбиттә, башынан серей. Беҙҙең етәкселәребеҙ юғары трибуналарҙан сығыш яһағанда: "Башҡортостанда һәр өс ғаиләнең береһе - ҡатнаш ғаилә", - тип маҡтанырға ярата. Әммә улар тап ана шул ҡатнаш ғаиләләрҙең күбәйеүе милләтте һан яғынан ғына кәметеп ҡалмайынса, сифаты, милли рухы яғынан да зәғифләндереүе тураһында уйламай. Әллә артыҡ бер ҡатлылыҡтан, әллә милләтебеҙҙе яратмауҙан, һанға һукмауҙан килә бындай шапырыныуҙар, аңламайым...

Бына шул илдәге дөйөм сәйәсәт тә, уны урындарҙа һис һүҙһеҙ тормошҡа ашырыу ҙа, ғаиләләрҙең дә үҙ йолаларынан ситләшеп, ана шул дөйөм ағымға ҡушылыуы һөҙөмтәһе лә инде милләтебеҙҙең тотош бер быуынының маңҡортҡа әйләнеүе. Ә маңҡорттан, әлбиттә, маңҡорт тыуа. Бер саҡ Өфөлә бала сағымдан уҡ күрмәгән ауылдаш ағай менән осрашырға насип булды. Вазифалы, интеллигент ағайыбыҙ (ҙур заводта инженер булып эшләгән, хаҡлы ялда) ҙур ғорурлыҡ менән: "Бер ҡыҙым украин милләтендә, бер ҡыҙым французда кейәүҙә, Франциялағы ейәнем тик французса ғына һөйләшә, русса ла, башҡортса ла белмәй", - тип маҡтанып ҡуйҙы. Эргәмдәге апайым түҙмәне: "Уның нимәһенә маҡтанаһығыҙ, әсәләре башҡорт булып та, ейәндәрең башҡортса белмәгәс, маҡтанырға түгел, иларға кәрәк", - тине. Бик тә дөрөҫ әйтте. Тик теге ағайҙың ауыҙ сите менән генә көләмһерәп ҡуйыуына ҡарағанда, ул был йән әсеткес хәлдең асылын аңламаны барыбер. Бәлки, берәй заман аңлар...

Тағы бер миҫал. Беҙҙең бәләкәй генә Учалы ҡалаһында балалар урамда күберәк рус телендә генә һөйләшеп йөрөй. Бер танышымдың ейәнсәре өләсәһенә хатта: "Минең менән урамда башҡортса һөйләшмә, оялам", - тигән. Был да ғаиләлә туған телгә ҡарата хөрмәт, һөйөү тәрбиәләй белмәүҙең бер миҫалы инде.

Йәштәрҙең милләтебеҙҙең иҫәбен арттырыу буйынса демографик модулен тормошҡа ашырыуға йәштәр үҙҙәре үк ҡамасаулар, тип ҡурҡам. Сөнки беҙҙең башҡорт йәштәренең сит милләт мөхәниәтенә, сит милләт ҡыҙҙарына һәм егеттәренә ынтылыуын аптырап күҙәтә йөрөйөм. Уландар мәрйәгә өйләнә, ҡыҙҙарыбыҙ ҙа күберәк сит милләттән һайлай тормош иптәшен. Яҡын ғына туған һылыуҙарға шул турала әйткәс: "Урыҫ та кеше бит, мәрйә киленем башҡорт киленемдән дә яҡшыраҡ әле", - тип еберҙеләр. "Ә милләт тураһында уйламайһығыҙмы ни?" - тигәс, "Милләт беҙгә нимә бирҙе, белемме, эш урынымы, йәшәү урынымы?" - тип, ауыҙымдыябып та ҡуйҙылар.

Йәштәрҙең ҡатнаш никахтар ҡороп, сит милләткә балалар үҫтереүе - бөгөнгө заманда милләтебеҙҙе бөләндөрөүсе иң аяныс күренеш. Егеттәребеҙ сит милләттән булған әсәләрҙән тыуған балаларҙың бер ваҡытта ла башҡорт булып үҫмәүен аңлаһын ине. Ундай миҫал юҡ тиерлек. Ә бит сит милләт кешеләре милләтебеҙҙең иң аҫыл улдарын, ҡыҙҙарын алып китә. Шул турала уйлап ҡарағаныгыҙ бармы икән? Шулай булғас, беҙҙең милләт нинә артһын да, аҫыл, аҡыллы патриоттарыбыҙ ҡайҙан тыуһын - йөҙ йыл буйы һаман бер кимәлдә торабыҙ. Күп оло ғалимдарыбыҙ, яҙыусыларыбыҙ, ҡатнаш ғаиләләр ҡан яңыртыр өсөн кәрәк, тигән булып һылтана ул, ләкин башҡортҡа түгел, башҡа милләткә генә ярҙам итәбеҙ ҡан яңыртырға ла, һан яғынан артырға ла...

Көнбайыш башҡорттарын үҙ диалектында уҡытайыҡ, уларға махсус дәреслектәр сығарайыҡ, тиеүселәр ҙә күбәйеп китте һуңғы ваҡытта. Минеңсә, әҙәби тел бәрәү генә булырға тейеш, Урыҫтар ҙа, татарҙар ҙа бик күп диалектта һөйләшә бит, ә әҙәби телдәре бәрәү генә. Нишләп башҡорттоҡо күп булырға тейеш? Улайға китһә, Дим, Арғаяш, Ҡыйғы диалекттарында ла дәреслектәр сығарайыҡмы, югинә? Әҙәби телдең һәр диалектта булыуы милләтте берләштермәй, киреһенсә, таркәта.

Күпме талант, аҡыл эйәләре ситтә аҙашып йөрөй, ҡайтарайыҡ шуларҙы Башҡортостаныбыҙға, уларға эшләр, йәшәр өсөн унайлы шарттар тыуҙырайыҡ. Берҙәм, ойошҡан, татыу булайыҡ. Үҙендән шәберәк булғандарҙы күрә алмау, бер-беренде һатыу, юҡҡа сығарыу тик беҙҙең халыҡҡа ғына хас нәмәме икән, тип аптырап ҡуям ҡайһы саҡта. Арынайыҡ шул яман ғәҙәттәрҙән. Дошмандар шунан бик оҫта файҙалана: башҡортто үҙ башҡорто ҡулы менән бөтөрә, юҡҡа сығара. Беҙ әле булһа шул ябай хәҡиҡәтте аңлау кимәленән бик алыҫ торабыҙ. Йәһүдтәрҙән, татарҙарҙан үрнәк алайыҡ. Улар берҙәм, татыу халыҡ. Балаларыбыҙға туған телен, илен, милләтен, баҫмаларын, сәнғәтен һөйөү тойғоларын сабый саҡтан уҡ һалайыҡ, аң кимәленә һеңдерәйек. Шул саҡта ғына беҙ аҡыллы, көслө рухлы милләт булып ойошорбоҙ.

Фәнзил Әхмәтшиндың модулен тормошҡа ашырыу өсөн "Ун ике менселәр" рәтенә иң көслө рухлы башҡорт ир-егеттәрен һайлап алырға кәрәк. Уларҙың ҡатындары шулай уҡ алдынғы ҡарашлы, уҡымышлы, көслө рухлы башҡорт ҡыҙҙары булырға тейеш. Шундай ғаиләләр менән генә милләтебеҙҙе һан яғынан ғына түгел, сифат яғынан да һаҡлап алып ҡалырбыҙ.

**Рәйсә ҠАРАБАЕВА.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ТУҒАН ТЕЛЕН БЕЛҺӘ...

## бөйөк шағир булыр ине

**Ер йөҙөндә ниндәй генә милләттәр юҡ! Ҡасандыр булып та, бөгөн бөтөнләй юғалған милләттәр ҙа билдәле. Һәр милләттең милли йөҙөн билдәләүсе төп сифаты - ул тел. Тел - аралашыу ҡоралы ғына түгел, ә милләттең үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген билдәләүсе мөһим ҡорал. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, бөгөнгө көндә 6700 телгә юғалыу хәүефе янай. Беҙҙең тел дә шулар иҫәбенә инган, сөнки туған башҡорт телен һанға һуҡмай, рус телен үҙләштереүселәр, телен бөтөнләй белмәүселәр һаны сикһеҙ.**

Телде юғалтыу - милләтте, илде, ерҙе юғалтыу, тигәнде аңлата. Ҡыҙғаныска ҡаршы, был күптәрҙе борсомай. Атаәсәләр башҡортса тәрбиәләү һәм уҡытыу мөмкинлеге булыуға ҡарамаҫтан, балаларын һаман рус балалар баҡсаларына, мәктәптәренә урынлаштыра. Шул аҙымдары менән ҙур яңылышлыҡ, милләт алдында енәйәт эшләүен аңламай ҙа улар. Бала шундай атай, әсәйҙәр арҡаһында үҙ булмышынан мәхрүм ителә. Ә бит ғалимдар раҫлауынса, фәҡәт үҙ асылы, булмышы нигеҙендә тәрбиәләнгән бала ғына бар һәләте менән асыла һәм бөтә яҡтан да камил була. Күптән түгел өсөнсө класта уҡыусы башҡорт балаһы башҡорт теле дәресенә рус телендә шиғыр яҙып алып килде. Баланың ижади һәләте бар. Әгәр ошо бала туған телен белгән булһа, башҡортса ижад итеп, киләсәктә бөтә донъяға билдәле шағир булыр ине. Ә сит тел уның күңел ҡалыптарына тура килмәй, күңел нескәлектәрен асып бөтмәй, шуға күпкә өмөт итеп тә булмай. Ошоно уның маңҡорт ата-әсәһенә нисек аңлатаһың!

Ҡан аша бирелгән милләт, тел үҙенсәлектәре ғәжәп бер күренеш ул. Туған телен белгән кеше генә рухи байлыҡҡа эйә була. Ә бөгөн рухи яҡтан зәғифтәр аҙым һайын. Тел ҡәҙерен күпме өйрәтһән дә, һөйләһән дә, барыбер уларҙың башына кермәҫ. Сөнки телдән баш тартыу уларҙың олатайөләсәһенән, атай-әсәйенән башланған, алтынға тиң быуындар сылбырына ҙур хилафлыҡ килгән. Юғалтыуҙарҙы аяҡҡа баҫтырыу өсөн... милләтебеҙҙең абруйын ҡайтарыу өҫтөндә эшләргә кәрәк. Булмаған абруйҙы күтәреп булмай, ә башҡорттоң абруйы - тарихыбыҙҙа. Тик уны күптәр белмәй. Тотош милләттең тарихын күмеп ҡуйырға тырышты бит совет власы. Һеҙ яҙмаһыҙ, тарихһыҙ халыҡ, тине. Бына шул провокацияға бирелде күп милләттәштәр. Киттеләр... Киткәндәрҙе: "Әйҙәгеҙ, кире ҡайтығыҙ милләтегеҙгә, телегеҙҙе тергеҙегеҙ, өйрәнегеҙ", - тип өгөтләү кәрәкмәйҙер, тим. Иғтибарҙы ул араларға булғәнсе, ысын башҡорттарға төрлө яҡлап ярҙам күрһәтергә, үҫтерергә кәрәк.

Телем, ерем, тип янған ысын башҡорттар биҳисап. Ил йүгәнен башҡорт рухлы, милләтенә тоғро, уны дауам итерлек кешеләргә тапшырырға кәрәк. Улар ғына саф башҡорттар быуынын дауам итәсәк, милләтебеҙ абруйын ҡайтарасаҡ. Телгә хыянат итеүселәр, туған тел мохтажлығын ҡасан да булһа кисереп, кире үҙ мәхитенә ҡайтасаҡ барыбер. Булдыҡлы милләттәштәребеҙгә юл бирәйек! Алға, милләттәштәр!

**Раушания САТТАРОВА,**
**Күмертау ҡалаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Үҙенде сикләмә

Генри Торо тигән фәйләсуф: "Күпселек тыныс өмөтһөҙлөктә йәшәй", - тип яҙған. Әммә ул быны 100 йыл самаһы элек әйткән. Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, был хәл-торош хәҙер тағы ла хөртәйә төшкән. Бөгөн был фраза шулайыраҡ яңғырар ине:"Барыһы ла тыныс өмөтһөҙлөктә йәшәй".

Ни өсөн кешеләр бик йыш өмөтһөҙлөккә бирелә? Быға уларҙы күп сәбәптәр этәрә: эш, сәләмәтлек, балалар, наркотиктар, иртәгәһе көн тураһындағы уйҙар, енәйәтселек, сәйәсәт, һуғыштар, уҡыуға һалым, бәғерһеҙлек, экология, урамдағы хәрәкәт, тауыш, хәҡтар, күршеләр. Һеҙ был исемлекте артабан дауам итә алаһығыҙ. Быларҙың барыһы менән дә нимә эшләп була? Яуап ун этаптан тора. Улар беҙҙең гәҙәттәребеҙҙең йәйлап үҙгәреүенән ғибәрәт.

Мин һеҙҙең юл күрһәтеүсегеҙ буласаҡмын. Минә һуңғы меңйыллыҡта йәшәп, һәр береһе үҙенән һуң баһалап бөткөһөҙ мираҫ ҡалдырған, әммә ошо ваҡыт эсендә билдәһеҙ булып ҡалған, онотолған йәки иғтибарға алынмаған 10 аҡыл эйәһе теге йәки был юҫыҡта ярҙам итте. Был мираҫтың билдәһеҙләгенә башҡа халыҡтарҙың беҙҙән алыҫ булған һәм киң мәғлүмәтте үҙ эсенә алған әҙәбиәтендә йәшеренгәнлеге сәбәпсе. Был И-Цзинга - Ҡытайҙың Үҙгәрештәр китабына ҡағыла. Унда бик ҙур аҡыл тупланған. Беҙҙең өсөн Тәүрат менән Ҡөрьән нисек ҡәҙерле булһа, был китап Ҡытайҙың бер нисә быуын хакимдарына шундай уҡ дәрәжәлә ҡәҙерле. И-Цзинда тормошто тамырынан үҙгәртерлек ҡеүәтле көс йәшеренгән.

Күренекле аҡыл эйәһе үҙ өлкәһен яҡшы белгән кешеләрҙе дәртләндерә. Был фразаны "Күренекле кеше башҡаларҙы дәртләндерә", тип ҡыҫҡартырға мөмкин. Ә инде был осраҡта: "Кешеләрҙе дәртләндергән кеше мәшһүргә әйләнә" тиһәк, ул тамамланған фекерҙе белдерә. Икенсе төрлө әйткәндә, кешеләрҙе дәртләндереп, һеҙ үҙегеҙҙе дәртләндерәһегеҙ.

Бына нисек? Тимәк, барыһын да әрләгән етәксе үҙен дөрөҫ тотмай? Эйе. Уға баһаны, дөрөҫөрәге, ҡон ҡайтарыуҙы оҙаҡ көтәһе түгел. Кәмһетеүгә өҫтөнлөк биргән кеше үҙен башҡаларҙан өҫтөн, тип уйлай. Әммә һөҙөмтә бөтөнләй киреһенсә килеп сыға.

"Икенсе тормош һинең ҡасан кәрәкле төймәгә баҫыуыңды көтә", тигән ҡытай шағирәһе һәм фәйләсуфы Ло Фу. Ул - VIII быуатта йәшәгән шағирә һәм фәйләсуф. Ул И-Цзиндың уҡыусыһы булған һәм үҙ ижадында уға йыш мөрәжәғәт иткән. Ул Тан династияһы сәскә атҡан ваҡытта (Ҡытай тарихында бөйөк осорҙарҙың береһе) билдәле У күле эргәһендә йәшәгән. Ло Фу ғүмерен медитацияға бағышлауына ҡарамаҫтан, үҙе тирәләй бик күп уҡыусылар йыйып, уларҙы эске тыныслыҡҡа өлгәшеү ысулдарына һәм тормошҡа илтифат итергә өйрәткән. Ул кешенең кешене ихтирам итеүенә, уның тормошто яҡшы яҡҡа үҙгәртеренә ышанған. И-Цзин авторҙары мендәрсә йыл элек беҙ бөгөн генә аңлаған нәмәләрҙе - кешенең уңышы өсөн уның үҙенә ҡарата ихтирамы булырға тейешлеген аңлаған.

Түбәнһетеү йоғошло. Дәртләндереү ҙә. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ - атаһы улын дәртләндерә, улы уҡытыусыһына рәхмәтле, уҡытыусы материалды балаларға яҡшы итеп аңлата, класс яҡшы билдәләр ала, уҡыусылар уны башҡаларға ла тәҡдим итә. Был минә ҡағылмай, тиһегеҙме? Туранан-тура ҡағыла.

**Роберт СТОУН.**



## 19 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
Уважаемые читатели! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Большая нефть", 5-я серия. Драма
22.20 "Олимпиада-80. Победить любой ценой"
23.30 "Познер"
00.30 "Маленькая зона турбулентности". Комедия
02.30, 03.05 "Доктор Джекил и мистер Хайд". Триллер
03.00 Новости
04.30 "Детективы"

### РОССИЯ 1
Уважаемые читатели! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 97-я серия
18.05 "Ефросинья", 106-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Девичник", 1-я и 2-я серии
22.55 "Городок"
23.55 "Вести+"
00.15 "Кулагин и партнеры"
00.45 "Ночные посетители". Мелодрама
02.30 "Честный детектив"
03.05 "Пропавшие ребята". Драма

### НТВ
Уважаемые читатели! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 13.30
13.30 "Супруги". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Столица греха". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Олимпийские тайны России"
00.25 "Омут". Криминальная драма
01.25 "Футбольная ночь"
02.00 "Перебежчик"
04.15 "Мужчины в большом городе"

### БСТ
Уважаемые читатели! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск. яз.)
15.15 Художественный фильм
16.45 "Эмиль из Леннеберги"
17.10 "Виктория"
18.05 "Любимые мелодии"
18.40 "Родословная малой Родины"
19.00 Новости (на башк. яз.)
19.30 "Длиною в жизнь". А. Нестрогаев
20.00 "Полезные новости"
20.15 "Сэнгелдэк"
20.30 "Возвращение"
21.00 "Торговые маршруты"
21.30 Новости (на русск.яз.)
22.00 "Легенды спорта"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.05 Худ. фильм. По окончании: погода

## 20 ИЮЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Большая нефть". Драма
22.20 "Олег Анофриев. Между прошлым и будущим".
23.30 "Ассистентка". Драма
01.00 "Американская семейка". Сериал
01.50, 03.05 "Далекая страна"
03.00 "Новости"
04.30 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 98-я серия
18.05 "Ефросинья", 107-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Девичник", 3-я и 4-я серии
22.55 "Числюсь по России. Памяти Саввы Ямщикова". Док. фильм
23.50 "Фестиваль "Славянский базар-2010"
23.55 "Вести+"
00.15 Кулагин и партнеры"
00.45 "Внутреннее пространство"
03.05 "Горячая десятка"
04.10 "Девушка-сплетница"

### НТВ
06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Криминальное видео". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Столица греха". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "МАсквичи"
00.25 "Омут"
01.15 "Сталин. Live"
02.10 "Контора"

### БСТ
07.00 "Салям"
09.00 Новости (на башк. яз.)
09.25 "Полезные новости"
09.35, 17.10 "Виктория"
10.30 "Замандаш"
11.00 Новости (на русск. яз.)
11.15 "Фильм-детям"
13.00 Новости (на башк. яз.)
13.15 "Музыка на канале"
13.30 "Сельский час"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск.яз.)
15.15 Худ. фильм
16.45 "Эмиль из Леннеберги"
17.55 "Любимые мелодии"
18.40 "Родословная малой Родины"
19.00 Новости (на башк. яз.)
19.30 "Точка зрения"
20.15 "Сэнгелдэк"
20.35 "Судьба". Программа Магнитогорского ТВ
21.00 "Победить себя"
21.30 Новости (на русск.яз.)
22.00 "Уфимское "Времечко"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.05 "Криминальный спектр"
23.25 "Худ. фильм". По окончании: погода

## 21 ИЮЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Большая нефть". Драма
22.20 Неделя Франции на Первом. "Де Голль. Последний великий француз"
23.30 "Преследование". Триллер
01.20 "Американская семейка"
01.50, 03.05 "Черная зависть"
03.00 Новости
03.50 "За гранью возможного"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Тайна трех океанов. В погоне за призраком"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.35 "Дворик", 99-я серия
18.05 "Ефросинья", 108-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Девичник", 5-я и 6-я серии
22.55 "Хозяин, будь человеком! Собаки"
23.55 "Вести+"
00.15 "Кулагин и партнеры"
00.45 "Безымянная звезда". Мелодрама
03.30 "Девушка-сплетница"

### НТВ
Уважаемые читатели! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 12.00
12.00 "Суд присяжных"
13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Столица греха". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "МАсквичи"
00.20 "Омут"
01.20 "Сталин. Live"
02.20 "Под вишневой луной". Мелодрама
04.15 "Контора"
05.10 "Мужчины в большом городе"

### БСТ
07.00 "Салям"
09.00, 13.00 Новости (на башк. яз.)
09.25 "Виктория"
10.20 "Антракт". З. Аминева
11.00 Новости (на русск. яз.)
11.15 "Фильм-детям"
13.00 Новости (на башк. яз.)
13.15 "Музыка на канале"
13.30 "Сокращая расстояния". Пермский край
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск.яз.)
15.15 "Байык"
16.05 "Концерт хоровой капеллы"
16.50 "Эмиль из Леннеберги"
17.20 "Виктория"
18.05 "Любимые мелодии"
18.40 "Родословная малой Родины"
19.00 Новости (на башк. яз.)
19.30 "Крестьянский двор"
20.00 "Полезные новости"
20.15 "Сэнгелдэк"
20.30 "Историческая среда"
21.00 "В центре внимания"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Тай-тулак"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.05 "Хрустальный соловей-2010"
По окончании: погода

## 22 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым"
21.00 Время
21.30 "Большая нефть". Драма
22.20 "Человек и закон"
23.30 "Обмани меня". Сериал
00.20 "Девчонки". Мелодрама
02.20, 03.05 "Пробуждая мертвецов".
04.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30, 00.15 "Кулагин и партнеры"
17.35 "Дворик", 100-я серия
18.05 "Ефросинья", 109-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Девичник", 7-я и 8-я серии
22.55 "Русские без России". Док. фильм
00.55 "Вести+"
00.45 "Изгоняющий дьявола"
03.10 "Девушка-сплетница"
04.00 "Гений пародии. Недолгая жизнь Виктора Чистякова"

### НТВ
06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Криминальное видео"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Столица греха". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "МАсквичи"
00.20 "Омут"
01.20 "Сталин. Live"
02.20 "Смерть девушки с разворота: история Дороти Страттен". Биографическая драма
04.20 "Контора"
05.15 "Мужчины в большом городе"

### БСТ
07.00 "Салям"
09.00 Новости (на башк. яз.)
09.25 "Полезные новости"
09.35 "Виктория"
10.20 Мультфильм
10.30 "Тай-тулак"
11.00 Новости (на русск. яз.)
11.15 "Фильм-детям"
13.00, 19.00 Новости (на башк. яз.)
13.15 "Музыка на канале"
13.30 "Историческая среда"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск. яз.)
15.15 Художественный фильм
17.05 "Мультфильм"
17.20 "Виктория"
18.10 "Учим башкирский язык"
18.40 "Родословная малой Родины"
19.30 "Сельский час"
20.15 "Сэнгелдэк"
20.30 "Пятая четверть"
21.00 "Формула успеха"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Действующие лица"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.05 "Худ. фильм". По окончании: погода

## 23 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Другой Дюма". Биографическая драма
23.30 "С любовью к России". Концерт Патрисии Каас в Кремле
01.00 "Мистификация". Мелодрама
03.10 "Всплеск"
05.10 "Дурнушка"

### РОССИЯ 1
05.00 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мой серебряный шар"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
12.55 "Райские яблочки"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 101-я серия
18.05 "Ефросинья", 110-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала"
22.50 "Девчата"
23.40 "Кипяток". Мелодрама
01.50 "Грабеж"
04.00 "Растущая боль"

### НТВ
06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Криминальное видео". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Семин". "Серийный убийца". Детективный сериал
22.20 "Таблетка от старости"
23.25 "МАсквичи"
00.15 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной"
01.00 "Сталин. Live"
02.00 "Диалог с садовником". Комедия
04.00 "Контора"
05.00 "Мужчины в большом городе"

### БСТ
07.00 "Салям"
09.00 Новости (на башк. яз.)
09.30 "Виктория"
10.20 Мультфильм
10.30 "Артылыш"
11.00 Новости (на русск. яз.)
11.15 "Доброе начало"
13.00 Новости (на башк. яз.)
13.15 "Музыка на канале"
13.30 "Победить себя"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск. яз.)
15.15 "Художественный фильм"
16.45 "Мультфильм"
17.10 "Виктория"
17.55 "Йома"
18.20 "Любимые мелодии"
18.40 "Родословная малой Родины"
19.00 "Новости" (на башк. яз)
19.30 "Сокращая расстояния". Самара
20.05 "Полезные новости"
20.15 "Сэнгелдэк"
20.30 "Историческая среда"
21.00 "Райхан"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Уфимское "Времечко"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.05 "Криминальный спектр"
23.25 Художественный фильм. По окончании: погода

## 24 ИЮЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Бабушка Удава". Мультфильм
06.20 "Коллеги"
08.20 "Дисней-клуб"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Смак"
10.50 "Василий Ливанов. В жизни я не Шерлок Холмс"
12.10 "Дело было в Пенкове"
14.00 "Цирк со звездами"
15.50 "Среда обитания" "Почему все так дорого?"
16.50 "Кто хочет стать миллионером?"
18.00 "Футбол. Чемпионат России. XIV тур. "Рубин"- "Динамо". Прямой эфир.
20.00 "Детектор лжи"
21.00 "Время"
21.15 "Дискотека 80-х"
22.40 "Служить и защищать". Комедийный боевик
00.30 "Ангелы Чарли: только вперед". Приключения
02.30 "Последний легион". Драма
04.20 "Дурнушка"
05.00 "Детективы"

### РОССИЯ 1
06.00 "Дело пестрых". Детектив
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Война за океан. Подводники"
09.20 "Дарю тебе звезду"
09.25 "Добро пожаловать, или посторонним вход воспрещен". Комедия
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Паблисити"
11.40 "Качество жизни"
12.00 "Рецепты здоровья"
12.05 "Формула совершенства"
12.15 "Комната смеха"
13.10 "Сто к одному"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Крутой маршрут Игоря Крутого"
15.50 "Кто хочет стать Максимом Галкиным"
16.45 "Субботний вечер"
18.40 "Ловушка". Триллер
20.00 "Вести"
22.55 "Альпинист". Драма
00.50 "Возвращение супермена". Приключения
03.55 "Спецотряд "Лезвие". Боевик

### НТВ
05.45 "Рублевка. Live"
06.45 "Люди Икс: эволюция"
07.30 "Сказки Баженова"
08.00, 10.00, 13.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Без рецепта"
09.25 "Смотр"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Лучший город земли. Москва спортивная"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Очная ставка"
17.10 "Преступление будет раскрыто". Сериал
19.00 "Сегодня"
19.25 "Самые громкие русские сенсации"
21.05 "Ты не поверишь!"
21.40 "Фокусник". Криминальная драма
23.35 "Легенды видео". "Полицейская академия-3": повторное обучение". Комедия
01.10 "Эван Всемогущий". Комедия
03.05 "Контора"
04.00 "Мужчины в большом городе"

### БСТ
08.00 Новости (на русск. яз.)
08.05 "Доброе утро!"
08.50 Погода
08.55 Мультфильм
10.25 "Советы садоводам"
10.55 "Волшебный курай"
11.30 "Музыкальные встречи с Вл. Муртазиным"
12.05 И. Абдуллин "Лунные вечера Айсылу". Спектакль
14.00 Новости (на башк. яз.)
14.25 "Сулпылар"
14.45 "Утиные истории". Мультсериал
15.10 "Дарю песню"
16.25 "Детский сабантуй. Татышлинский район"
17.00 "Душа народная"
19.00 Новости (на башк. яз.)
19.20 "Дарю песню"
20.15 "Сэнгелдэк"
20.35 "На своей земле"
21.10 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "На сон грядущий"
22.45 "Хит-парад "Етеген"
23.30 Художественный фильм. По окончании: погода

## 25 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.40, 06.10 "Нейтральные воды"
06.00 Новости
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.20 "Пока все дома"
11.10 "Счастье есть!"
12.20 "Фазенда"
12.50 "Вертикаль". Драма
14.20 "Своя колея". Памяти Владимира Высоцкого
15.50 "Трагедия русского Ватсона"
16.30 "Версия полковника Зорина". Детектив
18.00 "Владимир Высоцкий и Марина Влади. Первый поцелуй"
19.00 "Юбилейный вечер Олега Анофриева"
21.00 Воскресное "Время"
21.20 "Юленька". Триллер
23.10 "Маленький Николя". Комедия
00.50 "Футбол. Чемпионат России. XIV тур ЦСКА - "Спартак" (Нальчик)
02.50 "Дурнушка"
03.40 Док. фильм

### РОССИЯ 1
05.55 "Золотая мина"
08.35 "Утренняя почта"
09.10 "Песенка мышонка"
09.20 "Оливер Твист". Полнометражный мультфильм
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан". Неделя в городе"
11.50 "Городок"
12.20 "Хозяин тайги". Детектив
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Честный детектив"
15.00 "Французский сон". Док. фильм
15.55 "Аншлаг и Компания"
17.50 "Роман выходного дня". Комедия
20.00 "Вести"
20.25 "Преступная страсть". Драма
22.15 "Девочка". Драма
01.00 "Право на убийство". Криминальная драма
03.00 "Сумеречная зона". Фантастика

### НТВ
05.45 "Рублевка. Live"
06.45 "Люди Икс: эволюция"
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
09.00 "Дачный ответ"
10.20 "День Высоцкого. "И снова здравствуйте!"
11.10 "Место встречи изменить нельзя". 1-я и 2-я серии. Детектив
13.20 "Место встречи изменить нельзя". 3-я и 4-я серии. Детектив
19.25 "Высота". Программа памяти Владимира Высоцкого"
20.15 "НТВшники. 30 лет без Высоцкого". Специальный выпуск
21.20 "За пределами закона". Боевик
23.20 "Своя колея. Высоцкий в кино"
00.20 "Авиаторы"
00.55 "Брачный контракт". Сериал
03.10 "Контора"
04.10 "Мужчины в большом городе"

### БСТ
08.00 Новости (на русск. яз.)
08.00 "Для вас, ветераны!"
08.45 Погода
08.50 Мультфильм
10.30 "Бабушкин сундучок"
11.00 "Тэмле"
11.30 "Сулпылар"
11.50 "Семер"
12.05 "Байтус"
12.50 "Телекомпас"
13.25 "Книжный дом"
13.50 "Дарю песню"
14.50 "Салям"
15.10 "Малый купол мира-2010". Передача 2-я
15.45 "Утиные истории"
16.10 "Дорога к храму"
16.30 "Быстрее, выше, сильнее!"
17.05 "Дарю песню!". Концерт по заявкам
18.10 "В центре внимания"
18.35 "Байык"
21.10 "Урал Лото 6 из 40"
21.30 "Ватан". События недели"
22.40 Погода
22.45 "Вечер.com"
23.30 Художественный фильм. По окончании: погода

---

Сибай ҡалаһынан Ғәлиә Зәбихулла ҡыҙы Әхмәрова бөтә туғандары исеменән ҡәҙерле ҡоҙағыйы, изге йөрәкле кеше

**Ләлә Зөфәр ҡыҙы Муллабаеваның**

вафат булыуы сәбәпле, кейәүе Илнур Биктимер улы, ҡыҙы Мәҙинәнең, ейәндәренең һәм барлыҡ туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғаләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғаләменән Әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын.

✓ *Әгәр ҙә профиль буйынса балдар һаны тигеҙ икән, ҡабул итеү комиссияһы абитуриенттарҙың аттестаттарының уртаса балы рейтингын төҙөгәндән һуң ғына кемде уҡырға алырға икәнлеген хәл итергә бурыслы.*



БЕЛЕМ УСАҒЫ

# АБРУЙЛЫ ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## кәрәкле һөнәр һайла

**Былтыр юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү тәртибенә бәйле ҡайһы бер аңлашылмаусанлыҡтар ҡабул итеү комиссияһы хеҙмәткәрҙәренә лә, абитуриенттарҙың үҙҙәренә лә күп мәшәҡәттәр тыуҙырҙы. Был, иң тәүҙә, мәктәптә тамамлаусыларҙың БДИ һөҙөмтәләрен теләгән уҡыу йортона ебәреү хоҡуғына эйә булыуы менән бәйле ине. Хатта һөҙөмтәләрен бер вуздың 33 һөнәренә биреп, 22-һенә уҡырға ингән абитуриенттар ҙа булғыланы. Шуға ла быйыл уҡырға инеү тәртиптәре бер аҙ үҙгәреп, норматив документтар менән аныҡыраҡ билдәләнде.**



### Бишәүҙән артыҡ түгел

Быйыл абитуриент документтарын бер юлы биш вузға һәм ундағы өс бүлеккә генә тапшырырға хоҡуҡлы. Был, юғары уҡыу йорттары ректорҙары фекеренсә, вуздарға ниндәй һөнәр алырға теләгәнен дә белмәгән "осраҡлы" абитуриенттарҙан ҡотҡарасаҡ. Әммә хоҡуҡ һаҡлаусылар әйтеүенсә, вуздарҙың һанын аныҡ билдәләү - күрәләтә кеше хоҡуҡтарын боҙоу булып сыға. Әммә ҡабул итеү комиссиялары миллионлаған ғариза аҫтында күмелеп ҡалмаһын өсөн эште дөрөҫ итеп ойоштороу ҙа етә. Мәҫәлән, быйыл күп вуздарға документтарҙы электрон почта аша ебәрергә мөмкин. Етмәһә, БДИ һөҙөмтәләрен дә, башҡа ҡағыҙҙарҙы ла раҫлатыу кәрәкмәй. Роспотребнадзор фаразы буйынса, киләһе йылдан башҡа вуздар ҙа виртуаль ҡабул итеү ойоштора аласаҡ. Әлегә был хеҙмәт Рәсәйҙең иң эре юғары уҡыу йорттарында ғына.

Кемдең нисә вузға документ тапшырыуын берәү ҙә иҫәпләп ултырмаясаҡ, шуға ла былтырғы кеүек илдең һәр юғары уҡыу йортона ғариза яҙырға ашығыусылар яңылыша. Быйылдан ойошторолған махсус контроль системаһы абитуриент вузға документтарын килтергәс тә уларҙы таныштамаларҙың федераль базаһына (Федеральная база свидетельств - ФБС) теркәп ҡуясаҡ. Абитуриенттың ғаризалар иҫәбе билдәләнгән һанға тулған булһа, база был турала уҡыу йортон иҫкәртәсәк.

### Өсәү урынына - икәү

Былтыр ҡабул итеү комиссияларының төп проблемаһы булып абитуриенттың бер юлы бер нисә вуздың бер нисә бүлегенә уҡырға инеүе торҙо. Йәғни, абитуриент вуздың ҡабул итеү исемлегендә бар, әммә үҙе юҡ, сөнки ул тағы ла бер нисә уҡыу йортона уҡырға инеү сәбәпле, һайлау мөмкинлегенә эйә ине. Шуға ла Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы уҡырға ҡабул итеүҙе быйыл ике этапҡа ҡалдырырға хәл итте. Уның беренсе этабы - 30 июлдән 4 августҡа тиклем булһа, икенсе этабы 5 августан 10 августҡа тиклем дауам итәсәк. Олимпиада еңеүселәре, маҡсатлы йүнәлтмә һәм льгота буйынса уҡырға инергә теләүселәр вузға документтарҙың төп нөсхәһен 30 июлгә тиклем тапшырырға тейеш. Вуздың ҡабул итеү исемлегенә иң тәүҙә БДИ буйынса юғары балдар йыя алған абитуриенттар инәсәк. Әгәр ҙә бер урынға бер нисә кеше дәғүә итә икән, олимпиада призерҙарына, миҙалсыларға өҫтөнлөк биреләсәк. Әгәр ҙә бындай өҫтөнлөк менән ҡулланыусылар юҡ икән, вуз студенты исемен йөрөтөү хоҡуғын БДИ буйынса иң юғары балға эйә булыусы ала. Тик әгәр ҙә профиль буйынса балдар һаны тигеҙ икән, ҡабул итеү комиссияһы абитуриенттарҙың аттестаттарының уртаса балы рейтингын төҙөгәндән һуң ғына кемде уҡырға алырға икәнлеген хәл итергә бурыслы.

Былтыр беренсе тулҡында уҡ вузға уҡырға инеү бәхетенә ирешкән абитуриент вузға документтарының төп нөсхәһен тапшырғандан һуң кире уйлаһа, документтарҙы алыу ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырғайны. Сөнки был осраҡта вуз беренсе курсҡа ҡабул итеү тураһында ҡарар ҡабул итеп өлгөрә һәм документтарҙы кире алыу өсөн был студентты уҡыуҙан ҡыуыу тураһында тағы бер ҡарар ҡабул итеү кәрәк була. Быйыл бындай хәл килеп тыумаһын өсөн вуздар рәсми ҡабул итеү исемлектәрен августың аҙағында ғына төҙәйәсәк. Тимәк, абитуриент беренсе этапта уҡ вузға уҡырға инеп, документтарын тапшырһа ла, юридик яҡтан ул һаман абитуриент тип иҫәпләнә. Шуға ла ҡабул итеү комиссияһы беренсе талаптан уҡ уға документтарын кире ҡайтарырға бурыслы.

### Вуздарҙа хәлдәр нисек?

Бөгөнгө көндә Өфөлә 30-ҙан ашыу юғары уҡыу йорто иҫәпләнә. Улар араһында үҙ аллы республика вуздары ла, эре Рәсәй академиялары, институттары, университеттары ла бар. Был уҡыу йорттарының һаны йылдан-йыл үҙгәреп тора һәм бер генә белешмә хеҙмәте лә һеҙгә ҡалала күпме вуз барлығы тураһында тулы яуап бирә алмаясаҡ. Төрлө Интернет-каналдарҙағы юғары уҡыу йорттары тураһындағы өҙөк-йыртыҡ мәғлүмәт тә йышыраҡ ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Шуға ла тулыраҡ мәғлүмәтте вуздарҙың ҡабул итеү комиссияларынан ғына алырға мөмкин.

БР Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, быйыл республиканың 10 дәүләт вузына (Эске эштәр министрлығының юридик институты һәм Дәүләт идарлығы хеҙмәте академияһын иҫәпкә алмайынса) 9410 студент бюджет урынға уҡырға алынасаҡ.

■ Рәсәй классик вуздары рейтингында 30-сы урында булған Башҡорт дәүләт университетында быйыл яңы һөнәрҙәр асылмаған. Уҡыу йортонда көндөҙгө бүлектә бюджет урындар һаны - 932. Абитуриенттар араһында киң популярлыҡ яулаған һөнәрҙәр араһында химия, социология беренсе урындарҙа тора.

■ М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында быйыл 10 факультетҡа, 3 институтҡа ғаризалар ҡабул ителә. Бюджет урындар һаны - 940, былтырғы йыл менән сағыштырғанда был һан үҙгәрмәгән. Әлеге мәлдә 5800-ҙән ашыу ғариза тапшырылған да инде. Абитуриенттар тәбиғи фәндәргә өҫтөнлөк бирә, ҡабул итеү комиссияһы хеҙмәткәрҙәре белдереүенсә, биоэкология бүлегендә 1 урынға - 22, генетика бүлегендә - 17,07, биология бүлегендә 4,95 кеше дәғүә итә. Информацион система һәм технологиялар бүлегендә 1 урынға 15,85 кеше булһа, тарих, юриспруденция, иҡтисад буйынса өҫтәмә белем алыу мөмкинлеге биргән социаль-иҡтисади белем бүлегендә конкурс 5,7 кешенән алып 6,8 кешегә тиклем етә. Инглиз, гәрәп теле өҫтәмә рәүештә өйрәнелгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегендә лә конкурс юғарыраҡ - 1 урынға 3,04 кеше.

■ Башҡорт дәүләт аграр университеты бюджет нигеҙендә быйыл 1155 кеше ҡабул итәсәк, уларҙың 885-е - көндөҙгө бүлектә. Вуз быйыл өс яңы йүнәлеш - "Һыу ресурстары һәм аквакультура", "Биология (һунарсылыҡ)", "Туризм" буйынса һөнәрҙәр тәҡдим итә. Вуздың ҡабул итеү комиссияһы абитуриенттарҙан 8 меңдән ашыу ғариза ҡабул иткән, бигерәк тә "Автоматлашыу һәм электрлаштырыу", "Ер кадастры", "Ер төҙөлөшө һәм урман хужалығы", "Иҡтисад", "Финанс һәм кредит" бүлектәре абитуриенттар араһында иң популяр иҫәпләнә.

**Шул уҡ ваҡытта, эксперттар фекеренсә, республикала 10 йылдан һуң инженерҙар, компьютер аппарат тәьминиәтен булдырыусы һәм IT-белгестәр, нанотехнологиялар өлкәһендәге белгестәр, электроника һәм биотехнологиялар буйынса белгестәр, маркетологтар, сервис менән бәйле белгестәр, логистар, экологтар, медиктар, химиктар (бигерәк тә энергетика өлкәһендә) иң кәрәкле һәм юғары килем килтереүсе һөнәрҙәр иҫәпләнәсәк. Шуға ла юғары белем тураһындағы диплом алыу өсөн генә түгел, ә киләсәктә үҙеңә һәм халҡыңа файҙа килтерерҙәй һөнәр һайлау мөһимлеге лә тора бөгөнгө абитуриент алдында.**

Сәриә ҒАРИПОВА әҙерләне.

ЙӘШЕЛ ДАУА



### ҠАЙЫН ЕЛӘГЕ

Урманда үҫкән ҡайын еләге, япраҡтары, тамыры күп төрлө сирҙәрҙән дауа булып тора. Яңы ғына бешкән еләк һәм уның һуты гиперхром анемияһы, тамырҙар склерозы, гипертония, һейҙек һәм үт ташы ауырыуы, подагра булған осраҡта ҡулланыла. Еләктәре һәм япраҡтары ашҡаҙандың сей яраһын һәм бөйән эсеген, бөйөр, талаҡ ауырыуҙарын, инфекциялы һары ауырыуын, нервылар системаһы ҡаҡшауын, бронхит астмаһын дауалай. Шулай уҡ ҡайын еләге үпкә туберкулезынан һәм шәкәр диабетынан файҙалы. Еләктәре һәм тамырҙары һарҡындыһын балаяҡҡы шешкәндә, ә сәскәләре төнәтмәһен йөрәк ауырыуҙары ваҡытында ҡулланалар. Ҡайын еләге менән шулай уҡ ҡанлы һәм эренле яраларҙы, ангинаны дауалайҙар.

**Аҙ ҡанлылыҡ.** 50 г ҡайын еләге үләненә 1 л һыуыҡ һыу ҡойоп, төнгәлөккә төнәтергә ҡуйырға. Иртәнсәк 5-7 минут ҡайнатырға һәм термоста тағы ла 4-6 сәғәт төнәтеп алырға. Һуңынан бөтә миҡдарҙы көн дауамында бәләкәй йотомдар менән ҡабул итергә.

**Аллергия.** Үҙе лә ҡайһы бер осраҡтарҙа аллергия тыуҙырыуына ҡарамаҫтан, ҡайын еләге аллергиянан яҡшы дауа булып тора. Бының өсөн 1 ҡалаҡ кипкән япраҡтарҙы бер стакан ҡайнар һыуҙа ярты сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр стакандың дүрттән бер өлөшөн эсергә.

**Яҫы ҡыҙыл тимерәү.** 8-10 балғалаҡ үләнде 800 мл һыуға һалып, һүрән утта 5 минут ҡайнатырға. Берәр стаканлап көнөнә 4 тапҡыр йылымыс көйө эсергә (ҙур ҡуламдә һыу эсеү ярағын осраҡта). Әгәр һарҡындының тәьҫире көсһөҙ булһа, миҡдарҙы бер аҙ өҫтәргә мөмкин.

**Миокардит.** Фарфор сәйнүктә 3-4 төп ҡайын еләген тамыры менән ҡайнатырға һәм сәй кеүек шәкәрләп эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

**Йөрәк астмаһы.** Тын юлы ҡыҫылғанда шундай төнәтмә ныҡ ярҙам итә: 1 ҡалаҡ япраҡты 2 стакан һыуға һалырға, ҡайнатырға. Төнәтмәне 2 сәғәт һайын 1 ҡалаҡлап ҡабул итергә.

Ҡайын еләге препараттарын йөклөлөк ваҡытында ҡулланырға ярамай. Шулай уҡ уны ашҡаҙан һуты секрецияһы юғары булғанда, бөйөр һәм бауыр сәнсеп ауыртҡанда, аппендицит булғанда ҡулланырға кәңәш итмәйҙәр.

Күптәр ҡайын еләген ас ҡарынға туйғансы ашап, ҡоҫҡолары килә, эстәре ауырта. Уны, ашағандан һуң ярты сәғәт уҙғас, ҡаймаҡҡа болғап ҡулланһаң, яҡшыраҡ.

*КОТЛАЙБЫҘ!*

Өфө ҡалаһында йәшәүсе ғаилә дуҫтарыбыҙ **Илдар Ирмәк улы менән Миләүшә Сәйфетдин ҡыҙы Хәбировтарҙың** ғаиләһенә оло бәхет, ошо йәмле көндәргә тағы ла йәм өҫтәп, ҡыҙҙары тыуҙы. Уларҙы иҫтәлекле матур ваҡиға айҡанлы ихлас ҡотлайбыҙ, бәхетле ата-әсәгә, сабыйға һаулыҡ, оҙон бәхетле ғүмер, ғаиләләренә именлек теләйбеҙ. Бөгөн аҡ биләүҙә мышнап йоҡлаған ҡыҙсығыбыҙҙы матур итеп үҫтереп, уға лайыҡлы тәрбиә биреп, уға ҡусты-һеңлеләр алып ҡайтып, ишле ғаилә булып, күгәрсендәрҙәй гөрләшеп һәм донъяны гөрләтеп йәшәгеҙ.

**Иң изге теләктәр менән Искәндәровтар ғаиләһе.**

*ИҒЛАН*

**14 августа сәғәт 11-ҙә төп корпуста Башҡорт дәүләт педагогия институтының физика-математика факультетын 1972 йылда тамамлаусыларҙың осрашыуы була.**

**Белешмә өсөн телефондар:**

**89174565528 - Флүрә, 89279444764 - Юлай.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...

# БОРОНҒОЛОҒОНДО БЕЛГЕҢ КИЛҺӘ...

## Милли музейға бар

**Барыбыҙ ҙа башҡорт халҡының тамырҙары изге Уралтауға бәйләнгәнлеген, уның был ерҙәргә ҡайҙандыр күсеп килмәгән, ә ошо төбәктә меңәр йылдар төйәк иткәнлеген беләбеҙ. Күптән түгел БР Милли музейының археология бүлегендә нәҡ ошо хәҡиҡәтте дәлилләүсе "Ике донъя: иртә тимер быуат дәүерендә Көньяҡ Уралда урман һәм дала" тип аталған күргәҙмә асылды.**

Күргәҙмәлә иртә тимер быуатта Көньяҡ Уралда булған ике мәҙәниәт: дала зонаһында - күсмә малсылыҡ, урман һәм урман-дала зонаһында игенселек һәм ултыраҡ хужалыҡ мәҙәниәте үҙ-ара сағыштырыла. Унда башлыса Башҡортостандың Өфө ҡалаһы, Иглин, Бөрө, Илеш һәм Баҡалы районДарында табылған ике археологик мәҙәниәт - Савромат һәм Сармат мәҙәниәтенә ҡараған археологик ҡомартҡылар ҡуйылған.

Күргәҙмәгә ҡуйылған экспонаттарға ҡарап, Көньяҡ Уралда йәшәгән халыҡтарҙың ике мең ярым йыл элек ниндәй кейем кейгәнен, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ниндәй биҙәнеү әйберҙәре таҡҡанын, ир-егеттәрҙең эш һәм һунар итеү ҡоралдары ниндәй булғанын, уларҙың ниндәй һауыт-һаба һәм башҡа көнкүреш әйберҙәре менән ҡулланғанын күҙ алдына килтерергә мөмкин. Сармат ҡәбиләләренең алтын, бронза һәм керамиканан яһалған биҙәнеү әйберҙәре һәм ҡоралдары, тормош-көнкүреш кәрәк-ярақтары, ғибәҙәт әйберҙәре, Көньяҡ Уралдағы күсмә һәм игенселек менән шөғөлләнгән ҡәбиләләрҙең алтын биҙәүестәре, ананьинск һәм ҡарабыҙ мәҙәниәте биҙәүестәре лә күргәҙмәгә килеүселәрҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Пьянобор мәҙәниәте костюмы реконструкцияһы беҙҙең милли кейемдәребеҙҙе лә хәтерләтеп ҡуя.

- Был яңы күргәҙмәнең әһәмиәте шунда: унда иртә тимер быуаты хаҡында һөйләнелә, ә был дәүерҙә бөгөнгө Башҡортостан биләмәләрендә сармат, саврамат ҡәбиләләре һәм шулай уҡ төрлө-төрлө күсмә ҡәбиләләр йәшәгән. Күргәҙмә материалдарына ҡарап, башҡорт тормошонда нәҡ ошо ҡәбиләләрҙең ниндәй эҙ ҡалдырғанын күрергә була. Бындай күргәҙмәне юҡҡа ғына ойоштормаһыҡ. Башҡорт халҡының меңәр йыллап тарихы бар икәнен барыһы ла ишеткәне бар, хәҙер беҙ шуны ошо күргәҙмә аша бөгөн халҡыбыҙға һәм башҡа халыҡтарға күрһәтергә һәм еткерергә теләйбеҙ, - ти БР Милли музейының генеральный директоры Ғәли Вәлиуллин. - Археологик ҡомартҡылар сармат, саврамат ҡәбиләләренең тулыһынса беҙҙең халыҡтың мәҙәниәтенә, ғөрөф-ғәҙәттәренә,



көнкүренешенә ҙур йоғонто яһағанлығын күрһәтә. Шулай итеп, беҙ башҡорт халҡының Көньяҡ Уралдағы иң боронғо халыҡ икәнлеген ошо күргәҙмә менән дәлилләйбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**БоронғолоғонДо белгең килһә, милли музейға бар, тип өндәшер инем уҡыусыларға. Милләт үҙ тарихы менән көслө: әгәр беҙ тарихыбыҙҙы яҡшы белһәк, уны тәрәндән өйрәнһәк, башҡаларға үҙебеҙҙе дөрөҫ таныттырбыҙ, үҙ-үҙебеҙҙе лә, милләтебеҙҙе лә яҡлай, шул уҡ ваҡытта күптәрҙең башҡорт тарихы тураһында дөрөҫ булмаған фараздарын да тулыһынса кире ҡаға алырбыҙ.**

**Нәзирә АЙЫТОВА.**

АТЫҢ КЕМ?

# ИСЕМЕҢ МАТУР, КЕМДӘР ҠУЙҒАН...

**Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә "Башҡорт исемдәре" китабы яңынан донъя күрҙе.**

Революцияға тиклем ата-бабаларыбыҙ балаларына матур-матур исемдәр ҡушҡан һәм тормош был исемдәрҙең есеменә тура килеүен раҫлаған. Яңы тормош быуаттар буйына йәшәгән ҡалыптарҙы емереп, яйлап ҡына арабыҙҙа Револдәр, Люциялар, Вилдәр, Кимдәр, Флоридаларҙы барлыҡҡа килтергән. Был күренеш уҙған быуаттың 90-сы йылдарына тиклем дауам итеп, милли үҙаңдың үҫеше Рәсәй ҡоролошон ғына түгел, фекерләүебеҙҙе үҙгәртеп ҡороу йылдарында ҡабаттан боронғо, халҡыбыҙға хас булған, уның асылына тап килгән исемдәр ишетелә башланы.

Бөгөн иһә яңы тыуған сабыйҙарға ниндәй исем бирергә, тип баш ватаһы түгел. "Башҡорт исемдәре" китабында 4000 антропоним бирелеп, уларҙың 3000 самаһы - ирҙәр, 1000-е ҡатын-ҡыҙҙар исеме булып тора. Улар башҡорт һәм рус телдәрендә бирелгән, этимологик һәм тарихи аңлатмалары ла бар. Китапты Өфөнөң "Башҡорт китабы йорто"нан һатып алырға мөмкин.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

### Бутҡа

Был ике төрлө бутҡа арыған организмға көс бирә, күңелде күтәрә. 1) 1 кг оҙонса дөгөгә 100 г башлы һуған, 100 г кишер, 100-әр г сәтләүектәр, петрушка йә сельдерей, 50 г үҫемлек майы, тәменә ҡарап тоҙ һалып бешерәһең; 2) 1 стакан арпа (ячневая) ярмаһын эҫе табала ҡыҙҙырырға һәм 1 ҡалаҡ үҫемлек майы ҡушырға. 50-шәр г кишер менән башлы һуғанды ҡыҙҙырып өҫтәргә, 200 г бәшмәкте турап, бергә болғарға һәм ҡайнар һыу өҫтәп, талғын утта бешерергә.

### Алма соусы

300 г таҙартылған алманы турап, әҙ генә һыуға һалып, бешереп алырға. Һыуынған алманы иләк аша үткәреп, 100 г шәкәр, бер семтем тоҙ, корица ҡушып, болғата-болғата 10-12 минут ҡайнатырға. Был соуста ашҡаҙан эшмәкәрлеген яҡшыртыусы, организмдан зарарлы матдәләрҙе сығарыусы пектин күп була.

### Байрам соусы

2 стакан тауыҡ һурпаһына 70 г аҡ май, 1,5 стакан грек сәтләүеге, 4 баш һуған, 1,5 ҡалаҡ он, 5 йомортҡа һарыһы, бер семтем кинза үләне, корица, 5 ҡәнәфер, өстән бер өлөш лимон һуты алына.

### Ҡурай еләге ҡайнатмаһы

Эмалле һауытҡа 2 кг шәкәр, 4 стакан һыу, 1 кг ҡурай еләге һалып, талғын утта ҡайнар хәлгә еткерегеҙ. Ҡайнатманы шәкәр һәм еләктәр янып китмәһен өсөн даими болғап торорға кәрәк. Ҡайнатма әҙер булғас, 2 балғалаҡ лимон кислотаһы һалығыҙ. Еңелсә һыуынғас, банкаларға һалып, һалҡын урынға ҡуйырға онотмағыҙ.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАРА ҺАҠАЛЫҢ...

## ҡайҙа барһаң да эйәреп барыр

Ата-инә берҙәм булһа, балалары күндәм була.

Башһыҙ өйҙә ата тороп - ул һөйләр, инә тороп - ҡыҙ һөйләр.

Әсәм яҡын булһа ла - арба артынан баралыр; бисәм ситтән булһа ла - янда ултырып баралыр.

Иртә барһаң - ит бешә, һуңға ҡалһаң - бит бешә.

Һөнәре бар ҡом өҫтөндә кәмә йөрөтөр.

Юҡтан бар булған - Тәңре менән тиң булған, барҙан юҡ булған - үлем менән тиң булған.

Ҡомһоҙ ҡоторһа - ҡоҙоҡҡа ҡармаҡ һалыр, ялҡау ҡоторһа - байрамда эшкә барыр.

Кеше белем менән, ер яуын менән йәшәрер.

Аҡыллының ҡәҙере ахмаҡ янында беленер.

Ҡәҙерен белмәгән байлыҡтан ҡәҙерен белгән ярлылыҡ артыҡ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Юлсы бер ауылдан икенсеһенә китеп бара, ти. Ярты юлды үткәс, уның алдында матур ялан пәйҙә була. Уның тап уртаһында ботаҡтарын киң йәйгән манго ағасы үҫеп ултыра. Уның ботаҡтары һәм япраҡтары аша ҡояштың бер нуры ла үтмәй, ти. Юлсы ошо ағас аҫтына ятып, ял итергә була. "Ҡайһылай матур ботаҡтар! Ә емештәре һуң, емештәре! Эйе, был ағасты барлыҡҡа килтереүсе ахмаҡ түгелдер..." - тип һөйләнә үҙе. Шунан юлсы аяҡтарын һуҙып, уңайлы итеп урынлашып ала һәм тәрән уйға бата: "Ә шулай ҙа был ағасты барлыҡҡа килтереү эшен миңә йөкмәтһәләр, мин башҡа төрлө итер инем. Шундай ҙур ағас, ә емештәре шул тиклем бәләкәй. Алма саҡлы ғына бит. Эйе, һиҙелеп тора, был ағасты булдырыусы нимәнелер уйлап еткермәгән. Бына пальманы алайыҡ: үҙе манго ағасынан бәләкәйерәк, ә емештәре ҡалай ҙур. Ҡабаҡты алайыҡ: үҙе өй саҡлым, ә һабағы нәҙек кенә. Быларҙы барлыҡҡа килтереүсе барыбер ҙә улай уҡ аҡыллы түгелдер..." Шундай һығымтаға килә юлсы. Шунан тәбиғәттә ниндәйҙер етешһеҙлек табыуы менән ҡәнәғәтләнеп, йоҡлап китә.**

**Бер саҡ уның башына нимәлер ауырттырып килеп төшә. Ул ҡапыл уянып, тороп ултыра. Ҡараһа, эргәһендә манго ята. Баҡтиһәң, ботаҡтан өҙөлөп килеп төшкән икән. Юлсы, ауыртҡан ерен һыйпап, манго емешен усына һала ла, уға рәхмәтле ҡиәфәт менән текәлә. "Әлдә манго бәләкәй! Ҙурыраҡ булһа, әле тәбиғәткә һоҡланып ултыра ла алмаҫ инем! Юҡ, ни тиһәң дә, тәбиғәт үҙ эшен белә икән!" - тигән һығымтаға килә ул..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:** **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Әхмәр ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 2806